*Уһышҡа өлгәшеү юлдары күплеген белһәң, аптырар инеңме? Тағы ла... һәр хәл-ваҡиғаға ҡарата кәрәкле яуап табыу мөмкинлегең дә бик күп. Бөгөн өлгәшелгәндәр ул һинең ана шул күптәрҙең береһен һайлау һәҙәмтәһе икәне менән килешәһеңме? Әгәр ҙә килешһәң, һин, тимәк, нимәнелер үҙгәртер өсөн тап шул юлды һайлағанһың булып сыға? Шуға ла ниндәй генә хәлдә лә һин үҙеңә: "Мин үҙ тормошомда үҙем хужа," - тип әйтә алаһың.*

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21 - 27 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№38 (560)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Атай нимә хаҡында онотҡан?**



6

**Һәр ташҡа яҙылған тарих...**

китап биттәренә күсте



7

**Үҙе ҡолаған бала...**

аяғына үҙе баҫып өйрәнһен



8-9

**Матбуғат һүҙе...**



ниндәй көскә эйә?

11

14 **ТВ-программа**

### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Тиҙҙән интернет селтәрендә Башҡортостан Хөкүмәтенең "Башҡортостан Республикаһы тауышы" тигән яңы порталы эшләй башлаясаҡ. Халыҡ фекерен туплау өсөн ойошторолған был сайтҡа һеҙ нимәләр тураһында яҙыр инегеҙ?

***Мазһар ИСӘНБАЕВ, иҡтисад фәндәре докторы, академик:*** Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең порталы булғас, ул республикабыҙҙың социаль-иҡтисади ҡеүәтен арттырыу өсөн эшләүсе етди һәм реаль проекттар банкына әүерелергә тейештер, тип күҙ алдына килтерәм. Шуға күрә, күп йылдар Башҡортостан иҡтисады буйынса эшләгән белгес булараҡ, республика етәкселеге иғтибарын тағы ла Урал зонаһына ҡағылышлы мәсьәләгә йәлеп итергә теләйем. Был йәһәттән өс тәҡдимем бар. Тәүгеһе унын бынан 60 йыллап элек ҡуйылған булһа ла һаман да актуаллеген юғалтмаған, ләкин һаман да иғтибарҙан ситтә ҡалып килгән баҡыр колчеданы рудаһын һөҙөмтәле файҙаланыу, йәғни тәрән эшкәртеү мәсьәләһенә ҡағыла. Заманында был проект совет осоронда эшләгән хөкүмәт тарафынан да, Юғары Советта ла, партия өлкә комитетында һәм унан һуңғы власть органдарында ла тикшерелеп, хәл итергә тигән ҡарар ҙа сығарылғайны хатта. Тик ул ҡағыҙҙа тороп ҡалды. Дөрөҫ, мәсьәлә ҡатмарлы, байтаҡ финанс талап итеүҙә, ләкин һөҙөмтә үҙен икеләтә, өсләтә аҡлар ине, әлбиттә. Төҫлө металл рудаһын тәрән эшкәртеү юлы менән унан 40-лаған төрлө элемент айырып алырға була, ә беҙҙә ни бары дүртәү генә. Ҡалған сеймал Свердловск, Силәбе өлкәләренә ебәрелә һәм уның ҡайтмағын улар йыйып ала. Сибай, Учалы, Хәйбулла яҡтары өсөн экологик проблемалар тыуҙырып, тау-таш йыртып, беҙ табабыҙ, ә ысын хазина ситкә китеп тора. Икенсенән, Урал зонаһының төрлө төҫлө таштарға бай булыуын да беләбеҙ. Хәҙерге ваҡытта ул таштарҙы ситтән килеп урлаусылар күбәйҙе: Мәскәү, Санкт-Петербург, Силәбе һәм башҡа яҡтарҙан килеп ташыйҙар. Беҙгә үҙебеҙҙә ана шул таштарҙы эшкәртеү предприятиелары асырға кәрәк. Күпме килем алыныр ине! Аяҡ аҫтындағы хазинаның ҡәҙере юҡ, тапап йөрөйбөҙ. Урман, ағас хаҡында ла шуны уҡ әйтер инем. Урындарҙа бура, төҙөлөш материалдары, мебель етештереүсе һәм ағастан башҡа төрлө әйберҙәр эшләүсе предприятиелар асҡанда, халыҡҡа ла эш булыр ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### ШАҒИР ҺҮҘЕ

***"Шағир һүҙе" рубрикаһын артабан да дауам итергә теләйбеҙ. "Бабич, Рәми, Биишева шиғырҙары менән башлап, был рубрикаға юғары кимәл нарыҡланығыҙ", тип әйтеүселәр бар барлыҡҡа. Әммә ләкин ил, ер, ватан, милләт, туған тел, рух тураһында әлеге шағирҙар кимәлендәге әҫәр яҙыусылар замандаштар араһында ла булыр, тип ышанабыҙ. Шиғырҙар көтәбеҙ. Ә был шиғырҙың авторы шағир түгел. Әммә... Хәйер, уның әҫәрен уҡыусы үҙе баһалар. Авторҙың үҙ исемен белдерергә теләмәүе лә - уның ихтыярында.***



## ТЕРЕ ТАМСЫ

*Донъя халыҡтары - ғәләм икән,*
*Киң ғәләмдә башҡорт - тик бер тамсы...*
*Башҡортмон тип мин дә ут йотамсы,*
*Башҡортом тип мин дә йән атамсы:*
*Шул тамсыны мин дә балҡытһамсы,*
*Шул тамсыла мин дә яҡтырһамсы!*

*Сит яҡтарға ҡылдым сәйәхәттәр,*
*Сит ҡитғалар күрҙем: нәҡ йәннәттәр!*
*Ҡәүемдәре йәшәй (э)рәхәттә,*
*Дәүләттәре йәшәй бәрәкәттә,*
*Йәйғор һымаҡ күркәм халайыҡтар*
*Һоҡланыуға ғына, аһ, лайыҡтар!...*
*Ә мин ҡайтам һағынып башҡортомдо,-*
*Ташлай алмам инде был холҡомдо...*

*Гел нур түгел башҡорт яҙмышҡайы,*
*Әммә "башҡорт" тиеү - миңә нур ул,*
*Башҡорт теле миңә - йәм-хозур ул,*
*Донъя халыҡтары араһында*
*Башҡорт - минең өсөн - ай-ҡояштан,*
*Йондоҙҙарҙан, асмандарҙан ҙур ул.*

*Тамсы - кескәй генә (яҡшы беләм),*
*Тамсыла ла мәгәр сағыла ғәләм:*
*Башҡорт булып һәр саҡ йылап-көлһәм,*
*Башҡорт булып һөйһәм һәм һөйөлһәм*
*(Ялуарырмын һинән, Хаҡ Тәғәләм!),-*
*Мин бит Ерҙә иң бәхетле әҙәм.*

*Башҡорт бөтә, тиеп, бәлки, кемдер*
*Ясин сығармаҡҡа яныр-көйрәр,*
*Башҡорт рухын, бәлки, гүргә һөйрәр...*
*Ләкин инанғанмын: һаманда ла,*
*Киләсәкке космик заманда ла*
*Ҡурай көйләр, башҡорт теле һөйләр!*

*Донъя халыҡтары - ғәләм икән,*
*Киң ғәләмдә башҡорт - тере тамсы...*
*Башҡортмон, тип мин дә ут йотамсы,*
*Башҡортом, тип мин дә йән атамсы.*
*Тамсы ғүмерен мин дә балҡытһамсы!*
*Тамсы ғүмерендә яҡтырһамсы!*

**ҒӘБИҘӘ.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БИТАРАФЛЫҠҠА...

## ...төртөп күрһәтергә кәрәк

**Илһам ИМАЕВ, Иглин районы Үктәй ауылы биләмәһе башлығы:** Күршеһендә берәү хет бер-береһен туҡмап, үлтерешеп бөтһөн, икенсе күршеһе был тауышҡа ҡолағын яба. Бына ошондай "Минә теймәһә, еткән", тигән ҡараш менән көн күреүселәрҙә була торған битарафлыҡ, ғәмһеҙлек -иң күңелде ҡырғаны шул. Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим әйткәнсә: "...Ғәмһеҙҙәргә генә бер ҡошом юҡ, әйҙә, улар ҡошһоҙ торһондар...". Ғәмһеҙҙәр һәр заманда ла булған инде ул, уларға ҡарата башҡаларҙың мөнәсәбәте бер ваҡытта ла ыңғай булмағандыр, моғайын. Минең үҙемдә был ғәҙәт юҡ, шулай ҙа "беҙ" тип һөйләйем, сөнки үҙемде халҡымдың бер өлөшө тип һанайым. Ни өсөн шулай моңһоҙҙарбыҙ беҙ? Битараф булыуыбыҙ арҡаһында яҡшы тормошҡа ынтылышыбыҙ юҡ, тормошҡа ла, нисектер, ситтә ҡала торған ят тукталышҡа ҡараған кеүек ҡарайбыҙ.

Уйлай китһәң, халҡыбыҙ араһында шул уҡ берҙәмлек юғалыуы ла эсте бошора бит, туғандар. Элегерәк, беҙ бала саҡта ғына әле, ауылдарҙа ҡаҙ өмәһе, һуғым һуйыу, бура күтәреү кеүек матур, күңелле өмәләр йыш үтә ине. Хәҙер шундай матур ғәҙәт тә онотола төштө. Ярҙам һорап, берәй ауылдашыңа барһаң, ул һинән: "Күпме түләйһең һуң?" - тип һорай һала. Аптырауға ҡалаһың... Бер-береңә ярҙам итеүгә килгәндә, һәр кемдең күңел түрендә кешелеклелек тигән изге хис була ул, ләкин ул хис көндәлек ығы-зығылар ҡатлауы, минминлек япмаһы аҫтында баҫылып ята ниңәлер. Бына ошо ауыр япманы асыр өсөн күп тырышлыҡ һалырға кәрәк.

Эстән генә уйланып, һыҙланып йөрөүҙән эш сыҡмай, шуға күрә кешеләр менән үҙебеҙҙең бәләләр тураһында уртаға һалып һөйләшергә кәрәктер, тип уйлайым. Һәм эште үҙендә үҙгәртеүҙән башларға кәрәк. Үҙенде үҙгәртмәй тороп, үҙеңдә йәшеренеп ятҡан изгелек саткыларын иң тәүҙә үҙең тоҡандырып, башҡаларға күрһәтмәй тороп, артыңдан халҡыңды эйәртә алмаясаҡһың.

Әлбиттә, беҙ әле атаған алама күренештәрҙе бөтөрөү өсөн ниндәйҙер тетрәнеүҙәр аша үтергә лә була. Һуғыш афәте, башҡа бәләләр һәр заманда ла халҡыбыҙҙы берләштергән, дошманлашҡан ырыуҙарҙы ла ярашторған. Әммә мин халҡыма бындай тетрәнеүҙәр теләмәйем. Тыныс юл менән берләшеү сараһы тураһында уйлашырға кәрәк.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**_Тиҙҙән интернет селтәрендә Башҡортостан Хөкүмәтенең "Башҡортостан Республикаһы тауышы" тигән яңы порталы эшләй башлаясаҡ. Был халыҡ фекерен туплау өсөн ойошторолған сайтҡа һеҙ нимәләр тураһында яҙыр инегеҙ?_**

**(Башы 1-се биттә).**

***Тамара ҒӘНИЕВА, шағирә:*** Ниндәй заманда, ниндәй йәмғиәттә йәшәүебеҙгә ҡарамаҫтан, капитализммы, социалистик ҡоролош булһынмы йәки демократик йәмғиәт тип иғлан ителһенме - халыҡ менән власть берҙәмлегенең тулы мәғәнәһендә ғәмәлгә ашырылғаны юҡ әле. Мин бына ошо юҫыҡта һүҙ алып барырға теләр инем. Халыҡ менән власть араһындағы бушлыҡтың тәрәнәйә барыуы күңелгә бер ниндәй ҙә оптимизм өҫтәмәй. Халыҡ мәнфәғәтен яҡларға тейешле парламенттар депутаттары араһында ла фәҡәт чиновниктар, үҙ яғын ғына ҡайырыусы олигархтар, уҙа барһа, власть органдарының "күстәнәс"тәренә ымһынған ярамһаҡтар ултыра, ә халыҡтың нужаһын, уның эске кисерештәрен белгән, халыҡ араһынан сыҡҡан вәкилдәр юҡ кимәлендә, шуға күрә уларҙың фекеренә ҡолаҡ һалыусы ла юҡ хатта. 20-25 йыл эсендә халыҡтың тел-тешһеҙлеген яҡшы төшөнгән ҡатлам бығаса һис мөмкин булмаған, дәүләттекенә параллель яңы система төҙөүгә өлгәште. Был система дәүләт ҡоролошо системаһы менән йәнәшә йәшәй, камиллаша, ул үрмәксе ауы кеүек: бер урындағыһы йыртыла ҡалһа, күҙ асып йомған арала икенсе ерҙә сырмаҡланырға тотона. Ул рәсми телдә коррупция тип атала. Уны беҙ дәүләт ҡоролошо системаһы менән йәнәшә йәшәй, тинек һәм, тәбиғи, дәүләт системаһындағы бөтә тәр структуралар: полиция, прокуратура, юрисдикция, сауҙа, хеҙмәтләндереүҙең бөтә тармаҡтары, юғары власть чиновниктары, иҡтисадсы, депутат, медицина, уҡыу-уҡытыу өлкәһе - ҡыҫҡаһы, өйөр-кландар торғаһы менән дәүләт структураларының күләгәһе ул. Әгәр мин хөкүмәт составында эшләгән чиновник булһам, нәҡ халыҡ ихтыяжын яҡшы белгән, гуманизм принциптарына нигеҙләнгән йәмәғәт ойошмалары менән килешеп эшләү яғында булыр инем, сөнки был ойошмалар йәмғиәттең пульсын юғарынан ҡарап түгел, үҙе ҡапшап ҡарағаны өсөн яҡшыраҡ белә.

***Илһам ЯХИН, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы:*** Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ише юғары башҡарма власть органы порталын булдырыуҙы хуплайым һәм уның ысын мәғәнәһендә халыҡ трибунаһына әүерелеүен теләйем. Унда урын аласаҡ тәүге хәбәрҙәрҙең береһе минеке булырға тейеш, тип, уның ҡасан эш башлауын көтөп тә тормаҫтан, мин үҙемде бик тә борсоған ошо фекеремде белдерергә ашығам: законлы рәүештә дәүләт теле тип танылған башҡорт телен уҡытыуҙы тыйырға бер кемдең дә хаҡы юҡ! Ҡайһы бер ҙур етәкселәрҙең, теләге булған кешеләр башҡорт телен мәктәптә уҡымаһа ла өйрәнә ала, тип, законды боҙоуға өндәүе республикала йәшәүсе урыҫ, татар һәм башҡа халыҡтарҙа башҡортҡа ҡаршы ризаһыҙ һәм түҙеп торғоһоҙ мөнәсәбәт тыуҙырыуға сәбәп булып тора. Аҫаба халыҡ мәнфәғәттәре былай ҙа ҡыҫылғандан-ҡыҫыла. Үҙ еребеҙҙә беҙ хәҙер үгәйгә әйләндек инде күптән. Дәүләт хеҙмәте органдарына ғына түгел, Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтайға ла юл ябылды хәҙер беҙҙең халыҡ вәкилдәренә. Быны дәлилләү өсөн баш ҡалабыҙҙың үҙем йәшәгән Затон ҡасабаһы буйынса Ҡоролтайға һайланыусы депутатлыҡҡа кандидаттар исемлеген килтереү ҙә етә: ышанаһығыҙмы, юҡмы, әммә исемлектәге 10 кандидат араһында бер генә башҡорт та булманы!

Әйткәндәй, беҙҙең егеттәрҙең күбеһе эш юҡлыҡтан Себергә китеп урынлаша йә вахта ысулы менән эшкә йөрөй, шул уҡ ваҡытта Башҡортостанға ситтән - Кавказ яҡтарынан һәм Урта Азиянан - ғаиләләре менән генә түгел, бөтөн туған-тыумасаһы менән күсеп килеүселәр ағымы туҡтамай. Өфө урамдарында осраған биш кешенең өсәүһе - ситтән килгән халыҡ. Ситтән килгән халыҡ бит һөмһөҙ рәүештә хатта ауылдарыбыҙға килеп ултыра башланы. "Быны нисек аңларға?" тигән яҙыу ҙа ҡалдырыр инем әлеге яңы асыласаҡ порталда...

***Луиза ФАРХШАТОВА, журналист:*** Был порталды мин элекке замандарҙа ярайһы ғына етди функция үтәй торған халыҡ контроле комитеты ролендә күрергә теләр инем. Унда инеп, Башҡортостандың һәр гражданы, мәҫәлән, республикабыҙҙың бюджет системаһы буйынса үҙен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуаптар, башҡа төр мәғлүмәттәр ала алһын ине. Теге йәки был өлкәгә бүленгән бюджет сығымдары адресына барып еткәнме, юҡмы; әгәр юҡ икән, быныҡ сәбәптәре күрһәтелеп, ғәйепле чиновниктарҙың ниндәй яуаплылыҡҡа тарттырылыуы хаҡында ла мәғлүмәттәр булырға тейештер, тип уйлайым. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, бюджет сығымдарының үтә күренмәлелеге тәьмин ителһен ине, юғиһә, тәғәйен бер өлкәгә адресланған халыҡ аҡсаһын күҙ ҙә йоммай үҙләштереү, тәләфләү, үҙ белдеклеләнеп, уның менән үҙҙәре теләгәнсә "эш итеүселәр" айырыуса күбәйҙе бит. Насар ғәҙәт йоғошло була, тигәндәй, Сердюков ише "өлгө" күрһәтеүселәрҙе власть органдары тирәһенә яҡын да юлатырға ярамай.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 384 һум 36 тингә, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 414 һум 36 тингә яҙылырға була.**

Сентябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урыныңыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **246 һум.**

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум.**

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "2013 йылда Республика көнөнә әҙерлек һәм уны үткәреү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, Республика ойоштороу комитеты составы раҫланды, ул байрамға әҙерлек сараларына контроллек итәсәк.

✔Республика Президенты Рөстәм Хәмитов БР бишенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайын саҡырыу тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, Башҡортостан парламентының тәүге ултырышы 2013 йылдың 3 октябрендә үтә.

✔Башҡортостанда Берҙәм ышаныс телефоны эшләй башланы. 8-800-7000-183 номеры буйынса бушлай шылтыратып, ауыр тормош хәлендә ҡалған кешеләр тәүлектең теләнә ҡайһы ваҡытында квалификациялы психологик ярҙам ала аласаҡ. БР Хөкүмәте вице-премьеры Лилиә Гүмәрова һөйләүенсә, әлеге башланғыс "Ныҡлы ғаилә" партия проекты сиктәрендә тормошҡа ашырыла.

✔Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте 2014 йылдың тәүге яртыһына матбуғатҡа яҙылыуҙы ойоштороу тураһында махсус бойороҡ ҡабул итте. Уға ярашлы, башҡарма власть органдарына төрлө предприятиелар, ойошмалар, китапханалар, мәктәптәр, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт учреждениелары өсөн ваҡытлы матбуғат баҫмаларына яҙылыуҙы ойоштороу йөкмәтелде.

✔"Кроношпан-Башҡортостан" производствоһының тирә-яҡ мөхиткә йоғонтоһона баһа биреү буйынса йәмәғәт тыңлауҙары 10 октябрҙә үтә. Бындай ҡарар Өфө районы муниципаль район Советы менән ҡабул ителде. Йәмәғәт тыңлауҙары Өфө районы Алексеевка ауылы, Үҙәк урамы, 52 адресы буйынса район мәҙәниәт йортонда үтә. Башлана - 14 сәғәттә.

✔"Рихард Зорге" һәм "Спорт һарайы" туҡталыштары араһындағы трамвай юлдарын ремонтлау өфөләләр өсөн бер аҙ уңайһыҙлыҡтар ҙа тыуҙырғайны. Үткән аҙнала унда ҡайһы бер маршруттар тергеҙелде. Хәҙер Чехияла һәм Европаның башҡа илдәрендә ҡулланылған технологиялар буйынса һалынған юлдарҙан трамвайҙар бөтөнләй тиерлек тауышһыҙ йөрөй.

***✓ Ул бәхетле тауыштарҙы хәҙер сусҡа сыйылдауы алмаштырҙы. Балаларҙың барыһы ла ситтә төпләнде һәм ата-әсәһе мәңгелек донъяға күскәс, бәхетле баласаҡ иле шунда уҡ һатылды.***

*ШАҢДАУ*

# ЙОРТОН ҺАТЫУСЫМЫ?

## Ул - тыуған еребеҙҙе һатыусы ла

**Гәзиттең 33-35-се һандарында Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың "Ереңде һатһаң, ауылыңа һат, бер ситенә үҙең барып ултырырһың" тигән мәҡәләһе үҙенең тыуған ауылы, туған халҡы яҙмышы өсөн битараф булмағандарҙы уйландырмай ҡалмағандыр. Үкенескә күрә, һуңғы йылдарҙа ауылдарҙа иҫке йорттарҙы ситтәргә һатыу шул уҡ ер һатыу менән бер үк проблемаға әүерелә бара. Мәҡәлә авторы әйткәненсә, әгәр ҙә өй үҙе генә һатылып, ҡутарылып ситкә алып кителһә, бер хәл, һәр осраҡта ла тиерлек иҫке йорттарҙы һатып алыусы шул урында үҙенә һәм туғандарына ғүмергә йәшәрлек йәшәү хоҡуғын да һатып ала. Тора-бара был хоҡуҡ киңәйә төшә һәм, ахырҙа, аҫаба халыҡ үҙе килмешәккә әүерелә башлай. Бынан нимә килеп сыға: иҫке өйөн һатыусы кеше тыуған еребеҙҙе ситтәргә һата. Йорт, өй менән бергә атай-олатайҙарыбыҙ быуаттар буйына изге ҡаны менән һуғарған йәнтөйәгебеҙ, шулай итеп, варисылыҡҡа бер ниндәй ҙә мөнәсәбәте булмаған килмешәктәргә һатыла.**

Еребеҙҙе сит-ят тарафтан килгән кешеләргә һатыу ниндәй һәләкәткә килтерәсәге тураһында әлегә аңлап етмәйбеҙ, буғай. Дөрөҫөрәге, был хаҡта уйланырға ваҡытыбыҙ, ә, бәлки, теләгебеҙ юҡтыр. Һөҙөмтә тик бер төрлө генә буласаҡ: беҙ тыуған ерһеҙ тороп ҡаласаҡбыҙ. Аҙаҡтан, аҡылыбыҙға килеп, үҙ еребеҙҙе үҙебеҙ кире һатып алырҙай булырбыҙ ҙа ул, тик улар һатырмы икән шундай гүзәл төбәкте?

Ситтән ағылған төрлө милләт вәкилдәре беҙҙең иң матур, иң хозур тәбиғәтле еребеҙгә урынлашырға тырыша. Бынан бер нисә йыл элек Баймаҡ ҡалаһының Кәкреауыл биҫтәһенә Кавказ халҡының бер вәкиле килеп ултырҙы. Алама ғына өй урынында кирбестән ҙур йорт ҡалҡты. Ошо ирҙең, йорто янынан ғына аҡҡан Таналыҡ йылғаһының ярында, донъя хужаһындай баҫып тороуын күреү йәнде ытырғандыра ине. Юҡ, был ниндәйҙер милләтте үҙ милләтемдән кәмерәк күреү түгел, ә элек-электән башҡорттар төйәге булған, үҙенсәлекле Кәкреауылда ят көйҙәр яңғырауынан, сусҡа сыйылдауын ишеткәндән булды, шикелле.

Был урындағы йортта өс бала үҫтереп, үҙ аллы тормошҡа осорған бәхетле ғаилә йәшәй ине. Йорттан бәхетле баласаҡ илендә йәшәүселәрҙең шаугөр килеп уйнауҙары, шат тауыштары яңғырап ишетелеп тора ине. Ул бәхетле тауыштарҙы хәҙер сусҡа сыйылдауы алмаштырҙы. Ҡабат бала тауыштары яңғырамаҫ та инде. Балаларҙың барыһы ла ситтә төпләнде һәм ата-әсәһе мәңгелек донъяға күскәс, бәхетле баласаҡ иле шунда уҡ һатылды. Әлбиттә, алама булһа ла, ергә һеңеп барған өйҙөң матур ерҙә урынлашыуына ҡыҙыҡҡан кешеләр күп булды. Тик кисәге балалар, хәҙерге юғары белемле башҡорт кешеләре, ата йортон аҡсаны иң күп биреүсегә осорҙо. Яҡын туғандарының:"Беҙҙең балалар йәшәп торһон, аҡсаһын кредит алғас түләрҙәр", - тиеүенә ҡолаҡ та һалманы улар. Был күренеш фәҡәт тыуған ереңә, халҡыңа хыянат, атай-олатайҙарыңдың йөҙөнә төкөрөү тип кенә баһаланырға хаҡлылыр. Эйе, әҙәм балаһына, был тормошҡа мәңгелеккә килгән кеүек, ахмаҡлыҡтар ҡылыу хас шул. Ата-бабаларҙың тыуған тупрағы өсөн яуҙа ҡаны түгелгән Таналыҡ буйында сит моң яңғырай хәҙер...



Райондың иң хозур тәбиғәтле булып һаналған бер нисә ауыл биләмәһендә лә ситтән күсеп килеүселәр барлыҡҡа килеүе борсоуға һала. Ырымбур, Орск һәм башҡа яҡтарҙан килгән кешеләр эйәһеҙ ҡалған йорттарҙы үҙ итеп, рәхәтләнеп йәшәй. Йәшәмәй ни - балығы ла, бәшмәге лә, еләк-емеше лә иҫ киткес күп бында. Ә һауаһын һулап туйғыһыҙ!

Шулай өйөн ситтән килгән кешегә һатҡан берәү менән һөйләшәм. Ни өсөн ата йортон ситтәргә һатыуын һорағас, "Аҡса кәрәк тә инде, Баймаҡта өй һалам", ти был күҙен дә йоммай. "Һатыуын һатҡас, бәлки, үҙ ҡәрҙәштәреңә, ауылдаштарыңа һатырға кәрәк булғандыр. Исмаһам, бала сағыңды хәтерләп, йортоңа инеп сыға алыр инең",тиеүемә яурындарын һелкетеп кенә ҡуйҙы. Эйе, был әҙәм балаһы ла аҡсаға ҡыҙығып, ата-әсә йортон тиҙ арала һатып ебәргән. Хәҙер бына өйҙө хаҡлы ялдағы кешеләргә һатыуын уларҙан ауылға бер ниндәй ҙә зыян килмәүе менән аҡларға маташа. "Улар күренмәй ҙә ул. Етәкләшеп урманға сығалар, магазинға киләләр ҙә, тағы күренмәйҙәр", - тигән була.

Ә минең белеүемсә, хәҙер был ғаиләнең тағы бер нисә танышы ауылдағы буш йорттарҙы ҡарай, уларҙың хужаларын эҙләй. Эйе, улар ҙа өлкән кешеләр. Әммә һәр әҙәм балаһының донъяға мәңгегә килмәүен онотмайыҡ. Башҡорт ауылында рәхәтләнеп көн иткән ғаиләләрҙең йорттары ваҡыт үтеү менән балаларына ҡалыр. Ә улар быңдай матур ерҙә урынлашҡан өйҙө һатмаясаҡ, дача урынына тотасаҡ. Аҙмы ни шулай йорттарҙы һатып алып, ҡышҡыһын - һунар, йәйгеһен ял итеү өсөн тотҡан кешеләр...

Яныраҡ Ғәле ауылында тағы булырға тура килде. "Тағы" тип әйтеүем осраҡлы түгел, был ауылда Аманъюл Биксурин атлы бик шәп ауыл аҡһаҡалы йәшәй. Ул йыш ҡына журналистарға мөрәжәғәт итеп, ярҙам итеүҙе һорап ялбара. Аҡһаҡалды тик бер мәсьәлә борсой - Ғәле ауылын һаҡлап ҡалыу. Матур тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан Ғәле лә сит-яттарҙың "дачаһына" әүерелеп бара. Ә кем ғәйепле һуң? Ошо ауылда тыуып-үҫеп, кеше булып, хәҙер ата-әсә йорттарын уйламайынса һатыусылар, әлбиттә. Аманъюл Биксурин да бар районға һәм республикаға: "Сығышы менән Ғәле ауылынан булғандарға ерҙе бушлай биреп, ауылды һаҡлап ҡалайыҡ!"-тип оран һала.

Ауыл биләмәһе башлыҡтарының: "Эйе, ата-әсәһе вафат булыу менән балалары йортто тиҙерәк һатып ебәреү яғын ҡарай. Әлбиттә, улар өйҙә кем йәшәйәсәге, ауылдың киләсәге хаҡында бөтөнләй уйламай, ә ҡулына күберәк аҡса төшөрөүҙе генә хәстәрләй", - тип аҙарыныуы юҡҡа түгел бит. Бында тағы ла бер урынлы һорау тыуа: ошо ауыл биләмәһе башлығы булғандарға ауылында кем йәшәһә лә барыберме икән? Тимәк, был мәсьәлә дәүләт тарафынан да тейешле закондар, ҡағиҙәләр менән көйләнергә һәм биләмә башлыҡтары ауылдан китеүселәр-килеүселәр мәсьәләһен үҙ контроленә алырға тейештәр. Әгәр ҙә шулай булмаһа, "Власть - халыҡ өсөн" тигән һүҙҙәр ҡоро лозунг ҡына булып тороп ҡаласаҡ. Ә беҙ тарихтан шундай факттарҙы ла беләбеҙ: әйтәйек, Башҡортостан кантонлыҡтарға бүленгән заманда бер башҡорт ауылына үҙ иленән ҡасып килеүсе бер ҡаҙаҡ ғаиләһен урынлаштырыу мәсьәләһе лә губернаның иң юғары чиновниктары тарафынан хәл ителгән. Ә хәҙерге хәлдәргә килгәндә, Әхмәр ағай дөрөҫ әйтә: "...ауылдарыбыҙҙың ҡапҡаһы милләттәштәребеҙҙең күңеле кеүек шарран асыҡ..."

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошондай аяныслы хәлдең тотош Башҡортостанда күҙәтелеүе ҡыҙғаныс. Бындай хәбәрҙәр Әбйәлилдән дә, Ишембайҙан да килеп тора. Ауылдар ере менән бергә, үҙ йөҙөн, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын юғалта. Уйлап ҡараһаң, сит тарафтарҙан болоттай ағылған мигранттарҙың беҙҙең ерҙә төпләнеп ҡалырға ынтылыуы юҡҡа түгел бит. "Беҙҙең халыҡ сабыр, күндәм" тип маҡтанырға ятабыҙ. Бәлки, киләсәгендә хәстәрләгәндә күндәм булыу гонаһтыр? Балаларыбыҙҙы үҙ ерендә, тыуған тупрағында килмешәк хәленә ҡалдырырға теләмәһәк, хәҙер, ошо секундта уйланырға, аҡылға килергә кәрәк.**

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**
**Баймаҡ районы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓1 октябрҙән Башҡортостан юлдаш каналы "Триколор" Рәсәй операторы пакетына инә. Хәҙер башҡорт телевидениеһын кабель селтәрҙәрҙә һәм юлдашта ғына түгел, ә Рәсәйҙең үҙәк өлөшөндә лә, өлөшләтә Европала ла ҡарап буласаҡ.

✓Өфөнөң Дим районында, Правда урамындағы аллеяла "Кувшиндар тотҡан ҡыҙ" фонтаны асылды. Фонтан диаметры - дүрт метр, унда 24 форсунка һәм 4 плафон бар, улар киске ваҡытта һыуҙы яҡтыртып торасаҡ.

✓26-27 сентябрҙә Өфө районының "Восход" ял базаһында X Республика йәш журналистар фестивале үтәсәк. Башҡортостандың йәш журналистары алдында лекциялар һәм оҫталыҡ дәрестәре менән республиканың алдынғы баҫмалары вәкилдәре сығыш яһаясаҡ.

✓Башҡортостандың иң яҡшы урман ҡырҡыусыһы исеменә Әбйәлилдә үткән республика конкурсында "Тәтешле урманы" дәүләт унитар предприятиеһы вәкилдәре - урман ҡырҡыусы Фидан Муллаяров һәм уның ярҙамсыһы Әҙип Бәҙретдинов еңеүсе булды. Йола буйынса, киләһе бәйге еңеүселәрҙең тыуған яғында, йәғни Тәтешле районында үтәсәк.

✓М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры ҡарамағында "Самрау" балалар театр студияһы эшләй башлай. Студияла 10-17 йәштәрҙәге балалар өсөн уҡыуҙар башҡорт һәм рус телдәрендә ойоштороласаҡ. Һайлап алыу туры 21 һәм 22 сентябрҙә 15.00-17.00 сәғәттәрҙә Өфө ҡалаһы, Зәки Вәлиди урамы, 34 адресы буйынса театр бинаһында үтә. Студияға балалар уҡыу йылы дауамында буш урындарға ҡабул ителәсәк.

✓БР Мәҙәниәт министрлығы Башҡортостан Республикаһында Мәҙәниәт йылының иң яҡшы эмблемаһы проектына конкурста ҡатнашыу өсөн эштәр ҡабул итә. Конкурс материалдары электрон һәм яҙма төрҙә 15 октябргә тиклем Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 18 адресы буйынса 21-се бүлмәлә ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: 8(347) 280-87-70. Еңеүсе Диплом һәм 40 мең һум күләмендә аҡсалата приз менән бүләкләнәсәк.

**"Башинформ"дан.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# САНАНДЫ ЙӘЙ ӘҘЕРЛӘ...

**Баш ҡаланың ҡышҡы йылытыу миҙгеленә әҙерлеге буйынса уҙғарылған матбуғат конференцияһы махсус хеҙмәттәрҙең тап ошо халыҡ мәкәлен күҙ уңында тотоп эшләүен тағы бер тапҡыр раҫланы. Ҡаланың йәшәйешен тәьмин итеү буйынса идаралыҡ начальнигы Андрей Федосов белдереүенсә, 5946 күп фатирлы йорт йылытыу миҙгеленә әҙер. Шуларҙың 5133-ө - үҙәк йылытыу системаһына тоташтырылған. 1388 йортта гидропневматик йыуыу үткәрелгән.**

Йылытыу миҙгеле, ғәҙәттә, рәсми рәүештә сентябрҙең өсөнсө декадаһында асыла, тип ҡаралһа ла, уға әҙерлек уҙған миҙгел тамамланыу менән башлана. Быйыл, мәҫәлән, 17 майҙан ошо йүнәлештә ҡала штабы үҙенең эшен башлай ҙа инде. Бөгөнгә тиклем барлығы 17 кәңәшмә уҙғарыла.

Ҡыш - һыуыҡ миҙгел генә түгел, бөтөн донъяны ысын мәғәнәһендә аҡҡа күмеп, буранлап тороп ҡар яуыу ваҡыты ла. Әле баш ҡала барлығы 171 берәмек ҡар таҙартыу техникаһы тыныс ҡына эш башланыуын көтә. Шулай уҡ юлдарҙа боҙлауыҡ булыу ихтималлығын күҙаллап, тротуарҙарға һәм урам ихаталарына һибеү өсөн 6 мең кубометр ҡом әҙерләнгән. 655 социаль тәғәйенләнештәге объектта (дауалау-профилактика учреждениелары, балалар баҡсалары, мәктәптәр, балалар йорттары, өҫтәмә белем биреү учреждениелары, урта һәм юғары уҡыу йорттары) ҡышҡы йылытыу миҙгеленә әҙерлек тулыһынса тамамланған.

Торлаҡ йорттарҙы тәүлек әйләнәһенә хеҙмәтләндереү өсөн авария хеҙмәтенең 12 бригадаһы ойошторолған. Унда барлығы киң профилле 159 кеше, 14 техника йәлеп ителгән. Адреслы программаға ярашлы, 21 күп фатирлы йортта капиталь ремонт үткәрелгән, шулай уҡ 114 йорт ихатаһы ремонтланған. Инженер ҡоролмаларын һәм торба үткәргестәр заманса материалдар һәм технологиялар ҡулланып алмаштырылған. Дөйөм алғанда 23 километрҙан ашыу йылылыҡ селтәре (был дөйөм күләмдең 3 процентын тәшкил итә. Былтыр был күрһәткес 2,5 процент булған) һәм 6 километрҙан ашыу һыу торбалары - канализация селтәре яңыртылған.

Шулай уҡ, таҙалаған урында түгел, бысратмаған ерҙә таҙа, тигән кеүек, энергия һаҡлау ҙа йылытыу миҙгелендә әһәмиәтле урында тора. Был йәһәттән граждандарҙың үҙҙәренең ябай ғына ғәҙәттәрҙе ҡағиҙә итеп алыуы ла ҙур роль уйнай. Әлеге ваҡытта ҡала буйынса күп фатирлы йорттарға дөйөм йорт буйынса иҫәп алыу приборҙары ҡуйыу тамамланһа, фатирҙарҙың 46 процентына - газ, 65 процентына - һалҡын һыу, 68 процентына эҫе һыу ҡулланыуҙы иҫәпләү счетчиктары ҡуйылған.

Әйткәндәй, йылытыу миҙгеле кемдеңдер бойороғо йәки ҡарары буйынса түгел, ә тәбиғәт ғәләйәнәптәренең ҡанунына ярашлы башлана. Йәғни 5 көн дауамында һауа температураһы 5 градустан түбән була икән, йылылыҡ бирелә. Ә инде йылы фатирында иртәрәк иҙерәп йөрөргә теләгән милекселәр был мәсьәләне үҙҙәренең йыйылышында хәл итә.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

**Республиканың баш ҡалаһы булған Өфө хаҡында шулай тип әйтеү ҙә яҙыҡ түгелдер, моғайын. Ысынлап та, бында төҙөлөш йылдам темптар менән бара. Быны ҡала округы хакимиәтендәге сираттағы матбуғат конференцияһында йыл башынан алып башҡарылған эштәр хаҡында ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Александр Филипповтың дәлил итеп килтергән мәғлүмәттәре лә раҫлай.**



# ЙЫЛ ҮҪӘҺЕН КӨН ҮҪӘ

Мәҫәлән, быйыл 815 мең квадрат метр торлаҡты файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла. Был былтырғы менән сағыштырғанда 6 процентҡа күберәк. Бында ҙур өлөштө күп фатирлы йорттар төҙөлөшө алып торасаҡ, йәғни уларға 505 мең квадрат метр тура киләсәк. Был былтырғы күрһәткестәргә ҡарағанда 22 процентҡа күберәк. Шул иҫәптән социаль торлаҡ төҙөү ҙә күҙ уңында. Элек подрядсылар ҙур майҙанлы фатирҙар төҙөргә тырышһа, ваҡыт уларҙың көнүҙәк булмауын һәм уларға һорау юҡлығын асыҡланы. Хәҙер күберәген бер һәм ике фатирлы, майҙаны бәләкәйерәк (мәҫәлән, бер бүлмәле фатирҙың майҙаны 32 квадрат метр) майҙанлы фатирҙар төҙөү үҙен аҡлай. Социаль торлаҡтың квадрат метры бөгөн 31 мең һум тора һәм быйыл ошондай тәғәйенләнештәге 70 мең квадрат метр торлаҡ төҙөү планлаштырылған. Яҡын киләсәктә социаль торлаҡ төҙөү күләменең тағы ла артыуы ихтимал.

Шул уҡ ваҡытта социаль объекттар төҙөү ҙә иғтибар үҙәгендә. Быйыл Венгрия белгестәре 13-сө дауахана эргәһендә заманса яңы поликлиника төҙөһә, артабан бындай поликлиникалар баш ҡаланың һәр районында теркәү аласаҡ. Шулай уҡ балалар баҡсалары, спорт объекттары төҙөү ҙә көнүҙәк мәсьәлә булып тора.

Бөгөн баш ҡаланың "баш ауырыуы" - авария торошондағы торлаҡта йәшәүселәрҙе яңы фатирҙарға күсереү мәсьәләһе. Быйыл дөйөм майҙаны 45,3 мең квадрат метр булған 132 авария хәлендәге йортта йәшәүселәрҙе күсереү ҡаралған. Быны аҙмы-күпме икәнен белеү өсөн сағыштырыу килтереү урынлы: 2008 йылдан алып быйылғаса барлығы 186 йорт "күсенгән". Ҡала хакимиәте алдағы йылдарҙа ла быйылғы темпты һаҡларға тырышасаҡ.

Тағы бер сетерекле мәсьәлә булып төҙөлөш һәм ер бүлеү өлкәһендә тәртип урынлаштырыу тора. Сөнки киң мәғлүмәт саралары аша муниципалитет ҡарамағында булған ҡайһы бер ер участкаларының осоҡ ғына хаҡҡа һатылыуы асыҡланыуы күптән инде билдәле. Әлеге ваҡытта бушлай тиерлек һатылған ерҙәрҙе кире ҡайтарыу, ерҙәргә ревизия үткәреү, төҙөлөш буйынса ҡырын эштәрҙе асыҡлау бара. Юғары хоҡуҡ органдарына 150 ғариза бирелгән дә инде. Бөгөн "Косторама" һәм "Икеа" маркеттары араһында урынлашҡан 5 участкаға аукцион иғлан ителгән. Был ерҙәр заманында шулай "һуҡыр тингә" һатылған булған. Күптән түгел ҡаланың үҙәгендә - "Нур" татар театры артында урынлашҡан "Салауат Юлаев" стадионының һатылыуы тураһындағы хәбәр ҙә ҙур шаушыу тыуҙырғайны. Ул ер бөгөн, ысынлап та, шәхси ҡулдарҙа булһа ла, хужа, килешеү буйынса, ҡала хакимиәте ҡуйған шартты үтәргә бурыслы. Йәғни, был урында торлаҡ йорт, шулай уҡ коммерция йүнәлешендәге милек төҙөү ҡырҡа тыйыла. Унда бары тик спорт ҡоролмаһы ғына төҙөлөргә тейеш. Һөҙөмтәне инде ваҡыт күрһәтер...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШ ҠАЛАЛА...

## "аҡыллы селтәрҙәр"



**Башҡортостан Рәсәйҙә беренселәрҙән булып энергияны һаҡлау технологиялары буйынса "аҡыллы селтәрҙәр" системаһын индерә. Тәүҙә уны баш ҡалала һынап ҡарап, һуңынан тотош республикаға таратырға ниәтләй етәкселек.**

Был, әлбиттә, бер нисә йылға һуҙылыуы мөмкин. Айҙың тәүге декадаһында "БЭСК" асыҡ акционерҙар йәмғиәте менән "Сименс" яуаплылығы сикләнгән ширҡәт араһында Өфөнөң электр селтәрҙәре инфраструктураһын модернизациялау проектын техник-иҡтисади яҡтан әҙерләү буйынса хеҙмәт күрһәтеүгә килешеү төҙөлөү төбөктән смарт-йәмғиәткә инеүенең логик үсеше булып тора.

Smart-grid системаһы - селтәрҙәр менән идара итеү системаһы. Ул ваҡыты еткәс, аныҡ иҡтисади һөҙөмтә бирәсәк. Беҙ ремонтҡа әҙерәк ваҡыт сарыф итәсәкбеҙ, монитор аша тотош системаны күҙәтә аласаҡбыҙ: кем эшләй, нисек ремонтлайҙар. Энергия биреү сифаты шул кимәлдә ҡалғанда ла, селтәрҙәр һаны ҡырҡа кәмейәсәк.

Системаның Өфө өсөн файҙаһын билдәләп, ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов: "Беҙҙә йылытыу миҙгеле 220-230 көн дауам итә. Өфө - сәнәғәт предприятиелары булған миллионлы ҡала. Шуға ла энергия менән тәьмин итеү һәм энергия һаҡлау системаларының туҡтауһыҙ эшләүе - төрлө кимәлдәге властарҙың берлектәге өҫтөнлөклө эшмәкәрлеге булырға тейеш", - тип билдәләне.

Төҙөлгән килешеү сиктәрендә "БЭСК" ААЙ-е республика баш ҡалаһының электр селтәре комплексын модернизациялауға бер нисә миллиард һум һалырға әҙер. Был инде проекттың һуңғы тиҫтә йылдарҙа электр селтәре комплексында иң ҙур һәм әһәмиәтле булыуын аңлата.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Аксаков көндәрендә, 26-29 сентябрҙә, Өфөлә китапханасыларҙың бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһы һәм РФ Яҙыусылар союзы пленумының күсмә ултырышы үтә. Байрамға 50-нән ашыу ҡунаҡ килеүе көтөлә. Улар араһында Рәсәйҙең билдәле яҙыусылары ла бар. Сергей Аксаковҡа бағышланған тантаналы саралар 28 сентябрҙә Бәләбәй районында дауам итәсәк, 29 сентябрҙә Зубово һәм Иҫке Ҡыйышҡы ауылдарында фольклор байрамдары үткәреләсәк, ә Ҡырмыҫҡалыла "Шәжәрә байрамы-2013" ойошторола.

✓Режиссер Вилүрә Иҫәндәүләтованың "Ике килгән ғүмер" документаль фильмы Һамарҙа үткән V халыҡ-ара спорт киноһы фестивалендә еңеү яуланы. Фильм "Еңеп сығыу" ("Преодоление") номинацияһында иң яҡшыһы тип танылды. Жюри составында эшләүсе Халыҡ-ара спорт киноһы һәм телевидениеһы федерацияһы президенты Франко Аскани башҡа фильмдар менән бер рәттән, Италияға "Башҡортостан" киностудияһы фильмын да алып киткән. Ул әлеге документаль фильмды Миланда үтәсәк Халыҡ-ара спорт киноһы фестиваленең конкурс программаһына индерәсәк.

✓ "Бала табыу сертификаты" программаһы сиктәрендә республиканың медицина учреждениеларына 400 миллион һумға яҡын аҡса күсерелгән. Социаль страховка фондының төбәк бүлексәһенән хәбәр итеүҙәренсә, 1 сентябргә ҡарата мәғлүмәттәргә ярашлы, сумма 397,5 миллион һум тәшкил иткән. Республикала ағымдағы йылдың ете айында 36 590 сабый - 18 963 малай һәм 17 654 ҡыҙ тыуған. Улар араһында - 412 игеҙәк һәм 3 өс игеҙ бала. Башҡортостан тыуым күрһәткестәре буйынса Волга буйы федераль округында әүәлгесә алдыңғы урынды биләй.

✓Башҡортостанда эшһеҙлек буйынса пособиеның уртаса күләме 2013 йылдың августында 3804 һум тәшкил итте. Бер йыл элгәрәк - 2012 йылдың август айынан башлап - пособие күләме 6,7 процентҡа артҡан. 1 сентябргә республикала 23,5 меңдән ашыу эшһеҙ рәсми рәүештә теркәлгән. Уларҙың 43 проценты - ауыл халҡы. Мәшғүллек хеҙмәтендә иҫәптә торған эшһеҙҙәрҙең 64 проценты - ҡатын-ҡыҙ. Теркәлгәндәрҙең 20 проценты - 29 йәшкә тиклемге йәштәр, 12 проценты - пенсия алды йәшендәге кешеләр, 8 проценты - инвалидтар.

КӨН КҮРГӘН ШӨҒӨЛ

# АТЫҢ ҺАТ, ҺЫЙЫРЫҢ ҺАТ,



## алып ебәр кәзәкәй...

**Хеҙмәт баҙары, бәләкәй эшҡыуарлыҡ беҙҙең тормошобоҙға бөтә яҡтан да бик күп үҙгәрештәр алып килде. Элек беҙгә кәрәкле әйберҙе исемлек йәки талон менән алырға тура килһә, хәҙер баҙарҙа һәм магазинда әйбер өҫтөнә ишелеп килә, теләгәненде һайла! Шулай ҙа халыҡ аҙыҡ-түлекте күберәк баҙарҙан һатып ала. Сөнки шәхси хужалыҡтар һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡ етештергән продукция арзан да, сифатлы ла. Һатып алыусыға ла, һатыусыға ла яҡшы.**

1980-1990 йылдарҙа беҙҙең районда башҡорттарҙың милли бренды булған бейә ҡымыҙын табыуы ҡыйын ине, ә кәзә ҡымыҙы тураһында уйҙа ла булманы. 90-сы йылдарҙа ҡайһы саҡ баҙарҙа Рудник ҡасабаһынан бер ҡатындың кәзә ҡымыҙы һатып торғанын күргеләй инем.

Бөйҙә ҡасабаһынан Яҡуповтар ғаиләһе районда һәм Башҡортостанда беренселәрҙән булып кәзә ҡымыҙы етештереүгә тотонған кешеләр булғандыр. Улар 1995 йылда өс һауын кәзәһенән крәҫтиән-фермер хужалығы ойоштороп ебәрә. Үҙҙәренең фермаһын төҙөп, 2004 йылда уға "Йәншишмә"тигән исем бирәләр. Өс йыл буйы кәзә ҡымыҙы һатыуға сертификат ала алмай йөрөйҙәр. Сертификат алыу өсөн һарайҙарҙы санэпидстанция талаптарына яраҡлаштырып, яңынан төҙөргә тура килә. Беренсе йылда уҡ, 2004 йылда, 9 тонна ҡымыҙ етештерһәләр, 2005 йылда -12 тонна, 2006 йылда иһә 15 тоннаға еткерәләр һәм ошо йылда ҡымыҙ етештереүсе 100 хужалыҡ араһында беренсе урын яулаһалар, башҡа ярыштарҙа ла һинатмай улар - призлы урындар уларҙыҡы була. 2007 йылдан алып артабанғы өс йылда 25-тән 30 тоннаға тиклем арттыра улар ҡымыҙ етештереүҙе.

2012 йылда был шифалы эсемлекте һатыуы ҡыйынлаша, сөнки хәҙер уны һәр ауылда тип әйтерлек етештерә башланылар. Магазинда һәм баҙарҙа кәзә ҡымыҙы күп һатыла. Һәр кемдең үҙ технологияһы, үҙ рецепты бар. Ә мин үҙем һәр ваҡыт Яҡуповтар ҡымыҙына өҫтөнлөк бирәм, сөнки улар етештергән ҡымыҙҙың тәме үҙенә бер төрлө: сифатлы, тәмле, таҙалыҡ яғынан да улар күптәргә өлгө. Ә бит ҡайһы бер урында кәзәләрҙең таҙалығына ышаныс юҡ, улар төрлө ерҙә көтөүһеҙ йөрөй, ә Яҡуповтарҙың малын көҙөн дә, яҙын да ветеринар тикшереп, ауырыуҙарға ҡаршы вакцина яһап тора.

Рәмилә Яҡупова менән бер осрашҡанда ул ҡайһы бер борсолоуҙары менән уртаҡлашты. "Белмәйем, бынан һуң ферманы ҙурайтып, һауын кәзәләрен арттырып булмаҫ инде, - тине ул. - Берҙән, эшсе ҡулдар етешмәй: ҡатын-ҡыҙҙар даими түгел, ваҡытлыса ғына эшләй. Ҙур ферма булмағас, эшселәрҙе хеҙмәт кенәгәһе тултырып, закон нигеҙендә ҡабул итеп булмай - фәҡәт һөйләшеп, килешеү буйынса ғына. Икенсенән, етештереүселәр күп, көндәр буйы телефондан китмәй, ҡайҙа ҡымыҙ кәрәклеген һорашып ултырырға кәрәк. Өсөнсөнән, хөкүмәтебеҙҙән бер ниндәй ҙә дотация юҡ..."

Ысынлап та, беҙҙең халыҡта борон-борондан кәзә һөтөнә өҫтөнлөк бирелгән, йәш баланың әсәһе ауырыһа йәки вафат булһа, сабыйға кәзә һөтө эсергәндәр. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында халыҡты үлән менән кәзә һөтө ҡотҡарған. Ул саҡтағы апай-еңгәләрҙең кәзә һөтө хаҡында йырлағандары һаман иҫтә:

*Кәзә һөтө ҡуйы була*
*Ҡаймаҡ була ла ҡуя,*
*Бер стакан эстенһәң,*
*Тамаҡ туя ла ҡуя.*
*Атың һат, һыйырың һат,*
*Алып ебәр кәзәкәй.*
*Һауһаң - һөтө, һуйһаң -ите,*
*Һалымы ла бәләкәй!*

Халҡыбыҙҙың элек кәзәне ат, һыйыр бәрәбәренә тиңләүе юҡҡа түгел. Уның һөтө һәм ҡымыҙы шулай уҡ бик файҙалы. Шуны иҫәпкә алып, кәзә аҫыраусы ла юлға һалып булмай микән? Хөкүмәт тарафынан йылҡысылыҡ менән һарыҡсылыҡты үҫтереүгә бирелгән дотация кәзә аҫыраусылар өсөн дә артыҡ булмаҫ ине, тиеүем. Республикабыҙ магазиндарына ҡайҙандыр ситтән кәзә һөтө ҡушып эшләнгән шампунь, крем, бәлзәмдәр килтерелә. Шуларҙы үҙебеҙҙә яһай алмаҫ инекме ни? Ауыл халҡына эш урындары ла асылыр ине.

**Мәүлиҙә ЗАКИРОВА,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Учалы районы Илтабан ауылы.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## АҠСАЛАТА АЛҺАҢ ДА БУЛА

Социаль хеҙмәттәр алыуға хоҡуғы булған федераль льготасылар ошо йылдың 1 октябренә тиклем социаль хеҙмәттәр тупламаһын алыуҙан баш тартыу йәки уның айырым өлөшөн алыу тураһында йәки социаль хеҙмәттәрҙе натуралата рәүештә алыуҙы ҡайтанан булдырыу тураһында ғариза яҙа ала. Ғәмәлдәге законға ярашлы, йыл һайын ғариза яҙыу мотлаҡ түгел. Пенсия фондына элекке ҡарарҙы үҙгәртеү менән бәйле мөрәжәғәт итергә була.

Әлеге ваҡытта соцпакет хаҡы айына 839, 65 һум, шул иҫәптән: 646,71 һум - кәрәкле дарыу препараттары менән тәьмин итеүгә, 100,05 һум - санаторий-курорт дауаланыуы өсөн путевка алыуға, 92,89 һум - ҡала яны тимер юл транспортында, шулай уҡ ҡала-ара транспортта дауаланыу урынына барыу һәм ҡайтыу юлдарында бушлай йөрөү өсөн.

Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса идарасыһы Фоат Хантимеров һүҙҙәренә ҡарағанда, бөгөнгө көнгә ҡарата республикала 367 мең федераль льготасы йәшәй, шуларҙың 318 меңдән ашыуы социаль хеҙмәттәр тупламаһы урынына аҡсалата компенсация алырға теләк белдерҙе.

**Рәсәй Пенсия фонды БР буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

ҠУЛЛАНЫУСЫ ӘЛИФБАҺЫ

# ХАҠЫНА ҠАРАМА...

## сифатына ҡара

**Нисек итеп сифатһыҙ тауарҙы кире ҡайтарырға, банк менән килешеү төҙөгәндә хоҡуҡтарыңды нисек ятларға, ял итергә йыйынғанда сәфәреңдең имен булыуын нисек тәьмин итергә һәм банк карталары менән нисек файҙаланырға...**

Ошо һәм башҡа һорауҙар мейегеҙҙе ыраулап, йоҡоларығыҙҙы осороп, тынғы бирмәйме? Ә бына был йәһәттән баш ҡала халҡы күпкә отошлораҡ хәлдә. Сөнки муниципалитет белгестәре ҡулланыусылар өсөн махсус конкурстар уҙғара, даими рәүештә ҡулланыусының хоҡуҡ өлкәһендәге белемен күтәреү буйынса төрлө саралар ойоштора. Был көндәлек тормошта бик кәрәкле белем. Ни тиһәң дә, һәр ҡайһыбыҙ көн һайын сауҙа нөктәләренән нимәлер булһа һатып ала. Ә инде бәхәсле осраҡ килеп сыға ҡалһа, үҙебеҙҙе нисек ятларға ла белмәйбеҙ.

Шуны иҫтә тотоп, бөгөн бер ни тиклем ҡулланыусы ликбезы үткәрергә булдыҡ. Әгәр һатып алған әйберегеҙҙә ниндәйҙер етешһеҙлек тапһағыҙ:

1. Етешһеҙлекте бөтөрөүҙе талап итеүҙән тыш, сифатһыҙ тауар өсөн түләнгән сумманы кире ҡайтара йәки хаҡы арҙаған булһа ла, шундай уҡ маркалы продукцияға алыштырыуҙы, хаҡы ҡиммәтерәк йәиһә арзанраҡ (хаҡын ҡайтанан иҫәпләтеп) булған икенсе тауарға алмаштырыуҙы талап итә алаһығыҙ. Талабығыҙҙы яҙма рәүештә ике данала башҡарырға кәрәк. Бынан һуң һатыусы ремонт үткәртергә хоҡуғын юғалта, сөнки был ҡулланыусының хоҡуғын боҙоу булып тора.

-Ҙур күләмле тауарҙы һәм 5 килограмдан ауыраҡ булған әйберҙе ремонтлау, хаҡын төшөрөү, алмаштырыу йәки уны ҡулланыусыға кире ҡайтарыу һатыусы иҫәбенә һәм уның тарафынан башҡарыла. Әммә һатыусы алып барып биреүҙән баш тартһа, ҡулланыусы уны үҙе башҡарып, һуңынан һатыусыға сығымдарҙы ҡаплау талабын ҡуя ала.

-Һатыусы ҡулланыусынан тауарҙы ҡабул итеп алыуҙан һәм сервис үҙәгенә ебәреүҙән баш тарта алмай, сөнки был ғәмәлдәге ҡануниәткә ҡаршы килә. Закон нормаһы: "Һатыусы (эшләп сығарыусы), ошо вәкәләтте башҡарыусы ойошма йәки шәхси эшҡыуар, импортер сифатһыҙ тауарҙы ҡулланыусынан алып, кәрәк булғанда тауарҙың сифатын тикшереү үткәрергә тейеш", - ти.

-Әгәр тикшереү һөҙөмтәһендә етешһеҙлек асыкланһа, ҡулланыусының талабы ҡәнәғәтләндерелә.

Кредитҡа һатылған сифатһыҙ тауар кире ҡайтарылғанда, ҡулланыусыға тауарҙы кире ҡайтарған көнгәсә түләнгән сумма һәм кредит биргән өсөн түләнгән күләм кире ҡайтарыла.

Ошондай мәсьәләләр менән Октябрь проспекты, 114/1-се йорт, 4-се бүлмә адресы буйынса дүшәмбе һәм кесе йома көндәре мөрәжәғәт итергә була. Белешмә өсөн телефон: 235-99-45.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Гипертония

❖ Бик үҙенсәлекле һинд ысулы бар. Ул йылына ике тапҡыр махсус схема буйынса тәнгә йод менән һыҙыуҙан тора. Кисен йоҡлар алдынан мамыҡ уралған шырпыны йодка тығып алып, һул ҡул беләҙеген уратып һыҙып сығырға. Икенсе көнөнә ошо уҡ эште уң аяҡ беләҙегенә эшләйбеҙ. Артабан уң ҡул, һул аяҡка яһайбыҙ. Иғтибар итегеҙ, бер көндә бер генә йодлы түңәрәк килеп сыға! Бишенсе көндә йодлы түңәрәкте - һул терһәккә, алтынсыһында уң тубыҡҡа, шулай уҡ артабанғы ике көндә уң терһәк һәм һул тубыҡҡа яһала. Тығыҙынсы көндә йодлы һыҙыҡ арҡа буйлап һул яурындан уң ботҡа ҡарай, унынсыһында уң яурындан һул ботҡа ҡарай һыҙыла. Бары тик арҡа буйлап ҡына! Шулай итеп, "һыҙыу" курсы 10 көн - мотлаҡ 1 марттан 10 мартҡа тиклем дауам итә. Ун көн ял иткәндән һуң, 21 марттан 30 мартҡа тиклем процедураны ҡабатлайһың. Бының менән дауланыуҙың беренсе этабы тамамлана. Икенсе этап ошо уҡ схема буйынса 1-12 сентябрь һәм 21-30 сентябрҙә үтелә. Дауалаусылар был ысулды яңынан 5 йылдан ҡабатларға тәҡдим итә. **Тағы бер тапҡыр иҫкәртәбеҙ, дауаның беренсе этабын мотлаҡ яҙ, икенсеһен мотлаҡ көҙ эшләргә кәрәк!**

❖ **Һарымһаҡ (склеротик формала).** Иртән 1 бүлкәт һарымһаҡ ашарға һәм һыу эсергә.

❖ **Картуф ҡабығы төнәтмәһе.** 4-5 картуфты ярты литр һыуға һалып, 15 минут ҡайнатырға. Ҡайнатманы көн һайын 1-2 сынаяҡ эсергә.

❖ **Үлән төнәтмәләре.** Традицион медицина артериаль гипертония сиреңең башланғыс осоронда гөлйемештең ваҡланған емештәре төнәтмәһе (көнөнә 3 тапҡыр 80-100 мл) эсергә ҡуша. Ҡара ҡарағат япраҡтары төнәтмәһе артериаль ҡан баҫымы һәм хроник нефрит менән яфаланыусыларға (йәғни, симптоматик артериаль гипертония) файҙалы: 2 ҡалаҡ япраҡтарға ярты литр һыу ҡойоп, 5 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр 130-150 мл эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Ә һинең характерыңда гүзәл, сәләмәт һәм ихлас һыҙаттар шундай күп. Һинең бәләкәс кенә йөрәгең дә шундай ҙур, алыҫ тауҙар артындағы ҡояш кеүек… Быны һин йоҡоға китер алдынан үбергә тип кинәт миңә ташланғаныңда тойҙом.*



*БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Эс-бил ауырыуҙары менән бәйле им-том

**Ете өйҙән биртек һорау.**

1. Бил ауыртһа, заттан бер әбей биртек йыя. Ул ете өйҙән, ишегенән инмәй генә, биргән аш-тарын ала, шуны аҙаҡ ауырыуға ашата, һорағанда ошо әпсенде лә әйтә:

*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,*
*Билем, билем биртенгән,*
*Биртек йыйып йөрөйөм.*
*Лә иләһи илла Алла,*
*Бирахмәтикә йә рахман-рахимин,*
*Иләһи, амин!*

2. Кешенең биле ауыртһа, биртек булған, тип, биртек йыйып эсерәләр ине. Бының өсөн ете өйҙөң ишегенә һауыт тотоп, үҙең күренмәй генә һамаҡлайһың:

*Улым биле ҡатыҡҡан,*
*Ҡатыҡ һорап йөрөйөм,*
*Киленем биле биртеккән,*
*Биртек һорап йөрөйөм,*
*Һөт булһа ла ҡойоғоҙ,*
*Һыу булһа ла ҡойоғоҙ,*
*Ни булһа ла ҡойоғоҙ.*

Һауытҡа нимә һалынған, шуны биле ауыртҡан кешегә эсерәләр.

**Баш бала һәм төпсөк бала име.** Биле ауыртҡан кешегә йә баш бала, йә төпсөк бала биртек йыйған. Ул уны кәмендә өс өйҙән йыйған. Йыйғанда:

*Ҡайным биргән бер төпкә*
*Биртек йыя мин килдем*, - тип һамаҡлаған.

**Биртек икмәге.** Кешенең биле ауыртһа, ауыл буйлап биртек икмәге йыйып ашата торғайнылар. Кешенән биртек икмәген баш бала артҡа атлап йыя ине. Мин шуны ашап төҙәлдем.

**Етем һәм зәғиф име.** Бил ауыртһа, бер етем, бер зәғиф бала ауылдан биртек йыя. Йыйғанда, ошо һамаҡты әйтәләр:

*Биртек йыя мин килдем,*
*Еңгәм улы биртенгән,*
*Биртек биреп тороғоҙ.*

Кеше май, ҡорот, сәй бирә ине. Шуны алып ҡайтып, сәй эсереп, ауырыуҙы баҫырып һалаһың. Ул төҙәлә ине.

## Биҙгәк им-томо

Ышаныуҙар буйынса, бер өшөтөп, бер ҡыҙҙырып ауырыҡҡан йоғошло сирҙең эйәһе Биҙгәк булған. Уны икенсе төрлө тапма ла тиҙәр. Биҙгәкте, ғәҙәттә, ҡалтырап торған кеше ҡиәфәтендә күҙ алдына килтерәләр. Ул кешене тотһа, кеше ҡалтырап ауырый, икән. Был ауырыуҙы тик им-том менән генә йүнәлтеп була, тиҙәр. Шуға ла халыҡта бик күп имләү ысулдары һаҡланған.

**Биҙгәкте "мейескә ягыу".** Биҙгәк тотҡанда: "Мейескә яғам!" - тип ҡурҡытып та имләгәндәр.

**Тай ҡаны эсереү.** Биҙгәк булһа, кешегә тай муйынынан алынған ҡан эсергәндәр. Эсергәндә ошондай әпсен дә әйткәндәр:

*Тәнгә - ҡан,*
*Ҡанға - йән,*
*Йәнгә - йән,*
*Име-томо*
*Шул булһын,*
*Тфү, тфү, тфү!*

**Биҙгәккә им-том.** Биҙгәк булған кешегә ат, бүре, айыу тиреһе япҡандар. Ышаныуҙар буйынса, ат, айыу, бүренән ҡурҡып, Биҙгәк китә икән.

**Биҙгәктән ҡасыу.** Кеше ҡалтыранып ауырый башлаһа, ауырыған еренән тиҙ генә икенсе ергә күсергә, өйәнәк эҙләп тапмаҫлыҡ ергә китергә кәрәк. Йылға, шишмә аша сыҡһаң да була. Ҡапыл һалҡын һыу һипһәң дә ауырыу китә, тиҙәр.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

*АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА…*

**Америка журналисы У. Ливингстон Ланредтың "Атай нимә хаҡында онотҡан?" исемле мәҡәләһе 1927 йылда донъя күрә. Ҡайһы саҡ шулай була: бәләкәй генә әҫәр иҫ киткес уңышҡа юлыға. Уҡыусыларҙың иң нескә күңел ҡылдарын сиртә алған был хат - шундай яҙмаларҙың береһе. Ул тәүге тапҡыр нәшер ителгәндән һуң АҠШ-тың йөҙәрләгән гәзит-журналдарында яңынан баҫыла, унан тыш, сит телдәргә тәржемә ителеп, бөтә донъя буйлап тарала. Авторға меңәрләгән лекторға был хатты мәктәптәрҙә, юғары уҡыу йорттарында, сиркәүҙәрҙә, башҡа трибуналарҙан уҡыу өсөн рөхсәт бирергә тура килә. Был әҫәр танылған психолог Дейл Карнегиның "Как завоевать друзей и оказывать влияние на людей" тигән китабында урын алғандан һуң айырыуса популяр булып китә. Рус теленә ул 2008 йылда яҙыусы Юрий Волошин тарафынан тәржемә ителә.**

**У. Ливингстон Ланредтың был хатында һүҙ атай кешенең бәләкәс улына ҡарата үтә талапсан, бәйләнсек булыуына үкенеүе хаҡында бара. Ул, моғайын, был тойғоно кисергән берҙән-бер атай түгелдер. Шулай ҙа әҫәр, минеңсә, атайҙарға ғына тәғәйенләнмәгән. Ул әсәйҙәр өсөн дә бик фәһемле, уйландырырлыҡ. Уны тәүге тапҡыр мин үҙем дә бик тетрәнеп уҡып сыҡтым һәм хаттың ҡулыма иртәрәк эләкмәгәненә үкенеп ҡуйҙым. Күптән түгел балаһын үтә ҡаты ҡулда тотҡан бер атайға уҡырға бирҙем. Хикәйәне малайҙың әсәһе лә уҡып, малайға ҡарата ҡырыҫ булыуҙарын танынылар, балаларына ҡарата мөнәсәбәттәрен үҙгәртеү кәрәклеге хаҡында килештеләр.**

**Ысынлап та, ҡасандыр үҙебеҙ ҙә бала булһаҡ та, беҙ йыш ҡына ҡыҙ-малайҙарға бала итеп ҡарай белмәйбеҙ, уларҙы, автор һүҙҙәре менән әйткәндә, үҙебеҙҙең йәш үлсәме менән үлсәйбеҙ, өлкәндәрсә талаптар ҡуябыҙ. Ғөмүмән, был әҫәрҙе һәр ата-әсә, шулай уҡ үҙенә был ролде алырға йыйынған һәр кем уҡып сығырға тейеш. Һуңынан, йылдар үткәс, балаң алдына тубыҡланып ғәфү үтенгәндәй булмаҫ өсөн… Иң йылы, йөрәктән сыҡҡан яратыу һүҙҙәрен ваҡытында әйтеп ҡалмағаныңа үкенмәҫ өсөн… Ғәзиз балаң менән аралашыуҙың алтын минуттарын кәрәкмәгән тәнҡит һүҙҙәренә, юҡ-бар бәйләнеүҙәргә, аҡыллы һәм ҡаты тонда өгөт-нәсихәт уҡыуға әрәм итеүеңде йылдар үткәс кенә аңлауы ни тиклем әсе һәм үкенесле…**

**Рәхимә МУСИНА.**

# АТАЙ НИМӘ ХАҠЫНДА ОНОТҠАН?



"Тыңла, улым. Мин был һүҙҙәрҙе йоҡлаған сағыңда әйтәм. Һин кескәй ҡулдарыңды сикә аҫтыңа ҡуйғанһың, бөҙрә етен сәстәрең еүеш маңлайыңа йәбешкән. Мин һинең бүлмәңә шым ғына үтеп индем. Бер нисә минут элек, китапханамда гәзит уҡып ултырғанда, ҡапыл ауыр үкенес тулҡындары ябырылды. Мине һинең карауатың янына үҙ ғәйебемде таныу тойғоһо алып килде.

Бына нимә тураһында уйланым, улым: мин бит һәр ваҡыт насар кәйефемде һиңә төшөрҙөм. Һин иртәнсәк мәктәпкә китергә йыйынғанда еүеш таҫтамалды битеңә тейҙереп кенә алғаның өсөн әрләнем. Ботинкаларыңды таҙартмаған өсөн дә эләкте. Ә кейемдәреңдән нимәнелер иҙәнгә ырғытҡас, бөтөнләй асыулы итеп екерҙем.

Иртәнге аш өҫтәле артында һиңә тағы бәйләндем. Һин сәй түктең. Һин ризыҡты ҡарһаланып ашаның. Һин терһәктәреңде өҫтәлгә ҡуйҙың. Һин икмәккә майҙы үтә ҡалын итеп һыланың. Һуңыраҡ, һин - уйнарға, ә мин поезға китергә сыҡҡас, артыңа боролдоң да, "Һау бул, атай!" тип ҡысҡырҙың, ә мин ҡаштарымды йыйырып, ҡырыҫ ҡына: "Яурындарыңды турайт!" - тип шелтә яһаным.

Кискә ҡарай бөтәһе лә яңынан башланды. Өйгә ҡайтып барышлай, мин һинең ергә тубыҡланып уйнағаныңды күрҙем. Ойоҡтарыңда тишектәр бар ине. Мин һине үҙемдән алда атларға мәжбүр итеп, иптәштәрең алдында кәмһеттем. Ойоҡтар ҡыйбат тора, әгәр һин уларҙы үҙ аҡсаңа һатып алһаң, әҙерәк бөхтә булырға тырышыр инең! Уйлап ҡына ҡара, улым, быларҙы бит һиңә атайың әйтте!

Иҫләйһеңме, һин минең янға китапханаға индең - ҡыйыуһыҙ ғына, әрнеүле ҡараш менән? Мин, ҡамасаулағанға йәнем көйөп, гәзит өҫтөнән генә күҙ ташлағас, һин икеләнеп ишек төбөндә туҡтап ҡалдың. "Һиңә бында нимә кәрәк?" - тип ҡаты ғына өндәштем. Һин бер нәмә лә әйтмәнең, кинәт кенә миңә ташландың һәм муйынымдан ҡосаҡлап, үбеп алдың. Һинең ҡулдарың мине шундай наҙ, һөйөү менән ҡыҫты! Был тойғоларҙы бит Хоҙай һинең йөрәгеңә үҙе һалған һәм минең кәмһетеүле мөнәсәбәтем дә уларҙы ҡорота алмаған! Унан һин ваҡ-ваҡ аҙымдар менән атлап, үҙ бүлмәңә киттең.

Бына шулай, улым, ошо хәлдән һуң гәзит ҡулымдан шыуып төштө, ә үҙемде ҡот осҡос ҡурҡыу тойғоһо биләп алды. Йә, минең менән ғәҙәт нимә эшләне? Туҡтауһыҙ бәйләнеү, аҡыл өйрәтеү ғәҙәте! Һин бәләкәй малай булған өсөн минең бүләгем шул инеме? Мин һине яратмайым, тип әйтеп булмай, тик эш шунда: мин балалыҡтан үтә ҙурҙы көткәнмен, уны үҙ йәшемдең үлсәме менән үлсәгәнмен.

Ә һинең характерыңда гүзәл, сәләмәт һәм ихлас һыҙаттар шундай күп. Һинең бәләкәс кенә йөрәгең дә шундай ҙур, алыҫ тауҙар артындағы ҡояш кеүек... Быны һин йоҡоға китер алдынан үбергә тип кинәт миңә ташланғаныңда тойҙом. Бөгөн башҡа бер нәмә лә әһәмиәткә эйә түгел, улым. Мин һинең бүлмәңә ҡараңғыла килдем һәм ҡыҙарып, һинең карауатың янында тубыҡланып торам!

Был, әлбиттә, еңел ҡотолоу. Мин беләм, быларҙы уянғас әйтһәм, һин аңламаҫ инең. Ә иртәгәнән башлап мин ысын атай буласаҡмын! Мин һинең дуҫыңа әйләнәсәкмен, һин ғазапланғанда ғазапланасаҡмын, һин көлгәндә көләсәкмен. Телемә асыулы һүҙ килеп тығылһа, мин уны тешләйәсәкмен. "Ул бит әле сабый ғына, бәләкәй генә малай!" тигән һүҙҙәрҙе мин һәр ваҡыт, ант урынына, ҡабатлаясаҡмын.

Мин күңелемдән һине өлкән ирегет тип күргәнмен. Әммә хәҙер һине карауатыңда арып, йомарланып ҡына ятҡан килеш күреп, улым, шуны аңлайым: һин әле сабыйһың. Әле кисә генә һин әсәйеңдең ҡулында инең һәм башҡайың уның яурынында ята ине. Мин һинән үтә күпте, үтә күпте талап иткәнмен..."

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Уйландығыҙмы? Улайһа, үҙегеҙ кисергәндәр, ошо атай һымаҡ үкенеүҙәр, йә ошоға ҡапма-ҡаршы өлгө - ата-әсә менән бала араһындағы идеаль мөнәсәбәттәр тураһындағы фекерҙәрҙе аҡ ҡағыҙға төшөрөп, редакциябыҙға ебәрегеҙ. Халҡыбыҙҙа бала тәрбиәләү өлкәһендә матур ҡанундар, матур өлгөләр етерлек. Улар тураһында һөйләйек әле башҡаларға.**

***✓ 2007 йылда Башҡортостан Хөкүмәте 43 миллион аҡса бүлә. Ошо йылдар эсендә ғалимдарыбыҙҙың, фән эшмәкәрҙәренең ал-ял белмәүе һөҙөмтәһендә Рәсәйҙә тиңе булмаған китап-энциклопедия барлыҡҡа килде.***



*ТАРИХЫНДАН ДАН ТАП!*

# ҺӘР ТАШҠА ЯҘЫЛҒАН ТАРИХ...

## китап биттәренә күсте

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан тарихы фәнендә ҙур һәм мөһим бер эшкә нөктә ҡуйылды. Хәйер, нөктә ҡуйылды, тип әйтеү дөрөҫ тә түгелдер. Әлеге этапта уны, ҙур өндәү ҡуйылды, тип баһаларға мөмкин, әммә эш артабан да дауам ителеренә өмөт бар. Ләкин был инде килер быуындарҙың бурысы булып ҡаласаҡ.**




Нимәгә ҙур өндәү ҡуйылды, тиһегеҙме? "Башҡорт халҡының тарихы" тип аталған ете томлыҡтың, ниһайәт, барлыҡ томдары ла донъя күрҙе: әле бына йәмәғәтселек 2-се һәм 7-се томдарҙы ла ҡулына алып ҡыуанды. 2007 йылда РФА Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты башлаған ҙур әһәмиәткә эйә проекты яҙыуға һәм нәшер итеүгә Башҡортостан Хөкүмәте 43 миллион аҡса бүлә. Ошо йылдар эсендә ғалимдарыбыҙҙың, фән эшмәкәрҙәренең ал-ял белмәүе һөҙөмтәһендә Рәсәйҙә тиңе булмаған китап-энциклопедия барлыҡҡа килде.

Зирәк уҡыусы, ни өсөн 2-се том иң һуңғы булып донъя күрҙе, тип тә аптырар, моғайын. Уның да үҙ сәбәптәре бар. Һәр том тарихтың ниндәйҙер арауығын үҙ эсенә алһа, икенсе томда V быуаттан алып XVI быуаттың тәүге яртыһында булған ваҡиғалар сағылыш таба. Ҡыҫҡаса ғына итеп әйткәндә, Көньяҡ Уралдың төрки күсмә халҡының һәйкәлдәре, Византия сығанаҡтарының төбәк һәм уның халҡы, урта быуат авторҙарының башҡорттар тураһындағы мәғлүмәттәре, шулай уҡ Үҙәк Азия һәм Себер төркиҙәренең яҙма мәҙәниәте буйынса материалдар, башҡорт халҡы тарихындағы иң драматик мәлдәрҙең береһе тип иҫәпләнгән татар-монгол баҫҡынсылығы дәүере, башҡорттарҙың Ислам динен ҡабул итеүе, ырыу-ҡәбилә мөнәсәбәттәре, башҡорт халҡы формалашыуҙа һәм матди, рухи мәҙәниәтте, әхлаҡ-әҙәп ҡағиҙәләрен һаҡлап ҡалыуҙа уларҙың йоғонтоһо һ.б. мөһим мәлдәрҙең барыһы ла ошо томға ингән. Шулай уҡ башҡорт халҡының рухи мәҙәниәтенә: ауыҙ-тел ижадына, халыҡ музыка ҡоралдарына, теленә һәм әҙәбиәтенә айырым бүлек бағышланған.

7-се томға килгәндә инде, ул - беҙҙең күҙ алдында тыуған, замандаштарыбыҙ һәм һәр ҡайһыбыҙ шәхсән ҡатнашҡан тарих. Ул үҙенә уҙған быуаттың 80-се йылдары уртаһынан бөгөнгә тиклем - "постсовет" һәм үҙгәртеп ҡороуҙар осорҙарын алған. Шуға ла ундағы һәр ваҡиға таныш һәм ҡайһы бер процестар һаман тамаланмаған, һаман дауам итә. Тимәк, башҡорт тарихы ошо ете том менән генә сикләнмәйәсәк һәм килер быуындар уларға тағы ла томдар өҫтәйәсәк әле, тип, ҙур ышаныс менән белдерергә мөмкин.

Әйткәндәй, был томдар етәү тип иҫәпләнһә лә, ғәмәлдә улар 14. Сөнки һәр томда бирелгән һылтанмаларға айырым том итеп архив документтары тупланған тағы берәр том нәшер ителгән.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың ризығы

XIX быуат һуңында башҡорттарҙың төп ризығы булып башаҡлылар (бойҙай, арпа, арыш) торған. Уларҙан бутҡа өсөн ярма, өшә һәм икмәк бешерер өсөн он әҙерләгәндәр. Он менән өйрәләрҙе ҡуйыртҡандар. Ҡайһы бер урындарҙа һирәк кенә тары ярмаһы ҡулланылған. Бик һирәк осраҡта Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында ризыҡ итеп ҡарабойҙай ярмаһын файҙаланғандар. Шәкәрҙе башҡорттар бөтөнләй аҙ ашаған. Умартсылыҡ менән шөғөлләнгән урындарҙа бал шәкәрҙе алмаштырған.

Үҫемлек ризыҡтары, нигеҙҙә, бешерелеп йәки быҡтырылып файҙаланылған. Башҡорттар көлдә һарына, ҡайһы берҙә картуф, көлсә бешергән. П. С. Паллас һүҙҙәренсә, "икмәкте тәүкешеләр кеүек бешерәләр. Башҡорт ҡатын-ҡыҙы өшәне һыу һәм тоҙ һалып ҡына баҫа ла мейестең эсенә ултыртып, эҫе көл менән күмеп ҡуя. Һуңынан уны таяҡҡа кейҙереп, тышы ҡыҙарғансы утта тотоп тора". XX быуатта бындай өшәләр менән башҡорттар һәр ерҙә лә туҡланмаған, уны бындай ысул менән, нигеҙҙә, Урал аръяғы һәм тау башҡорттары бешергән. Бөтөн ерҙә ул ваҡытта ябай ғына итеп эшләнгән мейестәрҙә күмәс бешергәндәр. Был мейестәр (**һүрәттәр**) башҡорттарҙың йәйләүгә сыҡҡан һәр ерҙә эшләнгән.





Төньяҡ-көнбайыш Башҡортостандағы ауыл ихаталарында һәм даими йәшәгән ҡышҡы йорттарҙа сыуал булған. Был ҙур булмаған мейестәр тыштан таштан һалынһа, эстән балсыҡ менән һыланған. Мейестә утын янып бөткәс, көрәккә ултыртып, икмәк һалғандар һәм төтөн сыға торған урынды ҡапҡас йәки таш менән ябып ҡуйғандар. Насар итеп баҫылған икмәк бындай ябай мейестәрҙә насар бешкән. Рус мейестәре булған төньяҡ-көнбайыш башҡорттары йәшәгән яҡта икмәкте яҡшыраҡ бешергәндәр.

Башҡорт ризыҡтарының күпселеген ҙур ҡаҙандарҙа әҙерләгәндәр; бик һирәк бай башҡорттар, һәм уларҙың да барыһы ла түгел, табала ҡыҙҙырған.

Икмәк ярмаларынан (ярма һәм ондан), ғәҙәттә, һөт аҙыҡтары менән болғап, башҡорттар түбәндәге ризыҡтарҙы әҙерләгән.

Өйрә - арпа йәки бойҙай ярмаларынан бешерелгән ризыҡ. Ҡорот һалып тәҡдим иткәндәр.

Бутҡа - һыуҙа йәки һөттә бешерелгән ризыҡ. Арпа йәки бойҙай ярмаларынан әҙерләнгән.

Һалма - арыш йәки башҡа ондан һыуҙа ҡаты итеп баҫылып, һуңынан йәйеп, бысаҡ менән ҡырҡылып, ҡайнар һыуға һалына (туҡмас һалма); ҡайһы бер ваҡытта туҡмасҡа тип әҙерләнгән ҡамырҙы бысаҡ менән ҡырҡмағандар, бары тик бармаҡ менән йолҡоп алып, ҡайнар һыуға ташлағандар (сумар һалма). Һалма киң таралған ризыҡтарҙың береһе була. Уны, ғәҙәттә, ҡорот, ҡайһы берҙә һарына менән биргәндәр.

*БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ*

# БАШҠОРТОСТАНҒА КИЛМӘЙЕМ...

## Башҡортостаныма ҡайтам!




**Үткән аҙнала баш ҡалала венгр төркиәтсеһе, башҡорт теле белгесе Йософ (Йожеф) Торманың тыуыуына 70 йыл тулыуға арналған "Рәсәй халыҡтары телдәренең көнүҙәк диалектология проблемалары" тип аталған XIII Халыҡ-ара конференция үтте. Уның эшендә Рәсәйҙән, Ҡаҙағстандан, Ҡырғыҙстандан, Венгриянан ғилимдар ҡатнашты. Һүҙ - Йософ Торманың улы, ғалим, дипломат Томаш Тормаға.**

- Башҡортостанға беренсе тапҡыр ғына килеүем түгел. Беренсе тапҡыр 2002 йылда аяҡ баҫҡайным. Ул ваҡытта РФА Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында атайыма мемориаль таҡтаташ асылғайны. Атайым иҫән сағында гел генә Башҡортостан, уның һоҡланып туйғыһыҙ тәбиғәте, ҡунаҡсыл, ихлас халҡы, бай рухи донъяһы тураһында һөйләй торғайны. Шуға күрә лә бала саҡтан уҡ башҡорт иле менән ҡыҙыҡһынып үҫтем һәм атайым һөйләгәндәрҙе үҙ күҙҙәрем менән күреп, уның ысынлап та шулай икәнлегенә инандым.

Икенсе тапҡыр 2004 йылда килдем һәм бер аҙна булып, атайымдың аяҡ эҙҙәре ҡалған Бөрйән, Белорет, Учалы һ.б. райондарҙа йөрөү бәхетенә өлгәштем. Хатта бәләкәй генә ауылдарҙа ла халыҡтың атайымды белеүе, һаман да иҫләүҙәре һәм уның тураһында оло хөрмәт менән һөйләүҙәре, уны онотмауҙары ҡыуандырҙы ла, терәндерҙе лә. Ғөмүмән, башҡорттарҙың тарихына, теленә битараф булмауы һоҡландыра.

Икенсе тапҡыр килеүемдә миңә ҡурай бүләк иттеләр. Башҡорттарҙың был милли музыка ҡоралы менән күптән таныш инем, әлбиттә. Сөнки бынан нисәмә тиҫтә йылдар элек атайыма ла ҡурай бүләк иткәндәр һәм беҙ уны өйөбөҙҙә ҡәҙерле ҡомартҡы, атайымдың йәдкәре итеп һаҡлайбыҙ. Хәҙер инде бындай һәҙиә беҙҙә икәү. Атайым яҙҙырған магнитофон таҫмаһынан ҡурай тауышын даими тыңлайым. Уның моңо аша башҡорттарҙың күңел кисерештәрен, тәбиғәт тауышын ишетеп, һоҡланам. Әммә әлегә үҙем ҡурайҙа уйнарға өйрәнә алманым.

Өсөнсөгә Башҡортостанға бына әле, һуңғы килеүемә тиҫтә йыл самаһы үткәс, ҡабат аяҡ баҫтым. Әлбиттә, баш ҡала Өфө бик ныҡ үҙгәргән. Хатта ул Европа ҡалаларынан ҡайтыш түгел, тип әйтер инем. Яңы стилдәге архитектура барлыҡҡа килгән, урамда кешеләр генә түгел, автомобилдәр күбәйгән. Шуға ҡарамаҫтан, ул - йәшел, матур, таҙа ҡала. Халҡы ла шундай ихлас, ҡунаҡсыл. Үҙемде сит илдән килгән тип тоймайым да хатта, әйтерһең дә, үҙемдең туғандарыма ҡунаҡҡа ҡайтҡанмын. Һәр ерҙә үҙ кеше итеп, ысынлап та, туғандарылай күреп ҡаршы алалар. Был, әлбиттә, тәү сиратта, атайыма булған ихтирам, уның абруйының башҡорттар араһында һаман да ҙур булыуы күрһәткесе. Мин, әлбиттә, уның кеүек башҡорт теле белгесе түгел, "Һаумыһығыҙ, башҡорттар!", тигән сәләмләүҙән башҡа бер нәмә лә белмәйем, әммә Фирҙәүес Хисаметдинова апай биргән башҡорт теле китабы буйынса киләсәктә башҡорт телен ныҕыраҡ өйрәнермен тием, иншалла. Шулай уҡ атайымдың юлын дауам итергә, тамамланып, баҫылып өлгөрмәгән ғилми хеҙмәттәрен халыҡҡа еткерергә теләйем.

**Шәрифә САЛАУАТОВА яҙып алды.**

**✓ Хикмәт бында ауылда эш юҡлыҡта түгел, ә ауылда йәшәргә теләмәүҙә, анһатҡа һалышып йәшәргә ынтылыуҙа, тип аңларға кәрәктер. Тарих ҡабатланмай, тиҙәр, юҡ, ҡабатлана, беҙ зимагурҙар заманына әйләнеп ҡайттыҡ тағы.**



# ҮҘЕ ҠОЛАҒАН аяғына үҙе баҫып

**Хәйбулла районының Йәнтеш ауылы ир-уҙаманы, "Аҡсарлаҡ" үҙаллы балалар һауыҡтырыу-тәрбиәләү лагеры начальнигы ИСҠУЖИН Салауат Ғәлимйән улының да, күптәребеҙ һымаҡ, йәш сағында тыуған ауылынан сығып китеү, ҡалаға барып төпләнеү мөмкинлеге-форсаты була. Әммә ул атай йорто нигеҙенә тоғролоҡ һаҡлап, ғүмерлеккә тыуған ауылында тороп ҡалырға ҡарар итә. Беренсенән, ул кинйә малай булараҡ, ҡартайған ата-әсәһен ҡарау бурысын атҡарыуҙы маҡсат итеп ҡуйһа, икенсенән, бындай ерегеү менән ул атаһының, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Ғәлимйән Мөхәммәтғәле улының үҙ балаларын тыуған еребеҙгә еректереү буйынса тәрбиә һөҙөмтәһен дә раҫлай. Әйткәндәй, балаларының тыуған еребеҙҙә төпләнеп, иркен йорттар һалып, итәк тултырып балалар, ейән-ейәнсәрҙәр үҫтереп йәшәүен күреп, тыныс күңел менән киткәндер, тибеҙ Ғәлимйән олатай фани донъяларҙан. Хәйер, йәшәүҙең төп мәғәнәһе лә ошондай күсәгилешлекте тәьмин итеүгә ҡайтып ҡала ла инде. Артабан һүҙҙе оҙаҡҡа һуҙмайынса, әңгәмә дилбегәһен оло ғаилә башлығы Салауат Ғәлимйән улының үҙенә тапшырабыҙ.**

## Тәрбиәле булыу нигеҙе

Армиянан ҡайтҡас, ысынлап та ауылдан ситкә сығып китергә тигән уйҙар булманы түгел, булды. Кинйә малай булһам да, ул саҡта атайым менән әсәйем йәш, үҙ-үҙҙәрен ҡарап йәшәрлек ине әле. Әммә ул ваҡытта колхозда эш етерлек булғанғамы, әллә үҙемдән өлкән Әхмәтйән, Юлай ағайымдарҙың һүҙенән сыҡманыммы, ситкә сығып китергә тигән теләк күңелдәге елкенеү кимәленән уҙманы. Шулай колхозда шофер булып эшләп йөрөгән сағымда, 1986 йылдың 2 февралендә Юлай ағайымдың ҡар аҫтында ҡалып һәләк булыуы тормошобоҙҙо ҡырҡа үҙгәртте. Был үҙгәреш иң тәүҙә атай йортоноң нигеҙе өсөн яуаплылыҡҡа ҡайтып ҡалды. Ул ваҡытта инде ҡайҙалыр сығып китеү тигән уй мине бөтөнләйгә ташлап китте. Артабан клубта киномеханик, мәктәптә физкультура уҡытыусыһы булып эшләргә тура килде.

Атай-әсәй менән бергә йәшәүҙе мин бәхеткә тиңләйем һәм быны менән ғорурланам. Бындай бәхет күптәргә эләкмәй, дөрөҫөрәге, күп кенә уландар быны теләгән хәлдә лә, икенсе яртыһына бәйле билдәле сәбәптәр буйынса ата-әсәһе менән йәшәй алмай. Был - заман проблемаһы. Был йәһәттән мин атайым менән әсәйемде үҙ ата-әсәһендәй яҡын күргән тормош иптәшем Гөлназға рәхмәтлемен. Икенсе яҡтан ҡарағанда, үҙендең балаларың ҡартатайлы-ҡартәсәйле-өләсәйле булып үҫә. Бәлки, ошоноһо мөһимерәктер ҙә. Беҙҙең үҙебеҙгә ҡартатай-ҡартәсәй-өләсәй итәгенә ултырып әкиәт тыңлау бәхете тәтемәгәс, үҙебеҙҙең балаларҙың был мөмкинлеге тормошҡа ашыуын күреп, ҡыуанып бөтә алмайбыҙ. Ҡартатайлы, ҡартәсәйле-өләсәйле булыу тәрбиәле булыу менән бер үк мәғәнәлә йөрөй. Әгәр ҙә ҡалала йәшәһәм, балаларымды был бәхеттән мәхрүм итер инем.

## Күптәрҙең тыуған яғын һаҡлайбыҙ

Ҡаланы маҡта ла, ауылда йәшә, тиҙәр. Мин айына бер мәртәбә булһа ла, Өфөлә һәм башҡа ҡалаларҙа йәшәгән туғандарыма барып торам. Ҡала һыуһынын ҡандырыуға миңә шул да етә. "Ниңә һис юғы Аҡъярҙа йәшәмәйһегеҙ?" тип әйтеүселәр бар. Әммә тыуған ауылым Йәнтеш янындағы урман-тауҙар, ҡаялар, Һаҡмар һыуы, саф һауа, һыу донъяның бер урынында ла юҡ.

Тормош булғас, барыһы ла була. Шуға күрә ҡалала, ситтә йәшәгәндәр иң ауыр саҡтарында барыһын да күтәреп һуғып, тыуған ауылына, туғандарына ҡайтып китеп, күңелен йыуата ала. Икенсенән, улар ҡырҙа йәшәгәс, тыуған яғын, ата-әсәһен, туғандарын һағынып-һағындырып ҡәҙерле ҡунаҡ булып ҡайтыу бәхетенә эйә. Ә бына ауылда йәшәүсе кешеләр, бер яҡтан ҡарағанда, ундай бәхеттән мәхрүм һымаҡ. Уның ҡарауы, тыуған яҡта йәшәүҙең яуаплылығы ла ана шундай хәлгә ҡалып, ситтән ҡайтыусылар өсөн тыуған яҡтың усағын һүндермәй тотоуға, йәшәүгә ҡайтып ҡала. Әгәр ҙә бөтә кешеләр ҙә анһат тормош эҙләп ҡалаға, ситкә сығып китһә, тыуған яҡ төшөнсәһе лә юҡҡа сығыр ине бит. Тимәк, беҙ күп кенә кешеләрҙең, иң беренсе сиратта үҙебеҙҙең балаларыбыҙҙың тыуған яғын һаҡлап йәшәйбеҙ. Нимәнелер табыр өсөн нимәнелер юғалтыу фарыз бит инде. Тап шуға күрә беҙ үҙебеҙҙең тыуған яҡты һағыныу тойғоһон ҡорбан итеү иҫәбенә тыуған ауылдарыбыҙҙа йәшәйбеҙ ҙә инде.

## Атайыбыҙҙан ҡурҡтыҡ

Өҫтәл туҡмап асыулана торған холҡом юҡ. Ниндәй генә хәлдәр булғанда ла, үҙлегемдән сығыуҙан да тыйылам. Был йәһәттән мин эшемдә лә, ғаиләмдә лә бер ишмен. Шулай ҙа ҡаты ғына итеп тейерен бер әйтеп алырға тура килә барыбер. Был холҡом атайымдан киләлер. Уның кешегә бер ваҡытта ла һүгенеп йә асыулы итеп өндәшкәне булманы, шулай ҙа тейерен әйтер ине. Ул беҙгә, үҙенең улдарына, һәр ҡайһыбыҙ нисәшәр түмәр утын ярырға тейеш икәнлегебеҙҙе алдан билдәләп ҡуя торғайны. Һуңынан тикшерә ине. Уның ҡушҡанын үтәмәй ҡара, бының өсөн ул әрләмәй, ҡайыҙламай, әммә бер норма түмәр урынына тағы ла ике норма түмәр өҫтәлә был осраҡта.

Беҙ атайыбыҙҙан ҡурҡа торғайныҡ. Кеше кемдәндер ҡурҡырға тейештер. Әгәр ҙә кешелә шул тойғо булмаһа, улым, яҡшы бул, тиеп әйтеү менән генә алыҫ китеп булмай. Биргән вәғәҙәләр ҙә, әйткән анттар ҙа тиҙ онотолоусан, ә ҡурҡыу тойғоһо һәр ваҡыт кешене яҙыҡ аҙым яһауҙан тыйып тора. Мин ҡурҡыуҙы хөрмәт итеү тип тә аңлайым. Беҙ армиянан егет булып ҡайтҡас та, кис өйҙән атайыбыҙҙың рөхсәтенән тыш сыҡмай торғайныҡ. Ул үҙенсә беҙҙе ошо рәүешле тәртипкә, бөхтәлеккә, теүәллеккә өйрәтте. Тышҡа сыҡҡан хәлдә лә, билдәләгән ваҡытҡа өйгә ҡайтырға ла, ҡайтыуың хаҡында рапорт бирергә лә бурыслыһың. Атайымдан күп сифаттар отоп ҡалдым, шулай ҙа миңә унан күскән төп сифат - сабырлыҡтыр, тим.

## Балаға кем яуаплы?

Беҙ мәктәптә уҡығанда иҙән дә йыуҙыҡ, утын да ярҙыҡ, ҡарағай ҙа ултырттыҡ, колхозға ярҙам итергә лә йөрөнөк. Ә хәҙерге балаларға бөтөнләй эш эшләтеп булмай. Мәктәптә йә лагерҙа уларҙы бер эшкә ҡушып ҡара, ата-әсәһе: " Был - балаларҙы эксплуатациялау", - тип, шундуҡ өҫтөңә менергә әҙер тора. Элек беҙҙең лагерҙың өс гектар баҡсаһы бар ине. Унда картуф, һуған, кишер сәсә, уны үҙебеҙ утап, һуғарып, үҫтереп ала торғайныҡ. Хәҙерге закондар буйынса, балаларҙы эшләтергә бөтөнләй ярамай. Балалар үҙҙәре лә: "Беҙ ял итергә килдек", - тип кенә әйтә хәҙер. Улар хәҙер хеҙмәтте бөтөнләй инҡар итә. Инҡар итеп кенә лә ҡалмай, ғөмүмән, теге йәки был эште ни өсөн эшләргә кәрәклеген дә аңлап бөтөрмәй. Уның ҡарауы, улар бер йәштән үк компьютерҙы, интернетты һыу кеүек эсә. Заман технологияларын хәҙерге балалар атлауҙан, һөйләшеүҙән алдараҡ өйрәнә.

Тағы бер мәсьәлә. Хәҙер ата-әсәләр үҙ балаларын тәрбиәләү яуаплылығын тулыһынса уҡытыусы елкәһенә һалырға тырыша. Хатта йәйге каникул осоронда берәй уҡыусы бала тәртип боҙһа, иң беренсе нәүбәттә уның уҡытыусыһын, уҡыған мәктәбенең директорын ғәйепләйҙәр. Элек улай булманы, тәрбиә ғаиләлә башлана торғайны. Ата-әсә хәҙер уҡытыусыға: "Беҙҙең балаларҙы тәрбиәләгән өсөн аҡсаны һеҙ алаһығыҙ бит, тәрбиәләгеҙ, әйҙә!" - тип кенә әйтә. Бына ниндәй замандарға килеп еттек, йәшәй торғас.

## Зимагурҙар заманы

Ауылда аҡса әҙ булғаны йәки бөтөнләй булмағаны өсөн генә, эш юҡ, тип әйтеү дөрөҫлөккә тап килеп бөтмәҫ ине. Натураль хужалыҡ итеүҙә аҡса бар ул, тик ул күренмәй. Әйтәйек, беҙ ғаиләлә йәй көндәрендә ситтән ҡайтыусы балаларым, ейәндәрем менән бергә унлаған кеше булып китәбеҙ. Әгәр ҙә барыбыҙҙың да йәшәү, туҡланыу, ял итеү һәм башҡа сығымдарыбыҙҙы ҡала иҫәбе менән һанай башлаһаҡ, ғаиләмде ҡарар өсөн айлыҡ эш хаҡым 150-200 меңдән дә кәм булмаҫҡа тейеш булып сыға. Әммә минең эш хаҡым был сумманан ун-ун биш тапҡырға кәмерәк. Шул уҡ ваҡытта беҙ бер кемдән дә кәм йәшәмәйбеҙ, кәм туҡланмайбыҙ, кәм кейенмәйбеҙ. Ҡала кешеләре текәлектең бер билдәһе тип һанаған сит ил маркалы машинабыҙ ҙа бар. Шул машинаға тейәлеп, айына бер мәртәбә булһа ла баш ҡалаға барып әйләнәбеҙ. Путин шыуған тауҙан да шыуабыҙ, балалар аквапаркта һыу инә. Өфө театрҙарындағы спектаклдәрҙе лә ҡарайбыҙ. Шулай итеп, мәҙәни-сәнғәти-спорт һыуһыныбыҙҙы ҡандырабыҙ. Ошолай күп йөрөгәнебеҙ өсөн туғандарыбыҙ үҙ-ара шаяртып-мәрәкәләп "дәртле ғәйшәләр" тип тә атай беҙҙе.

Быларҙы нимә өсөн һөйләйем һуң? Аҡса юҡ, эш юҡ, тип ауылдан ситкә китмәһендәр ине йәштәр. Ялланып, ҡалымда йөрөүселәр күп осраҡта алдана, уларға эшләгәне өсөн түләмәйҙәр. Әммә, шулай булыуға ҡарамаҫтан, уларҙың күбеһе һаман да сабата туҙҙыра, ғүмерен заяға уҙҙыра. Ситтә улар ни тиклем нығыраҡ алданған һайын, шул тиклем оҙағыраҡ ҡайтмай йөрөй. Ауылда эш юҡ тип әйтеүселәр яҡшы түләүле эштә - шул уҡ көтөүсе булып та эшләргә теләмәй. Бынан тыш, үҙендең хужалығында ла эшләп, бына тигән итеп йәшәп була. Шулай булғас, хикмәт бында ауылда эш юҡлыҡта түгел, ә ауылда йәшәргә теләмәүҙә, анһатҡа һалышып йәшәргә ынтылыуҙа, тип аңларға кәрәктер. Тарих ҡабатланмай, тиҙәр, юҡ, ҡабатлана, беҙ зимагурҙар заманына әйләнеп ҡайттыҡ тағы.

## Тәбиғәт бушлыҡты яратмай

Әгәр ҙә йәштәр ошо рәүешле ауылдарыбыҙҙы ташлап китеп, ҡалаларыбыҙға барып төпләнеп, ауылдар бушап ҡалһа, ул бушлыҡты кемдәрҙер барыбер тултырырға тейеш бит инде. "Тәбиғәт бушлыҡты яратмай" тиҙәр бындай осраҡта. Тимәк, был ерҙәргә башҡа-

***Өҫтәл туҡмап асыулана торған холҡом юҡ. Ниндәй генә хәлдәр булғанда ла, үҙлегемдән сығыуҙан да тыйылам. Был йәһәттән мин эшемдә лә, ғаиләмдә лә бер ишмен. Шулай ҙа ҡаты ғына итеп тейерен бер әйтеп алырға тура килә барыбер. Был холҡом атайымдан киләлер. Уның кешегә бер ваҡытта ла һүгенеп йә асыулы итеп өндәшкәне булманы, шулай ҙа тейерен әйтер ине. Ул беҙгә, үҙенең улдарына, һәр ҡайһыбыҙ нисәшәр түмәр утын ярырға тейеш икәнлегебеҙҙе алдан билдәләп ҡуя торғайны. Һуңынан тикшерә ине. Уның ҡушҡанын үтәмәй ҡара, бының өсөн ул әрләмәй, ҡайыҙламай, әммә бер норма түмәр урынына тағы ла ике норма түмәр өҫтәлә был осраҡта.***

✓ *Тәрбиә йәһәтенән тағы бер фекер. Атлап барған бала ҡапыл ҡолап китһә, уны йүгереп барып торғоҙоу дөрөҫ түгел. Бала үҙе ҡолағас, үҙе тороп, аяғына баҫып өйрәнергә тейеш.*



лар киләсәк һәм беҙ тыуған еребеҙҙе юғалтасаҡбыҙ. Бындай осраҡта нимә эшләргә була һуң? Яңы төҙөлгән хужалыҡ нисек кенә тиеп аталмаһын, ул колхозмы, совхозмы, артелмы, крәҫтиән хужалығымы, унда бер-нисә кеше эшләгәс, барыбер ҙә шул уҡ колхоз була инде. Ул хужалыҡ яҡшы итеп эшләп алып китһен өсөн дәүләттең ярҙамы мотлаҡ рәүештә кәрәк буласаҡ. Совет осоронда колхоздар дәүләттән кредит йә ссуда алып, уны кире ҡайтара алмаһа, дәүләт был бурыстарҙы күпмелер ваҡыттан һуң списать итә торғайны. Хәҙер ауылда йәшәүселәрҙең фиҙаҡәрлеге, тырышлығы менән генә ауыл хужалығын һис юғы совет осоро кимәленә тиклем күтәреү мөмкин түгелдер.

Халыҡ хәҙер бер кемгә лә ышанмай башланы. Өҫтәгеләр күмәртәләп, аҫтағылар ваҡлап алдай. Элек депутаттарҙы халыҡ ихтирам итә, ихтирам итмәһә лә, уларҙан ҡурҡа торғайны. Элек депутаттарҙың

ят психологик тәьҫиренә дусар итмәйме? Беҙ элек-электән интернат тигәндә, һәр ваҡыт етемлекте, сәйәси золомдо күҙ уңында тота торғайныҡ. Интернат - ата-әсәһенән айырылған, коллектив шарттарында йәшәргә мәжбүр ителгән, тигән төшөнсәгә туранан-тура барып ялғана. Мин балаларҙы интернаттарҙа йәшәтеүгә, йә булмаһа, уларҙы автобус менән күрше ауылдарға йөрөтөп уҡытыуға бөтөнләй ҡаршымын. Һуң, ауылдың бәләкәй булыуында, класта уҡыусыларҙың һаны аҙ булыуҙа балалар ғәйепле түгел бит. Ниңә был хәлдең ауырлығын фәҡәт балалар үҙ елкәһендә татырға тейеш һуң? Әгәр ҙә беҙ яраҡлаштырыуҙы ошо рәүешле бәләкәй ауылдарҙағы мәктәптәрҙә ябыуҙан башлаһаҡ, киләсәктә, ғөмүмән, мәктәптәрҙең генә түгел, хатта юғары уҡыу йорттарының да бер кемгә лә кәрәк булмауы бар. Эштәр шуға бара ла һымаҡ. Сөнки ауылда йәшәүсе ата-әсәләрҙең тырышып-тырма-

# БАЛА...

## өйрәнһен



һәр нәмәлә лә, һәр кемдә лә эше булды. Улар хатта айырым ғаиләләрҙәге сетерекле мәсьәләләргә тығылып, ул мәсьәләләрҙе ыңғай юҫыҡта хәл итеүҙә булышлыҡ күрһәтә торғайны. Һайлауҙарға халыҡтың аҙлап йөрөй башлауында ла депутаттың абруйы төшөүе сәбәпсе. Хәҙер халыҡ араһында депутат менән осрашыуҙарға йөрөү генә түгел, үҙҙәре һайлаған депутаттың кем икәнлеген дә белмәүселәр күп.

шып, үҙ ауыҙынан йолҡоп булһа ла балаларына юғары белем бирергә тырышыуы ла һуңғы йылдарҙа бушҡа булыуы күренә башланы. Ни өсөн тигәндә, күп кенә юғары уҡыу йорттарын тамамлаусылар үҙ һөнәре буйынса эшкә урынлаша алмай, эшләгәндәре лә бөтөнләй икенсе төрлө тармаҡта хеҙмәт итә. Бынан нимә күренә: һуңғы йылдарҙа юғары белем беҙҙең илдә бөтөнләй кәрәк булмай бара. Ни

*Беҙ элек-электән интернат тигәндә, һәр ваҡыт етемлекте, сәйәси золомдо күҙ уңында тота торғайныҡ. Интернат - ата-әсәһенән айырылған, коллектив шарттарында йәшәргә мәжбүр ителгән, тигән төшөнсәгә туранан-тура барып ялғана. Мин балаларҙы интернаттарҙа йәшәтеүгә, йә булмаһа, уларҙы автобус менән күрше ауылдарға йөрөтөп уҡытыуға бөтөнләй ҡаршымын. Һуң, ауылдың бәләкәй булыуында, класта уҡыусыларҙың һаны аҙ булыуҙа балалар ғәйепле түгел бит. Ниңә был хәлдең ауырлығын фәҡәт балалар үҙ елкәһендә татырға тейеш һуң? Әгәр ҙә беҙ яраҡлаштырыуҙы ошо рәүешле бәләкәй ауылдарҙағы мәктәптәрҙә ябыуҙан башлаһаҡ, киләсәктә, ғөмүмән, мәктәптәрҙең генә түгел, хатта юғары уҡыу йорттарының да бер кемгә лә кәрәк булмауы бар.*

### Бер тинлек ҡуян - ун тинлек зыян

Йәй сыҡҡанда, мәктәптәрҙе заманға яраҡлаштырыу сәйәсәтенең, асылда, уҡыусыларҙың бала сағын урларға йүнәлтелеүе хаҡында ла әйтеп үтергә кәрәктер. Хәҙер иһә был сәйәсәттә мәктәп автобусы һәм интернаттар ярҙамында ғына хәл итергә тырышалар. Автобус һатып алыу, уны йыл әйләнәһенә өҙлөкһөҙ эшләтеү, интернаттар төҙөү өсөн ниндәй сығымдар китәсәге тураһында уйлап ҡараусы кеше бармы икән? Был хәл, халыҡ мәҡәлендә әйтелгәнсә, "Бер тинлек ҡуян - ун тинлек зыян", тигәнде хәтерләтә. Берҙән, автобуста төрлө һауа шарттарында көн һайын мәктәпкә дығырлап йөрөгән баланың уйнарға, саңғыла шыуырға, үҙаллы шөғөлләнергә ваҡыты ҡаламы ла, икенсенән, уҡыусыларҙы интернаттарҙа йәшәтеү уларҙы ата-әсәнең тәбиғи мөхитенән айырмаймы ла, уларҙы ят ауыл мөхитенең

өсөн беҙҙең дәүләткә мәктәп, юғары белем кәрәкмәй һуң? Сөнки дәүләткә белемлеләр кәрәкмәй. Ә беҙ шуны ла яҡшы аңлайбыҙ: граждандарының белемле булыуын тәьмин итә алмаған дәүләт үҙе лә юҡҡа сығыуға дусар. Әгәр ҙә бер ауылда мәктәп ябыла икән, был дәүләтселектең юҡҡа сыға барыуының бер сағылышы ул.

үҙенең таҫмаһын йә сепрәген бәйләй һәм байраҡ рәүешендәге бер ҡот ағасында бер нисә ғаилә берләшә.

Ауыл хакимиәте башлығы булып эшләгәндә бер хәлгә иғтибар итә инем. Яҙ етеп, ер ҡарҙан арселә башлау менән һәр кем үҙенең йорт тирәһен рәткә килтерә, таҙарта, һеперә башлай. Был эшкә берәүһе тотонһа, башҡалар дәррәү рәүештә уға ҡушыла. Колхоз осоронда ла беҙҙең ауылда колхоз төҙөп биргән ике генә йорт булды.

### Берҙәмлектә - көс

Беҙҙең Үрнәк, Әбеш яҡтарында бесән тейәгәндә тракторҙы уртаға ҡуялар ҙа, һәр ҡайһыһы айырым күбәнән һәнәк менән бесән сәнсеп алып, арбаға тейәй башлай. Ә бына беҙҙең Йәнтеш ауылы ир-аттары дүртешәр-бишәр кеше бер юлы бер күбәне һәнәккә эләктереп, арбаға ырғыта. Ауылыбыҙҙың берҙәмлекте, бер төптән тотоноп эшләүҙе аңлатҡан ошо хәл-күренешенең сәбәбен мин тарихтан эҙләп ҡараным. Беҙҙең ауыл даланың тамамланған, урман-тауҙарҙың башланған ерендә урынлашҡан. Беҙҙең яҡ элек-электән һәр ваҡыт ҡаҙаҡтар менән барымта-ҡарымта мөнәсәбәтенең иң ҡырҡыу урыны булараҡ та үҙенсәлекле географик урын һаналған. Тимәк, ауылыбыҙ халҡының бер төптән тотоноп эшләүе тап шул мәлдәрҙә бергәләшеп дала стихияһына ҡаршы тороу ихтыяжынан килеп сыҡҡандыр, тием.

Беҙҙекеләрҙең хатта ҡот тотоп туйға барыуҙарында ла ошо берҙәмлек идеяһы ята. Йәғни, ҡот ағасына һәр берәһе

Тик шул йорттарҙа йәшәүселәргә генә ихатаһын таҙартыу кәрәклеген иҫтәренә төшөрә торғайныҡ. Ауылыбыҙ кешеләрендә сәм бар, ауылыбыҙ төҙөклөгө тап шунан килә.

Бынан егерме йыл элек кенә беҙҙең Хәйбулла районын иң артта ҡалған, саман өйҙәрҙә йәшәүсе төбәк итеп беләләр ине. Хәҙер хәлдәр ныҡ үҙгәрҙе. Рәхмәт ул саҡтағы республикабыҙ етәкселегенә, рәхмәт ул саҡтағы районыбыҙ етәксеһе Фәтих Ҡаҙаҡбаевҡа. Ике тиҫтә йыл эсендә беҙ газлы-юллы-телефонлы төбәккә әйерелдек. Ул саҡта ла ауылдарыбыҙҙа дәррәү күтәрелеш булмаһа, халыҡ берҙәм тотонмаһа, хатта килеп еткән газды ла йортобоҙға индерә алмаҫ инек. Мин Өфө яғында шундай ауылдарҙы беләм, уларҙа газүткәргес йорттан 20-30 метрҙа ғына ята, әммә йортҡа газ үтмәгән, баш ҡаланан 30-40 саҡрымда ятҡан ҡайһы бер ауылдарҙың урамдары ғүмерҙә лә асфальт, йорттар телефон, газ күрмәгән.

### Енси тәрбиә, ғөмүмән, тәрбиә хаҡында

Киномеханик булып эшләгәндә хатта ир менән ҡатындың үбешеү кадрҙары булған фильмдарҙы ла кинопрокаттан "16 йәшкә тиклемге балаларға ҡарарға ярамай" тигән тамға ҡуйып ебәрә торғайнылар. Нисек кенә тырышһаҡ та, танауы еҫ һиҙә башлаған үҫмерҙәр төрлө юлын табып, барыбер ҙә фильмды ҡарарға ынтыла һәм залға үтеүгә өлгәшә.

Ундай әрһеҙҙәр өсөн киномеханиктарҙың бер алымы булды, йәғни үҙебеҙҙән алда фильмды күрһәткән коллегаларыбыҙҙың билдәһе буйынса, фильм барышында "ҡарарға ярамаған" кадр етһә, объективты томалап үткәреп ебәреп, "ярамаған" кадрҙы усыбыҙ эсендә үҙебеҙ генә ҡарай инек. Тәрбиәнең был асылы дөрөҫ булғанмы-юҡмы, уның ҡарауы, хәҙер был мәсьәләлә тулыһынса азатлыҡ, йәғни хәҙерге балалар телевизорҙан да, компьютер, видик аша ла ундай фильмдарҙы рәхәтләнеп ҡарай. Енси тәрбиәгә килгәндә, был мәсьәләгә минең үҙ ҡарашым бар. Миненсә, ҡыҙ баланың әсәһе менән был мәсьәләлә бер сере лә булырға тейеш түгелдер. Ғөмүмән, улар әхирәттәр кеүек булырға тейештер. Әгәр ҙә әсәй кеше ҡыҙынан нимәнелер йәшерһә, был мәсьәлә ҡыҙ өсөн оло ҡыҙыҡһыныу объектына әүерелә. Бер мәл Таһир улыбыҙ әсәһенән: "Беҙ һеҙҙең туйығыҙ ваҡытында ҡайҙа булдыҡ, илап яттыҡмы?" - тип һораған. Әммә әсәһе уға төрлө юлын табып, кешенең донъяға ҡайҙан барлыҡҡа килгәнен аңлата алған. Хәҙер улым был турала белә. Бынан нимә килеп сыға: ир балаға ла енси тәрбиәне башлап әсәй кеше бирергә тейештер, тием. Әгәр ҙә тәрбиәнең был өлөшөн беҙ атайҙарға тапшырһаҡ, дөрөҫ булмаҫ ине һымаҡ.

Тәрбиә йәһәтенән тағы бер фекер. Атлап барған бала ҡапыл ҡолап китһә, уны йүгереп барып торғоҙоу дөрөҫ түгел. Бала үҙе ҡолағас, үҙе тороп, аяғына баҫып өйрәнергә тейеш. Шунан һуң баланың, бигерәк тә ир баланың тиҫтерҙәре менән мөнәсәбәтенә ҡыҫылыу, үҙ баланды яҡлау, аралау, туҡмалған өсөн тиҫтерен йә күрше балаһына бармаҡ янау йә ҡолағын бороу ҙа үҙ баланды тәрбиәләүҙә кире йоғонтоға эйә, тип уйлайым. Тәрбиә эше бына шундай үҙебеҙ ҙә уйлап еткермәгән ваҡ ҡына күренештәрҙән тора ул...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмә аҙағында Салауат Ғәлимйән улына журналистарҙың классик һорауын да бирҙем: яңынан йәшәргә тура килһә, нисек йәшәр инегеҙ? Яуап түбәндәгесә яңғыраны: "Яңынан йәшәргә тура килһә, бер нәмәне лә үҙгәртмәҫ инем. Барыһы ла киренән ҡабатланыр ине", тиҙәр күптәр. Мин бының менән килешмәйем. Сөнки хәҙерге тәжрибәм һәм аҡылым менән тормошома ҡайһы бер үҙгәрештәр индерер инем. Йәш саҡта, водителгә уҡып, танытма алһам, башҡа бер ниндәй ҙә уҡыу кәрәкмәй, тип уйлай инем. Ул заманда был һөнәр иң данлыҡлыһы һанала ине. Хәҙер иһә, шофер булып ҡына йәшәүе еңел түгелдер, тим. Заман талаптары хәҙер башҡа: ниндәйҙер һөнәр буйынса юғары белем, бер нисә тел белеү, компьютер технологияларын үҙләштереүҙе талап итә. Хәҙер хатта көтөүсе булһаң да ошоларҙы үҙләштереү фарыз..."**

**Әмир ҒҮМӘРОВ
яҙып алды.**

Спартак ИЛЬЯСОВ

# АҠСАЙ

(Хикәйә)



Күрәһең, кешенең күҙ нурҙарында йыһан ҡеүәте сағылмаһы йыртҡыстыҡына ҡарағанда көслөрәктер. Айыуҙы ла минең күҙ ҡарашым нуры тотҡандыр. Бына айыу, мин икенсе талға әҙ генә ышыҡланыу менән, ике-өс аҙым миңә табан алға атланы. Беҙ тағы ла бер-беребеҙҙең күҙҙәренә ҡарап торабыҙ. Дөрөҫөрәге, ул миңә ҡарап тора, ә мин арт менән сығыу яғына атлайым. Хәҙер иң мөһиме - һөрөнөп артҡа йығылып китмәү. Йығылып киттеңме, айыуға ташланыр өсөн бойороҡ була. Күҙ ҡарашы йоғонто итеүҙән туҡтай. Айыу шунда уҡ үҙен иркенлектә тоя. Уның эске ҡеүәте ҡорбанына ташланырға тәбиғи фарман бирә. Ҡулда осо осланған ҡайын таяҡтан башҡа бер нәмә лә юҡ. Уның менән айыуға ҡаршы йөрөп буламы ни? Бил ҡайышына хәнйәр эленгән эленеүен. Әммә нисек тура килә бит. Өҫтөңә килеп менеү менән башыңдан ҡабып ҡыҫһа, шунда уҡ иҫеңде юғалтаһың. Ул ваҡытта хәнйәр ярҙам итмәй. Әгәр ул ятҡан көйө ҡаршылашырға иткән һул ҡулың менән мәшғүл булһа, иҫең етеп, уң ҡулың менән хәнйәр һурып сығара алһаң, бәлки, аҫтан бер-ике тапҡыр сәнскеләй алырһың. Ун биш, ун ете сантиметрлыҡ хәнйәр мылтыҡ йәҙрәһендәй яра һалыр. Берәй ағзаңды айырып тартып алмаһа, бәлки, ҡотолорһоң.

Ә әлегә мин, тумарға һөрөнөп йығылмаҫ өсөн аяҡтарҙы күтәрә-күтәрә баҫып, артҡа атлауымды дауам итәм. Айыуҙың бер-ике аҙым алға атлауы була, Аҡсай тегене арттан тартҡылай ҙа ситкә һикерә. Айыу уны ҡыуып ебәрә лә тағы ла миңә төбәлә. Аҡсай айыу миңә ынтылам тигәндә генә арттан килеп бот араһына йәбешә. Тегегә башҡа сара ҡалмай. Кинәт боролоп, этте тотайым тип уҡталһа, ул инде өс-дүрт метр ситтә була. Мин Аҡсайҙың шул алымын ҡулланып, айыу уның менән мәшғүл булғанда, ун-ун биш аҙым йырағайып ҡалам. Бына шырлыҡ ситенә килеп еттем. Уф, Алла! Айыу эттән ҡотолоп, инде туҡтамайынса миңә ташланырға булғайны. Минең шырлыҡ ситендә икәнде шәйләгәс, миңә ташланыу дәррәүе бөттө. Туҡтап, миңә ҡарап торор булды. Тик беҙҙең аралыҡ арыу ғына алыҫлашҡайны.

Айыу бүре түгел. Алыҫтағы ҡорбанына ташланмай. Ә Аҡсай тегене һаман да кеҙәләй генә. Йә арттан тарта, йә алдынан абалай. Миңә ташланырға ирек бирмәй. Ә мин уны саҡырам да саҡырам. Тик ул мине ишетһә лә, тыңламай. Үҙ эше менән шул тиклем мәшғүл. Әйтерһең дә, донъяға нимә өсөн килгәнен белә. Тоҡомона тоғро. Айыу уға албырғап, нимә ҡылырға ла белмәйенсә, шырлыҡ ситендә тороп ҡалды. Ә мин үлемдән ҡотолоп сыҡтым да: "Улым, айыу, улым, айыу", - тип ҡысҡырып, кисеүҙе кисеү тимәй шап та шоп йүгереп аша сығып, ул ултырған ҡарағай төбөнә йүгерҙем. Мине күреп, улым ҡаршы сыҡты. Шырлыҡ киң ине, ярты саҡрымдай булыр. Ел дә ул ултырған түпһәлдән миңә өрә. Улым бер нәмә лә күрмәгән дә, ишетмәгән дә. Айыу шырлыҡ эсендә мине талап үлтерһә лә, ул бер нәмә лә белмәй, был яҡта ултырыр ине.

Йәш, көслө, дәртле улым, айыу һүҙен ишеткәс, ҡоторҙо ла китте:

- Әйҙә, әйҙә атай, тиҙерәк барайыҡ, мин уны хәҙер атам, - ти был.

- Юҡ, улым. Беренсенән, рөхсәтһеҙ айыуҙы атырға ярамай, әжере бик ҙур. Икенсенән, айыу атыу ҡуян алыу түгел. Хәҙер кис. Тиҙҙән мәҙек һуғыла. Шырлыҡ эсе ҡараңғылана. Бәлки, ул берәй емтек янындалыр. Бара башлаһаң, ҡыҙғанып, тора ла йәбешәсәк.

Шул дәлилдәрҙе килтергәс, улым һыуына төштө. Ә Аҡсайҙан тауыш та, тын да юҡ. Иң алда арба янына төшөп, аттарҙы тотоп бәйләнек. Шул арала Аҡсайҙың эстә һаман да айыуҙы абалауы ишетелә. Башҡа сара юҡ. Тоттоҡ та Аҡсайҙы саҡырырға шырлыҡ араһына йүгерҙек. Донъя хәлен белеп булмай, тип, мин оҙон һаплы балтаны ҡулға эләктереп алдым. Кисеү аша сыҡҡанда Аҡсайҙың тауышы ишетелә ине, әммә ҡайҙалыр төптә, йыраҡта кеүек. Мин ҡасып сыҡҡан ергә килеп туҡтаныҡ та, Аҡсайҙы саҡырабыҙ, әммә ләм-мим. Бер тауыш та, өн дә юҡ. Тыңлайбыҙ. Тауыш юҡ. Мин айыуҙан ҡасып сыҡҡан ерҙән улым мылтығын тотоп эскә инеп киткәс, уны ҡурсалап, балтаны тотоп, мин дә артынан эйәрҙем. Шырлыҡ эсе инде ҡараңғы. Аҡсайҙы төрлөсә итеп саҡырабыҙ. Тауыш-тын ишетелмәгәс, туғайлыҡҡа кире сыҡтыҡ. Унда ла мәҙек тулыһынса ерҙе солғаған.

- Шырлыҡ аша сығып, аттар янына киткәндер ул, - ти улым.

Уның был фаразына ышанып, тиҙ-тиҙ арба янына атланыҡ. Әммә Аҡсай арба янында ла юҡ ине. Аттарға менеп, икебеҙ ике яҡтан шарлыҡты урап, Аҡсайҙы саҡырып йөрөп сыҡтыҡ. Тик Аҡсай һыуға батҡан кеүек юҡ. Өн дә, тын да юҡ. Бик бошоноп, төндә генә ҡайтып киттек. Өйгә ҡайтҡас, Аҡсай тураһында һүҙ сығармаҫҡа тырыштыҡ. Ул бик арыған, йоҡлай, тигән уйҙырма һүҙ әйттек. Хатта тәгәсенә аш сығарып һалдыҡ. Төндә, бәлки, ҡайтыр, тип өмөт иттек. Сыҡҡан һайын аш һалынған тәгәсен тикшерҙек. Әммә ул тулы көйөнсә тора бирҙе. Иртәгеһен бик иртә тороп, аттарҙы егеп, бесәнгә барабыҙ тигән булып, Аҡсайҙы эҙләргә киттек.

Шырлыҡты тағы ла икебеҙ ике яҡтан урап сығырға ҡарар иттек. Һанама юл менән шырлыҡ башындағы ҡалҡыулыҡ араһына сәселгән һоло игененә китеп барам. Юлдағы һәр эҙҙе күҙәтәм. Иген ситендә өйөлөп ятҡан тик һоло ҡатыш айыу тиҙәген ике ерҙә осраттым. Улым килде. Был төндә ул һоло игенендә булған икән. Күп ерҙә һолоноң баштарын һындырып ашап бөткән. Еңеләйгән ҡоро һабаҡтары ғына елдә елберҙәп ултыра. Был алпамыша шырлыҡҡа кире кереп ятҡандыр, тип уйлайбыҙ. Аттарҙан төшөп, ялан ерҙәрәк үҫкән ҡайынға бәйләнек тә, кисә кис кергән юл менән эскә инә башланыҡ. Үләндәр тапалған, иҙелгән. Бына мин айыуҙы тәүләп күргән ҡара тал өйкөмө. Бында үләндәр бөтөнләйгә тапалып бөткән. Ауыр еҫ килгән кеүек. Ян-яҡты ентекләп ҡарағас, күреп ҡалдым. Әллә айыу үҙе, әллә бүре мышының башмағын йыҡҡан булған икән. Байтаҡ ваҡыт элек булған байрам урынында туҙған йөндәр, яртылаш ҡаҡ баш һөйәге, ике тояҡ ята. Тояҡтарға ҡарағанда, бер йәшлек башмаҡ. Аҡсай менән минән шул емтекте ҡыҙғанып ҡарауыллап ятҡан икән айыу. Хәҙер уның тәбиғи холҡо асыҡланды.

Ә Аҡсай, Аҡсай ҡайҙа һуң? Үләнде йығып, ишәләнеп киткән юлдарынан тағы ла төпкәрәк үтәбеҙ. Бына алдараҡ ҡоролоҡ ситендә үлән айырыуса ишәләнгән. Ниҙер тырналған, өйөлгән. Ян-яҡты иғтибар менән ҡарайбыҙ. Бына дүңгәк, уның төбөндә сатыр-сотор өйөмө. Улым өйөмдө арлы-бирле типкесләне лә, аҫтынан үле Аҡсайҙы һөйрәп сығарҙы. Бахырҡайым! Эсе йыртылып киткән, эсәктәре күренеп тора. Башы тотошҡан. Бер күҙе һытылып килеп сыҡҡан. Артҡы аяғы һынған. Артабан көрәк килтереп, шырлыҡ ситендәге туғайлыҡҡа сығарып, өс тармаҡлы ҡайын төбөнә Аҡсайҙы күмдек.

Уның ҡәбере янына ултырып, айыу менән һуңғы алышын күҙ алдына килтерәм. Айыу миңә ана ташланам, бына ташланам тип, Аҡсай ҡамасаулағанға ташлана алмағас, мин дә унан йыраҡ уҡ яланға сығып өлгөргәс, ҡапыл емтеге иҫенә төшкәндер. Мине боролмала күҙҙән юғалтыу менән емтеген Аҡсайҙан ҡыҙғанып, ҡапыл уға ташланғандыр. Асыуы килгән айыу, Аҡсайҙы төпкә баҫтырып, хатта бире тороп ҡалғандыр. Әммә һеркә кеүек сәбейәшкә көсөк, кире сабып килеп, был хужаны емтегенән тағы ла ҡыуырға керешкәндер, тип бик дөрөҫ фаразлайым, шикелле. Эйе, ярһыған Алпамыша был юлы Аҡсайға, уның абалауынан да ялҡып, маҡсатлыраҡ ташлана. Айыуҙың әлегә тиклем былай ҙур асыу менән ташланғанын көтмәгән Аҡсай, ҡаушап уҡ ҡала. Сөнки әлегә тиклем Алпамышаға Аҡсай үҙе ташлана ине. Бындай һөжүмде көтмәгән Аҡсай, әллә һөрөнөп китә, әллә ситкә һикерергә ағас ҡамасаулай... Күрәһең, уға айыу шул ваҡытта алғы ҡулы менән бик ныҡ һуғыуға өлгәшә. Тәкмәсләп барып төшкән Аҡсайҙы ул тотоп та ала. Ҡаршылашырға ауыҙын асҡан Аҡсайҙың бөтә башын ҡабып, иҙгәнсе бер тешләй ҙә ҡуя. Тотҡан йә йыҡҡан ҡорбанын күмеп ҡуйыу ғәҙәте булғанлыҡтан, ул Аҡсайҙы шунда уҡ сүп-сар тырнап күмә. Ә беҙ уны был ваҡытта шырлыҡ тышында саҡырып эҙләгәнбеҙ...

Аптырарһың. Ер йөҙөндә күпме үлтереш, күпме ҡан ҡойош. Кемдер кемгәлер ысынлап та эт! Ә эт кем? Ниңә насарҙы кеше эт ти? Ә бит эттәр араһында ла, эт булһа ла, эт булмағандары ифрат күп. Кеше үҙ ишен, үҙ кешеһен эткә тиңләп: ул эт, хатта эттән дә насар, тип тиргәй икән, ул кеше ысынлап та кешеләр араһындағы, бәлки, иң насар кешелер. Ә ниңә ул насар кешене эткә тиңләп һүгә? Кеше өсөн йәнен биргән эттәр ҙәбаһа, был эт кешеләр ҡорған донъяны йәмләй, хатта данлай ҙа алалар. Бына минең ғүмеремде һаҡлап алып ҡалған был йоҙроҡтай ғына аҡ көсөк миңә кем? Әллә ғүмерем ҡыл өҫтөндә торған ваҡытта йәнемде һаҡлап алып ҡалыу өсөн Тәңремдән ебәрелгән фәрештәнең һаҡ көсөгө булдымы? Шулайҙыр. Башҡаса булмаҫ. Сөнки ваҡиға булды. Мин уға шаһитмын. Аҡсай булмаһа, бәлки, мин шәһит булыр инем. Исеме лә минең күңелемә ҡапыл күктән бирелгән кеүек булды. Аҡ фәрештә ярҙамсыһы булған икән Аҡсай! Уның алдында хәҙер минең бурысым да юҡ кеүек. Ул мәңгелеккә - баҡыйлыҡҡа китте. Уға ни бары 11 ай ғына ғүмер бирелгән булған. Булмышындағы үҙ бурысын үтәр өсөн. Эйе. Фәрештәһе уға батырлығын үтәргә насип иткән. Шул бурысын үтәп, үҙе баҡыйлыҡҡа күсте. Ул теге донъяға минең был донъяла йәшәүем өсөн китте.

Тик намыҫымды бер нәмә өйкәй: Аҡсайҙы һаҡлап алып ҡала алманым...

(Аҙағы. Башы 37-се һанда).

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

## ҺУҠЫР КҮҢЕЛГӘ...

### туған юҡ

- Ҡомағайҙан һаҡ бул - тупһа ташыңды ла йотор ул.
- Бирән биргән һайын туймай, һораныуын ҡуймай.
- Алдап-йолдап, өй һайын кәләп һалыу - ғәйбәтсенең бар эше.
- Иреңде күҙгә эл - донъяңа ир, күңелеңә йәр, аяғыңа гир булыр.
- Һәптән урам ҡыҙыра, уңған ҡабаҡ һыҙыра.
- Үҙеңде туҡмаған ҡулдан бүләк алыу - бер утҡа ике һикереү ул.
- Аҡ тамырҙы әрләмә - күҙе һайын дарыу тамыр.
- Кеше йөрәген тыйыуҙар уятһа, ҡаршылыҡтар уны бейеккә сөйә.
- Һәйбәт тормошта оло батыр ҙа, шәп шағир ҙа тыумаҫ.
- Тотош ғүмер - торғаны бер дарья: тулҡынлана, таша, ярһый, баҫыла.
- Тел быуынһыҙ - күпме һуҙһаң да һуҙыла.
- Бүре олоуҙан йондоҙ һүнмәҫ, теш ҡайрауҙан батыр сүкмәҫ.
- Һуҡыр күҙгә - туҙан, һуҡыр күңелгә туған юҡ.
- Кәкеренән ҡасҡан - бөкөрөнә ҡосҡан.
- Ҡышлыҡ ризыҡты йәйҙән төй - ҡыш ҡар өҫтөндә ҡарға эҙе лә булмай.
- Осҡан ҡоштар кире ҡайтһа ла, телдән осҡан һүҙҙәр кире ҡайтмай.
- Һармаҡ һикһәндә лә һармаҡ - һикерәндәүҙән бушамаҡ, тинтәк йөҙҙә лә тинтәк - тетрәнеүҙән туймай.
- Бал ҡорто балы менән, аҡыллылар кәңәше менән күңелдәрҙе күтәрә.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ *Иремдең бөтә ҡылыҡтарын шаяртыуға ауҙарып, түҙергә өйрәндем. Балаға атай кәрәк бит. Тик бер саҡ түҙемлегем бөттө: "Ҡәҙерлем, һин бала сағыңда башың менән берәй ергә төкөлмәнеңме?"- тип йылмайып ҡына һораным.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛАҢ МЫЖЫҺА...

## газлы һыу эсермә

■ Үсмер балаларға ҡыҫҡырырға һәм уларҙы түбәнһетергә ярамай, тип иҫкәртә ата-әсәләрҙе психологтар. Питтсбург университеты (АҠШ) ғалимдары раҫлауынса, ҡыҫҡырыу, әрләү, түбәнһетергә тырышыу үсмерҙең эмоциональ үсешенә кире йоғонто яһай, хатта депрессияға килтереүе ихтимал. Ике йыл буйына барған тикшеренеү осоронда белгестәр 976 ғаилә менән аралашҡан. Күп ата-әсәләр балаларына ҡарата ауыр һүҙҙәр ҡулланыуын белдергән. 13-14 йәштәге үсмерҙәр был осраҡта үҙен мәктәптә агрессив тота башлай, алдаша, һуғыша. Ғалимдар өйҙә балалар менән уларҙың хис-тойғолары тураһында күберәк һөйләшергә һәм уларға ҡыҫҡырмаҫҡа кәңәш итә.

■ Беҙ ҡолағыбыҙ менән генә түгел, күҙҙәребеҙ менән дә тыңлайбыҙ. Иң ҡыҙығы, кешенең телмәрен аңлауҙа күҙҙәр күпкә мөһимерәк, тип белдерә Солт-Лейк-Ситилағы (АҠШ) Юта университеты белгестәре. Тикшеренеүселәр психолог Гарри Макгурктың илле йыл элек асҡан яңылығын аңлатырға тырышҡан. Психолог ул ваҡытта уҡ әгәр ҙә телевизорҙағы тауыш менән һүрәт тап килмәһә, кеше мәғлүмәтте күҙҙәре аша алғанлығын раҫлай. Әле үткәрелгән һынауҙар ҙа күрһәтеүенсә, кешенең нервылар системаһы мәғлүмәтте визуаль ҡабул итеүгә өҫтөнлөк бирә.

■ Ир-егеттәргә - 40 йәштән һуң, ҡатын-ҡыҙға 30 йәшкә тиклем үҙ сәләмәтлегенә айырыуса иғтибарлы булыу кәрәк. Техастағы Сәләмәтлек медицина үҙәгендә бер нисә мең ауырыу тарихын анализлағандар. Бәктиһән, инсульт һәм инфарктка 30-ҙы үтмәгән ҡатын-ҡыҙҙар һәм 40-ты үткән ир-егеттәр тиҙерәк бирешә икән. Ғалимдар әйтеүенсә, был ҡағиҙә тап килмәгән осраҡтар була, әлбиттә, шулай ҙа иммунитеттың түбәнәйеүе, тәмәке тартыу, гипертония, шулай уҡ һимереү ауыр сирҙәргә килтерә.

■ Балалар көйөфө насар булғандан түгел, ә рационда шәкәр күп булыуынан да мыжыуы ихтимал. Америка Ҡушма Штаттарынын эре 20 ҡалаһында 3 мең биш йәшлек балаларҙы тикшереп, Американың өс университеты ғалимдары ошондай һығымта яһаған. Был балаларҙың 40 проценты көн һайын иң кәмендә - бер , ә 4 проценты дүрт порция татлы газлы эсемлек ҡулланған. Әҙ генә күләмдә лә татлы эсемлек ҡулланыу балаларҙың үҙен тотошона йоғонто яһауы билдәләнгән: улар күпкә ярһыуыраҡ һәм иғтибарһыҙыраҡ булып сыҡҡан. Бындай балалар сит кешеләрҙең әйберҙәрен ватҡан, һуғышырға тырышып ҡына торған. Тикшеренеүселәрҙең береһе, доктор Шакира Сулья әйтеүенсә, бала газлы эсемлекте ни тиклем күберәк эсһә, шул тиклем агрессивыраҡ булған. Тап был эсемлек балалар араһында артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусыларҙың күбәйеүенә килтерә.

■ Рәсәй Медицина фәндәре академияһы академигы Влаиль Казначеев иҫәпләүенсә, антибиотиктарҙың иркен һатылыуы халыҡтың сәләмәтлеген ҡаҡшата. "Пенициллин һәм антибиотиктар дәүере халыҡтың һаулығын һаҡлап ҡалыуҙа ҙур роль уйнаны, бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышы һәм унан һуңғы йылдарҙа стрептококк һәм пневмококк бактериялы инфекцияларҙан ҡотҡара ине. Әммә уларҙы күпләп ҡулланыу бактерияларҙың айырыуса ҡурҡыныс варианттарын барлыҡҡа килтерҙе". Академик белдереүенсә, уларҙы пенициллин менән еңеп булмай, хәҙер яңы препараттар эҙләү мөһим.

ШАҢДАУ

# "Ә БИТ ИРҘӘР СИСЕНМӘНЕ..."



**Хәлил Һөйөндөковтың гәзитебеҙҙә баҫылып сыҡҡан һәр мәҡәләһен, әҫәрен яратып, һөкланып уҡыйым. Тик "Ә бит ирҙәр сисенмәне..." мәҡәләһен уҡығас, уйланып йөрөнөм. Меҫкен ирҙәрҙе беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, юлдан яҙҙырабыҙ, имеш. Әгәр ир кеше ғаиләһенә тоғро булһа, ай-һай, кем уны әйәртеп алып китә алыр ине икән?**

Кейемгә килгәндә. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары халҡыбыҙ мосолман динен ҡабул иткәнсе лә, ҡабул иткәс тә баштан аяҡ сепрәккә төрөнөп йөрөмәгән бит. Баштарына яулыҡ ябынған һәм сит ирҙәр менән аралашҡанда яулыҡ осо менән генә танау, ирендәрен ҡаплап һөйләшкән. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары совет осоронда ла артыҡ сисенмәне. Дин тотоу тыйылғас, мосолман ҡанунларынан әкренләп тайпылдыҡ, әкренләп еңелсә кейенеүгә күнектек. Әммә бөтөнләй үк сисенмәнек. Әле лә мин өлкән, урта быуын ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың ипле генә кейенеп йөрөүен күрә йөрөйөм.

Кейем, тигәндән, үҙ йәшлегемдән бер миҫал килтерәм әле. Мәктәпте тамамлағас, рәссам һөнәрен үҙләштереү өсөн Мәскәүгә юғары уҡыу йортона уҡырға индем. Уҡыу йорто бинаһына ингәндә ишек төбөндә үк кешеләрҙе гипстан эшләнгән Диана һыны ҡаршы ала ине. Ун һигеҙ йәшлек кенә ҡыҙыҡай булараҡ, ул ярым шәрә һынға тура ҡарарға оялып, һәр саҡ иҙәнгә ҡарап үтә торғайным тәүҙә. Тора-бара күнегелде, ул һынға һөкланып ҡарай башланым. Икенсе курста уҡығанда анатомия дәресендә бер спортсы ир килеп, подиумға баҫты. Ул биленә бау ғына бәйләп, оят ерен генә туҡыма менән ҡаплап (тап ҡырағай ҡәбилә кешеһе), буласаҡ рәссамдарға идеаль тән төҙөлөшлө кеше һынын күрһәтә булып сыҡты. Уға ҡарай алмай яфаланыуым, оялыуым әле лә онотолмай. Ваҡыт үтеү менән сәнғәттәге ярым шәрә һындарға ла, тормоштағы ярым шәрәләргә лә аҡрынлап күнегелде. Уларға күнегеп кенә бөткәйнек, хәҙер тотошлайы менән сепрәккә төрөнгәндәргә күнегергә кәрәк. Улары ла беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙының фиғеленә тап килмәй түгелме һуң?

Әйткәндәй, Хәлил Һөйөндөков, ирҙәрҙе аҙҙырыусы, тип, ҡатын-ҡыҙҙы ғәйепләй ғәйепләүгә. Ә бит шул ҡатын-ҡыҙ иңенә аҡса табыу, балалар бағыу, ғаилә именлеген һаҡлау вазифаһы йөкмәтелгән. Ошо вазифаларын онотҡан, бар ауырлыҡты ҡатыны иңенә өйгән ир-егеттәребеҙгә күберәк нәсихәт уҡырға кәрәкмәйме икән? Кемдер, ирҙәргә нәсихәт уҡыу файҙаһыҙ, тип тә әйтер. Ә мин улай тип уйламайым. Үҙемдең тормошомдан бер миҫал. Кейәүгә сыҡҡас, иремдең бөтә ҡылыҡтарын шаяртыуға ауҙарып, түҙергә өйрәндем. Балаға атай кәрәк бит. Тик бер саҡ түҙемлегем бөттө. Бер көндө: "Ҡәҙерлем, һин бала сағыңда башың менән берәй ергә төкөлмәнеңме?"- тип йылмайып ҡына һораным. Ирҙәрҙең үҙҙәрен йәлләтергә яратыу ғәҙәте була бит. Ирем илай яҙып: "Эйе, миңә ун йәш тирәһе булғандыр, текә ярҙан йылғаға сумғайным, башым менән осло ташҡа бәрелеп, көс-хәл тере ҡалдым",- тип, миңә сәс араһынан уңалған яраһын күрһәтте. Ә мин: "Меҫкенкәй, шулайҙыр тип уйлағайным да шул", - тип кенә әйтеп ҡуйғайным, ирем эсен тотоп, рәхәтләнеп көлдө. Артабан холҡоноң кире яҡтарын ҡырҡа кәметте. Ул кире ғәҙәттәре яңылыш килеп сыҡһа, "Уф, башы төкөлгән кешемен инде мин", тип, үҙен тәнҡитләп ала торғайны...

Нисек кенә тимә, ипле генә, таууыш ҡүтәрмәй генә, шаяртыу ҡатыш әйтелгән тәнҡит һүҙен ҡабул итә ул ир заты.

**Айгөл АХУНОВА.**

# "ҠЫҘҘАР ЙЫЙНАҠ БУЛҒАС...

## егеттәр тыйнаҡ булды"



**"Киске Өфө"нөң 34-се һанындағы "Ҡыҙҙар йыйнаҡ булғас, егеттәр тыйнаҡ булды" тигән мәҡәләне уҡығас, мәңге юйылмаҫтай мәлдәр иҫкә төштө. Әйткәндәй, өләсәйем был мәҡәләлә икенсерәк итеп, "Ҡыҙ тыйнаҡ - егет муйнаҡ" тип әйтә ине.**

Беҙ үҫкәндә телевизор-радио, гәзит булманы. Ҡышҡы оҙон төндәрҙә беҙҙең йәҡо бүлмәһеләй ҙур мейес башына 2-3 өй балаһы теҙелеп ятабыҙ ҙа, әкиәт һөйләшәбеҙ. Ниндәйен генә уйлап сығармайбыҙ һуң әле, тел байлығын, фекерләү ҡеүәһен үҫтергәнбеҙ бит. Бер кем ҡымшанмай, артыҡ һүҙ ҡатҡандарға бер усал ҡараш етә. Йәйгеһен ололар эштә, донъя көтөү беҙҙең елкәлә. Ҡулалмашлап, хужалыҡтағы эштәрҙе атҡарабыҙ, малайҙар тышта, ҡыҙҙар өйҙә мәж килә беҙ. Әсәйҙәр ҡайтыуға эш бөткән, аш әҙер. Үҫә төшкәс, колхоз эшенә ҡушалар, бесәндән алда иген утайбыҙ, йәшелсә баҡсаһында эшләйбеҙ, сусҡа фермаһына кесерткән әҙерләп бирәбеҙ - ауыл урамдары тап-таҙа булып ҡала ине. Көнө буйы малай-ҡыҙҙар бергәбеҙ, әммә берәү ҙә насар ҡылыҡ күрһәтмәҫ, йәмһеҙ һүҙ әйтмәҫ ине. Ҡыҫҡырып көлһәк, әрләнә инек әле.

Бесәндә ҡыуышты оҙон итеп яһай ағайҙар. Ҡыҙҙар, егеттәр, ашнаҡсы Әҙнабикә апай, салғы рәтләүсе Ғәлим бабай - бергә йыйыраҡ була, тип, ҡумаҡлап урынлашабыҙ. Яңылыш тейеп, ҡурҡытыуҙан һаҡланып, ағайҙар ҡыҙҙар менән егеттәр араһына ҙур бесән көлтәһе һалалар ине. Бына ниндәй тәртип булған. Кис усаҡ тирәһендә уйынкөлкө була, арығандар ҡыуышҡа йүнәлә тора. Иртүк эш башлана, йәшелсә баҡсаһында өлгөргән ҡыярҙы тейәп, бригадир Шакир ағай килеп етә, эште тикшерә, өйрәтә, маҡтай.

Көҙ көнө эшебеҙгә ҡарап, иген, бал бирәләр. Ул саҡта аҡса түләү булманы. Уҡыуҙар башланғас, ауыл һайын концерт ҡуябыҙ - картуф йыйыламы, аҡсамы, мохтаж ғаиләләргә бирәбеҙ. Мәктәп өсөн утын әҙерләү, колхоздың йонсоу аттарын ҡарау бер ҙур бурыс булып һаналды. Тимурсылар командаһы гөрләп тора ине.

Шул мәлдәрҙәге татыулыҡты, тәртипте, әҙәплелекте, ярҙамсыллыҡты иҫкә алам да, хәҙерге көн менән сағыштырам - ер менән күк араһы. Баҫҡыс-баҫҡыс күтәрелеп, үткәндәрҙе хәтерләп, һикһәнгә еткәнемдә лә һиҙмәгәнмен. Үҫкәндә иптәштәрҙең береһе лә юҡ - әйтерһең, мин улар өсөн йәшәйем. Хатта күңелемдә шиғыр ҙа тыуҙы.

***Ғүмерем - теҙгенһеҙ ат***

*Ғүмеркәйем - теҙгенһеҙ ат,*
*Елдереп үтеп китте.*
*Үкенмәйем, матур мәлдәр*
*Ул миңә бүләк итте.*
*Шатлығын да, ҡайғыһын да,*
*Әсенен дә, сөсөһөн дә үлсәүҙәрһеҙ татытты.*
*Ә шулай ҙа ул мине киң күңелле, алсаҡ йөҙлө*
*Инәй итеп ҡартайтты.*
*Ҡайғырмайым, ғүмерем уҙҙы, тип,*
*Уфтанмайым, сәсем аҡ, тиеп.*
*Көрһөнмәйем, тешем юҡ, тиеп.*
*Шатланамын уҙған ғүмер юлым*
*Аҡ сәскәләй аҡ һәм паҡ тиеп.*
*Инанамын, ҡалған йылдарым да,*
*Булыр әле аҡ һәм хаҡ, тиеп.*
*Ғүмер уҙһын, әммә матур уҙһын:*
*Кемделер һөйөндөрһөн,*
*Кемделер көйөндөрһөн,*
*Кемделер дәртләндерһен,*
*Кемделер ғәрләндерһен,*
*Кемделер сәмләндерһен,*
*Кәрәк саҡта, кәрәк ерҙә*
*Кемделер сөрсөлдөрһөн.*
*Ғүмер уҙһын, әммә матур уҙһын*
*Бал, тоҙ тәмен татытһын*
*Әммә йөҙҙәрҙе ҡарайтмаһын,*
*Ауыҙҙы тумһайтмаһын,*
*Күңелде тарайтмаһын,*
*Йөрәкте ҡартайтмаһын.*
*Ҡайғыларҙан бөгөлмәйек,*
*Шатлыҡтан һығылмайыҡ.*
*Нык булайыҡ, бирешмәйек,*
*Беҙ бит әле һуғыш йылы балалары,*
*Күп татыныҡ аҡ-ҡаралы болаларҙы.*
*Ғүмер уҙһын, әммә тыныс уҙһын,*
*Бар тәмде лә татытһын,*
*Йыйырсыҡ бүләк итһә лә*
*Йөрәкте ҡартайтмаһын,*
*Йөрәкте ҡартайтмаһын.*
*Миңә ҡалһа, алты ағзам теүәл булғанда,*
*Күңел ҡошом һайрап торғанда,*
*Ысын дуҫтар янда саҡта,*
*Йөрәгем әле типкән бер саҡта*
*Ут һүндермәм һис тә усаҡта.*

**Әнүәрә ХӘБДЕЛХАҠОВА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Күп кешеләрҙә, шул иҫәптән үҙен мосолман тип һанағандарҙа ла, ислам динендә ҡатын-ҡыҙ бар хоҡуҡтарҙан мәхрүм ителгән, иренә ҡаршы һүҙ әйтергә ирке булмаған йән эйәһе итеп ҡабул ителә. Ләкин был дөрөҫ түгел. Ислам динендә Аллаһы Тәғәлә хаҡынан һуң икенсе урында әсәй кешенең хаҡы тороуы ла был ялғанды юҡҡа сығара. Ә хәләл ефеткә ҡарата мөнәсәбәткә килгәндә, Бәйғәмбәребеҙ "Үҙ ҡатындарына файҙалы булған һәм уларға яҡшы мөғәмәлә иткәндәрегеҙ һеҙҙең арала иң яҡшылары", тип әйтә. Ир-егеттәрҙең ҡатындары алдындағы бурыстары күп дини китаптарҙа яҙылған. Түбәндә Ибраһим Хаҡҡиҙың "Мәғрифәтнамә" китабынан өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ. Уларҙа ир-егеттең ҡатынына (хәләл ефетенә) ҡарата мөнәсәбәте шәриғәт ҡуҙлегенән ниндәй булырға тейешлеге тураһында бәйән ителә.**

# ҠАТЫНЫ МЕНӘН АРАЛАШҠАНДА...



## ир-егет үтәргә тейешле 30 ҡағиҙә

1. Ир-егет ҡатын-ҡыҙ менән мөнәсәбәттәрҙә үҙенең тәбиғәтенең иң яҡшы яҡтарын күрһәтергә тейеш. Аллаһы Тәғәлә күндәм холоҡло кешеләрҙе ярата. Насар холоҡ Аллаһы Тәғәләнең асыуын килтерә. Кемделер үпкәләтеү, кәмһетеү ҡәтғи тыйыу аҫтында. Башҡаларҙы ҡыйырһытыуҙан ҡәнәғәтләк алған насар холоҡло ирҙәргә хатта ғаилә ҡороу тыйыла.

2. Хәләл ефетең менән аралашҡанда йомшаҡ, илтифатлы булырға кәрәк. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үәссәләм): "Үҙ ҡатындарына файҙалы булған һәм уларға яҡшы мөғәмәлә иткәндәрегеҙ һеҙҙең арала иң яҡшылары", - тип әйтә.

3.Өйгә ҡайтҡас, ҡатыныңды "Әссәләмөғәләйкүм!" һүҙҙәре менән сәләмләү һәм уның эштәре, хәле хаҡында ҡыҙыҡһыныу мөһим.

4. Ҡатыныңдың кәйефе яҡшы икәнен күргәс, уны ҡосаҡлап, үбеп алырға кәрәк (ят күҙҙәр күрмәгәндә).

5. Ир-егет ҡатынының проблемаларын хәл итеүҙә әүҙем ҡатнашырға бурыслы. Борсоулы ултырғанын, кәйефе юҡлығын күргәндә күңеле ҡырылыуының сәбәбен мотлаҡ һорашырға кәрәк. Уны (ҡатынығыҙҙы) нығ итеп яратыуығыҙ хаҡында әйтегеҙ, уның кәйефен төшөргән нәмә үҙегеҙҙе лә борсоуон белдерегеҙ. Ҡатынығыҙ ишетергә теләгән матур һүҙҙәр менән уны тынысландырыу мөһим.

6. Ҡатынығыҙҙы тынысландырыу өсөн әлеге мәлдә үтәргә хәлегеҙҙән килмәгәндә лә вәғәҙә итегеҙ. Тағы ла кем һеҙҙән дә яҡшы уны тынысландыра ала? Ул бит бар өмөтөн һеҙгә төбәгән. Аллаһы Тәғәләнең идараһы буйынса һеҙ ғаиләне тәьмин итеүсе, балаларҙы тәрбиәләүсе уның берҙән-бер яратҡан кешеһе.

7. Бала тәрбиәләүҙә ҡатынығыҙға әүҙем ярҙам итегеҙ. Бәләкәй бала үҙенең көйһөҙләнеүҙәре менән әсәһенә көндөҙ ҙә, төндә лә йоҡо бирмәй. Ә ҙурыраҡ балалар тағы ла шуғыраҡ, тыңлашмаусан, үҙҙәренең ҡылыҡтары менән әсәләрен даими борсоуға һалыусан. Шуға күрә лә ҡатынығыҙға ярҙам итегеҙ һәм Аллаһ үҙегеҙгә лә ярҙам итәсәк.

8. Ҡатынығыҙҙы ҡулығыҙҙан килгәнсә иң яҡшы кейем менән тәьмин итегеҙ. Өй эсендә уға үҙе теләгәнсә биҙәнергә һәм кейенергә ирек бирегеҙ. Әммә урамға сыҡҡас та ул үҙенең матурлығын ят ир күҙҙәренән йәшерергә бурыслы.

9. Әгәр бай булһағыҙ, ҡатынығыҙ яратҡан хәләл ризыҡтарҙың иң яҡшыһын килтерегеҙ. Һеҙ ҡатынығыҙҙы иң яҡшы ризыҡ һәм кейем менән тәьмин итеүҙә үҙ бурысығыҙ итергә тейешһегеҙ. Мосолман ҡатын-ҡыҙы быға лайыҡлы. Имам Ғәзали үҙенең "Бәхет эликсиры" китабында: "Мосолманға хәләл ефетенә ҡарата һаран булыу килешмәй, - тип яҙа. - Үтә исрафлы булырға ла ярамай, әммә ғаиләне ҡарауға сарыф ителгән аҡса Аллаһ әжерен саҙаҡаға ҡарағанда күберәк килтерә". Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә: "Изге һуғышҡа, ҡолдо азат итеүгә, ғаиләне ҡарауға сарыф ителгән сығымдар араһында ғаилә өсөн сарыф итеүселәр иң ҙур сауапты ала", - ти. Тағы ла бәғзе бер ғалимдар:"Ғаиләһен тәьмин итә алырлыҡ мөмкинлеге булмаған кешеләргә өйләнеү - харам", -тип әйтә.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

# КИЛДЕМ. КҮРҘЕМ. ЕҢДЕМ



### Эй, Хоҙайым, дуҫтарымдан һаҡла... үҙем һаҡланырмын дошмандан

*Үҙҙәрен дуҫ тип атаусыларҙан һаҡ булығыҙ - уларҙан иң ҡурҡыныс һатлыҡ йәндәр сыға. Шул уҡ ваҡытта маҡсаттарығыҙҙы тормошҡа ашырыу өсөн дошмандарығыҙҙың дуҫтарын файҙаланығыҙ.*

Рим императоры Луций Элий Аврелий Коммод империяның иң әшәке хакимы була. Замандаштары әйтеүенсә, уның хәрәмендә бер нисә йөҙ ҡатын-ҡыҙ һәм шунса уҡ йәш егет иҫәпләнә. Ул фәхешлектең барлыҡ ысулдарын да татып ҡарай. Уның этлектәре араһында тәмле ризыҡтарға кеше тиҙәге һалыу, ҡатын-ҡыҙ кейемендә йөрөү, тере кешеләрҙән препарат яһап, табип булып уйнау була. Ул хакимлыҡ иткәндә Римдә коррупция сәскә ата, консул вазифаһы йылына 25 тапҡыр һатыла. Әлбиттә, император үҙенә ҡаршы заговор ойоштороуҙарынан ут-тан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡа, хатта яҡындарының береһенә лә ышанмай һәм һенлеһен, ҡатынын, дуҫтарын, яҡындарын берәм-берәм юҡ итә. Ғүмеренең ахырында үҙенә ни бары дүрт кешене - һөйәркәһе Марцияны, преторий перфекты Квинт Эмилий Летты, һарай идарасыһы, шәхсән үҙенә бурыслы Эклектты һәм Колизейҙа гладиаторҙар алышында сығыш яһаған атлет Нарциссты ғына яҡынлата. Һөҙөмтәлә тап шул дүртәү хакимға ҡаршы заговор ҡора ла инде. Марция һөйәрен ағыуланған шарап менән һыйлай, әммә уның тәьҫире булмағас, императорҙы Нарцисс быуып үлтерә.

Уның хатаһын Рәсәйҙең беренсе батшаһы Иван Грозный ҙа ҡабатламаҫҡа тырыша һәм 51 йыл буйы тәхеттән төшмәй. Уның был өлгөһөн хәҙер ҡайһы бер клиник сәйәсмәндәр ҡабатларға маташа.

Иван Грозныйҙың тәжрибәһен Иосиф Сталин да ентекле өйрәнә һәм ҡуллана. Һөҙөмтәлә ул ил менән ике тиҫтә йыл самаһы етәкселек итә.

Власть түбәһенә менергә тырышаһығыҙ икән, үҙҙәрен һеҙҙең дуҫығыҙ тип атаусыларға мөкиббән ышанмағыҙ. Улар башҡаларҙан айырмалы, һеҙгә иң яҡын кешеләр һәм етешһеҙлектәрегеҙ, шәхси серҙәрегеҙ тураһында ла бик күпте беләләр. Тормошта шундай шарттар килеп тыуыуы ихтимал, улар һеҙҙең дошмандарығыҙға ҙур ҡәнәғәтлек менән барлыҡ серҙәрегеҙҙе һатыуы мөмкин. Ҡағиҙә булараҡ, был хәл көтмәгәндә генә эшләнә һәм ауыр эҙемтәләргә килтерә. Элекке дуҫтарығыҙға дошмандарығыҙ нығыраҡ ышана. Хатта шикләнмәгеҙ ҙә, уларҙың мәғлүмәте сит лагерҙа кәрәкле маҡсатта файҙаланыласаҡ. Бенджамин Франклин әйткәнсә, "әгәр дошманығыҙҙан сер һаҡлағығыҙ килһә, уны уның дуҫына һөйләмәгеҙ".

Император Алексей Өсөнсө улы Николайға шундай кәңәш бирә: "Барыһын да тыңла, бында бер ниндәй ҙә оят юҡ, әммә бары тик үҙүҙеңде, үҙеңдең намыҫың ҡушҡанса ғына эшлә". Власҡа походта дуҫтар булмай. Бары тик союздаштар һәм сәйәси арҡаҙаштар ғына була. Улар менән эшмәкәрлектең билдәле бер арауығында юлығыҙ бергә бара. Әммә шундай хәл-торош килеп тыуыу мөмкин: тап яҡындарығыҙ һеҙҙең урыныгыҙҙы биләү өсөн һеҙгә ҡәбер ҡаҙыясаҡ, сөнки улар дошмандарығыҙға ҡарағанда был эште нисек башҡарырға икәнен яҡшыраҡ белә. Макиавелли шулай тип киҫәтә: "Хакимдың аҡылы хаҡында уның үҙ эргәһенә ниндәй кешеләрҙе яҡынлатыуына ҡарап фекер йөрөтәләр".

**Сергей СУВОРОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Ун беренсе көн

**Беренсе бүлек: Аҡыл. Шәхси камиллыҡҡа өлгәшеүҙә үҙ-үҙеңде юҡ итеү ысулы**

Аңды, төнде һәм характерҙы камиллаштырыуға өлгәшеү өсөн үҙеңде ыңғай яҡтан баһалауҙың әһәмиәте ҙур. Һәр көндөң, һәр сәғәттең һәр мәлендә һеҙ үҙегеҙҙе ихтирамығыҙға, үҙегеҙ тыуҙырған имиджығыҙға зыян килтерә торған уйҙарҙан һаҡларға тейешһегеҙ. Әгәр шундай уйҙар (мәҫәлән, "мин зыялы түгелмен, мин харизматик лидер түгел" һ.б.) башығыҙға инә икән, тиҙҙән улар ғәҙәткә әйләнеп, тормош кимәлегеҙҙе бик нығ түбәнәйтәсәк.

Кире тойғоларҙан арыныуҙың бик файҙалы ысулы булып "шартлау ярҙамында үҙ-үҙеңде юҡ итеү" тора. Бының өсөн барлыҡ кире сифаттарығыҙҙың исемлеген төҙөгөҙ. Һуңынан тыныс урынға ултырығыҙ һәм үҙегеҙҙе тәрән релаксация хәленә индерегеҙ.

Барлыҡ булмышығыҙҙы көсөргәнештән арындырғас, үҙегеҙҙең кире образығыҙҙы һәм кире сифатығыҙҙы (мәҫәлән, әгәр ул күп ашау һәм һимереү икән, үҙегеҙҙе ҡомһоҙланып ашаусы һәм артыҡ ауырлыҡтан яфа сигеүсе итеп) күҙ алдына килтерегеҙ. Был образды аңығыҙҙа мөмкин тиклем асыҡ, сағыу итергә - уны ысынбарлыҡта күрергә тырышығыҙ. Ә хәҙер иң мөһиме: күҙаллаған образдың ике яғына ике динамит шашкаһы бәйләгеҙ, һуңынан уға беркетелгән бикфорд ебен яндырығыҙ һәм ҡеүәтле шартлау һөҙөмтәһендә кире образығыҙ йөҙҙәрсә миллион ваҡ киҫәктәргә таралып осҡанын күҙәтегеҙ.

Ә хәҙер иҫке образды яңыһына - үҙегеҙ өлгәшергә теләгән яҡты, матур, таҙа образ менән алмаштырығыҙ. Был процедураны беренсе тапҡыр эшләгәндә 20 тапҡырҙан күберәк ҡабатларға кәрәк. Һуңынан артабанғы 20 көн эсендә көнөнә бишәр тапҡыр ҡабатларға. Ошо махсус күнекмә һөҙөмтәһендә үҙ-үҙегеҙгә хөрмәтегеҙ бермә-бер артыр.

**Икенсе бүлек: Тән. Күнекмәләр системаһын тотоғоҙ**

Тәүге 10 көн дауамында һеҙ көн һайын 20 минут шөғөлләнергә тейеш инегеҙ. Әгәр һаман да үҙегеҙҙе физик йәһәттән идеаль кимәлдә түгел тип иҫәпләйһегеҙ икән, урманда саф һауала йөрөү йәки бассейнда йөҙөү ярҙам итер. Әгәр яҡшы формала икәнһегеҙ, 20 минуттан оҙағыраҡ шөғөлләнә һәм үҙегеҙҙе яңы физик форма кимәленә сығара алаһығыҙ.

Аҙнаһына 4-5 тапҡыр энергиялы күнекмәләр иң нығлы тормош ғәҙәтегеҙ булып торорға тейеш. Әгәр ундай күнекмәләрҙе еңел, тәнегеҙгә көсөргәнеш тыуҙырмай үткәрәһегеҙ икән, бик яҡшы. Ындай физик күнекмә ҡартайыуҙы тотҡарлаясаҡ, аҙыҡты эшкәртеүгә һәм дөйөм тонусты юғары тотоуға ярҙам итәсәк. Шул уҡ ваҡытта энергетик резервтарығыҙҙың ҡеүәте лә артыр. Көн ҡалдырған өсөн бер ниндәй ҙә аҡланыуҙар ҡабул ителмәй. "Найк" фирмаһының девизын ҡулланығыҙ: "Уйламағыҙ, бары тик эшләгеҙ!"

**Өсөнсө бүлек: Характер. Донъя хәстәрен ситкә ҡыуып**

Аңдың тыныс, көсөргәнештән арыныуына өлгәшеү бик мөһим. Тыныс аң һеҙҙең өсөн мәғжизә тыуҙырырға һәм йәшәү көсөнә эйә тән булдырырға һәләтле. Әгәр ысынлап та бәхетле тормош менән йәшәргә теләһәгеҙ, кире фекерҙәр булмаған, хәстәрҙәрҙән азат аң һеҙҙең иң төп өҫтөнлөгөгөҙ булырға тейеш. Башҡа бик күп сифаттар кеүек үк, аңдың ыңғай, енеүгә көйләнеүе даими күнекмәләр һөҙөмтәһендә үҫешеүе мөмкин.

**Күнегеү**

Үҙегеҙҙе борсоған нәмәләрҙең исемлеген яҙығыҙ. Уға барлыҡ бурыстарығыҙҙы, эш, сәләмәтлек буйынса мәсьәләләрҙе индерегеҙ. Исемлек төҙөүегеҙ үҙе үк тормошоғоҙҙо еңеләйтеүсе көслө аҙым булып тора. Хәҙер һеҙ ошо исемлекте бәләкәй проблеманан ҙурына табан анализлай, шулай уҡ уны ваҡ ҡына киҫәктәргә йыртып, сүп кәрзиненә ырғыта һәм уларҙы мәңгелеккә юҡ була тип күҙаллай алаһығыҙ. Хәрби сәнғәт өлкәһендә легенда булып торған Брюс Ли кире уй-фекерҙәренән арыныу өсөн гел ошо ысулды ҡулланған.

**Робин ШАРМА.**



## 23 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "Ясмин". Сериал (16+).
17.00 "В наше время" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Вангелия". Биографическая драма. 5-я и 6-я серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Перевозчик". Сериал (12+).
01.05, 03.05 "Конан-варвар". Фэнтези (16+).
03.00 Новости.
03.40 "Форс-мажоры" (16+).
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

**Уважаемые читатели! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны института благородных девиц", 178-я серия. Сериал.
16.00, 17.30 "Склифосовский-2". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты-5". Комедийный сериал. 1-4 серии (12+).
01.20 "Девчата" (16+).
02.00 "Непрощенный". Вестерн.

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтары йырҙары (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.50 "Замандаштар". Зифа Нагаева (6+)
10.15 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.00 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдар яңғырауы (0+)
11.30 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.15 "Наза". Башҡорт халыҡ бейеүҙәре (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
16.00 "Ағыла моң". Редик Ефремов (6+)
21.00 "Кис ултырып". Юлиә Чигвенцова һәм Рафаэль Сәғитов (6+)

### БСТ

**Уважаемые читатели! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
**14.00 "Новости недели" (16+).**
**14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на баш. яз.) (16+).**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Бауырһаҡ".**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Зарница Поволжья" (6+).**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Орнамент".**
**17.45, 02.00 "Замандаштар" (6+).**
**18.00 "Автограф. К.Акбашев".18.45, 06.45 "Весело живем" (12+).**
**19.00, 20.35 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.10 "Капитаномика" (6+).**
**20.20, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Следопыт" (6+).**
**23.00 "Юлдаш йыры-2013" (6+).**
**23.00, 02.15 Художественный фильм (16+).**
**01.00 "Единое время" (16+).**
**03.30 Ф.Бурнаш. "Молодые сердца". Спектакль (12+).**
**05.30 "Открытый всем ветрам".**

## 24 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "Ясмин". Сериал (16+).
17.00 "В наше время".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Вангелия". Сериал (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Перевозчик". Сериал (16+).
01.05, 03.05 "На грани". Боевик (16+).
03.00 Новости.
03.20 "Форс-мажоры" (16+).
04.10 "Монстры против пришельцев. Тыквы-мутанты из открытого космоса" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50, 04.45 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц", 179-я серия. Сериал.
16.00, 17.30 "Склифосовский-2". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10, 19.40 "Вести-Башкортостан".
18.30 "Прямой эфир" (12+).
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты-5". Сериал (12+).
00.15 "Специальный корреспондент" (16+).
01.20 "Старатели морских глубин. Найти затонувшие миллиарды". Документальный фильм.
02.20 "Вызываем огонь на себя". Приключенческий сериал.
04.20 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Дарман" (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.20 "Ҡәмит". Юмор (6+)
08.30 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Замандаштар". Илсур Хәбиров (6+)
09.45 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (0+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.30 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүе (0+)
12.45 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Тәнзилә Үҙәнбаева. Концерт (6+)
21.00 Роберт Юлдашев һәм "Курайсы" төркөмө. Концерт (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**08.00 "Сәләм, республика!"**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**11.45 "Зеркальце".**
**11.00, 17.45, 02.00 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.25 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 02.15 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45, 06.00 "Хазина".**
**13.15, 18.45, 01.45, 06.45 "Весело живем" (12+).**
**13.45, 05.15 "Музыкальный калейдоскоп".**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Книга сказок".**
**15.45 "Борсаҡ".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Отдел культуры" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.00 "Телецентр" (на башк.яз.).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.10 "Капитаномика" (6+).**
**20.20, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.35 "Телецентр" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 Художественный фильм (16+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 П.Мериме. "Поклянись, Кармен!" Спектакль (12+).**

## 25 СЕНТЯБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 Другие новости.
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "Ясмин". Сериал (16+).
17.00 "В наше время" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Вангелия". Сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Перевозчик". Сериал (16+).
01.10, 03.05 "Омен". Триллер (18+).
03.00 Новости.
03.20 "Форс-мажоры". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "1000 мелочей".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50, 04.40 "Вести. Дежурная часть" .
15.00 "Тайны института благородных девиц", 180-я серия. Сериал.
16.00, 17.30 "Склифосовский-2". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты-5". Сериал (12+).
00.10 "Вода". Док. фильм (12+).
02.00 "Горячая десятка" (12+).
03.05 "Вызываем огонь на себя".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтары йырҙары (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.00 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
09.45 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
10.05 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.00 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдар яңғырауы (0+)
11.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
12.20 "Байыҡ" (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар". Рәдик Фасхетдинов (6+)
18.00 Нәзифә Ҡадирова йырлай (6+)
21.00 "Байыҡ". 2013й. (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 02.00 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 "Новости" (на русск. яз.).**
**11.45, 02.15 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45, 06.00 "Хазина. Саратовская область".**
**13.15, 18.45, 06.45 "Весело живем" (12+).**
**13.45, 05.20 "Свет во тьме" (6+).**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров".**
**15.45 "Семәр".**
**16.00 "Городок АЮ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Власть отвечает" (16+).**
**17.00 "История признания" (12+).**
**17.45 "Алтын тирмә".**
**19.00, 20.35 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.10 "Капитаномика" (6+).**
**20.20, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Историческая среда".**
**23.00 "Местная история".**
**23.15 Художественный фильм (16+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 А.Бурак. "Ты любовь моя".**

## 26 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж". (16+).
16.10 "Ясмин". Сериал (16+).
17.00 "В наше время".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Вангелия". Сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант". (16+).
24.00 "Ночные новости".
00.10 "Перевозчик". Сериал (16+).
01.05 "Под куполом". Сериал (16+).
01.55, 03.05 "Морской пехотинец". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.45 "Форс-мажоры".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "От всей души".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00, 17.30 "Склифосовский-2". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты-5". Сериал (12+) .
23.05 "Поединок". Сериал (12+).
00.40 "Взорвать СССР. Ядерный апокалипсис" (12+).
01.45 "Честный детектив" (16+).
02.20 "Вызываем огонь на себя". Сериал.
04.00 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Йырлап асыла күңел " (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.00 "Замандаштар". Фәнисә Бәҙретдинова (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.40 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.10 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
11.30 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.30 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.45 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Юлдаш йыры-2010" (6+)
18.00 "Аҡмулла". Спектакль (6+)
21.00 "Кис ултырып". 90-сылар дискотекаһы (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Царь горы".**
**11.00, 17.45, 02.00 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русс. яз.).**
**11.45, 02.15 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45, 06.00 "Хазина".**
**13.15, 18.45, 06.45 "Весело живем" (12+).**
**13.45 "Байыҡ" представляет..."**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Ғәләмәт донъя".**
**15.45 "Шәп арба".**
**16.00"Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Сокращаем расстояния" (6+).**
**18.00 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**18.15 "Сәләм" (12+).**
**19.00 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.10 "Капитаномика" (6+).**
**20.20, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.35 "Лето с "Фармленд" (12+).**
**21.00 "Лото 6 из 40 и Джокер".**
**21.15 "Деловой Башкортостан".**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**23.00 ФК "Уфа".**
**23.30 "Времен связующая нить" (6+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 Р.Роуз "Двенадцать рассерженных" (12+).**
**04.45 "Шәжәрә".**
**05.15 "Автограф".**

## 27 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж". Сериал (16+).
16.10 "За и против". Ток-шоу (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости.
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес".
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Музыкальное шоу (12+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.30 "Уолл-стрит". Криминальная драма (16+).
02.50 "Рамона и Бизус". Приключения.
04.50 "Форс-мажоры" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.05 "Ауаз".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.15 Дневник Сочи-2014.
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00, 17.30 "Склифосовский-2". Сериал.
17.00 "Вести".
17.10 "Вести ПФО".
18.30 "Хит".
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты". Сериал (12+).
23.55 "Влюблен и безоружен". Мелодрама (12+).
01.55 "Вызываем огонь на себя". Сериал.
03.20 "Девушка-сплетница-5". (16+).
04.10 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45"Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтары йырҙары (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
09.35 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
11.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
11.50 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.20 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Илсур Тайсин. Концерт (6+)
16.00 "Замандаштар". Имам Хатиб Мөхәммәт Ғәлләмов (6+)
16.15 "Йома" (0+)
20.00 "Кис ултырып". Вилдан Яруллин (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ғәләмәт донъя".**
**11.00, 17.45, 02.00 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русс. яз.).**
**11.45, 02.15 "Эзель". Сериал.**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на баш. яз.).**
**12.45, 06.00 "Хазина".**
**13.15, 06.45 "Весело живем" (12+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.45 "Сулпылар".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "ФК "Уфа": даешь премьер-лигу!"**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ.**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (16+).**
**23.00"Отдел культуры" (12+).**
**23.30 "Дарман".**
**01.00 "В минуты отдыха". Концерт (12+).**
**03.30 Аяз Гилязев "Три аршина земли" (12+).**
**05.15 "Автограф".**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 28 СЕНТЯБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Трын-трава". Комедия (16+).
08.15 "Играй, гармонь любимая!"
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Лидия Федосеева-Шукшина. Мое женское счастье". Док фильм (12+).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Печки-лавочки". Комедия (12+).
15.05 "Свадебный переполох" (12+).
16.00 "Куб" (12+).
17.00 "Голос. За кадром" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию".
18.45 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.50 "Минута славы. Дорога на Олимп!"
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Успеть до полуночи". Юмористическая викторина (16+).
23.35 "Уолл-стрит: деньги не спят". Криминальная драма (16+).
02.05 "Наверное, боги сошли с ума-2". Комедия (12+).
04.00 "Крылья жизни: скрытая история".
05.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.50 "Молодые". Мелодрама.
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан" (16+).
08.20 "Планета собак".
09.20 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Вести. Дежурная часть".
11.55 "Честный детектив" (16+).
12.25 "Военная программа".
12.55 "Танковый биатлон". Военно-спортивное шоу.
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
16.50 "Субботний вечер".
16.15 "Танцы со звездами".
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Осенняя мелодия любви". Мелодрама (12+).
00.40 "Красавица и чудовище". Мелодрама (12+).
02.55 "Смертельная битва". Фантастический боевик (16+).
04.50 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
08.20 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.40 "Автограф". Эльмира Саматова (6+)
08.55 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.25 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (0+)
11.20 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
11.40 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.20 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтары йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Айгөл Һағынбаева. Концерт (6+)
17.00 "Тылсымлы ҡурай". "Төнъяҡ амурҙары" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Гөлдәр Ишҡыуатова (6+)

### БСТ

07.00, 18.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).
07.15 "Доброе утро!"
08.00 Л.Измайлов, М.Танич "Детектив на перекрестке".
09.00 "Көндәлек" (6+).
09.30 Мультфильм (на башк. яз.).
10.00 "Сәләм+" (12+).
10.15 "Здоровое решение".
10.45 "Профили" (12+).
11.30 "Алль-Фатиха".
12.00 "Следопыт".
12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).
12.45 "Бәхетнамә".
13.15 "Автограф".
13.45 "Весело живем".
14.00 "Дарю песню".
16.00 Ф.Бурнаш "Молодые сердца" (12+).
18.00 "Замандаштар" (6+).
19.00 "Башҡорттар".
19.30, 06.00 "Хазина".
20.00 "Сәңгелдәк".
20.15 "Еду я деревню".
20.45 "Живое село" (12+).
21.15 "Деловой Башкортостан".
22.00 "Наши годы" (12+).
22.30 "Театральная ночь" (12+).
23.00 "Мы счастливы" (12+).
01.00 Художественный фильм (16+).
03.30 А.Яхина "Не ломайте крылья". Спектакль (12+).
05.15 "Автограф".
06.30 "Весело живем" (12+).

## 29 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Женский журнал".
06.25 "Многодетные невесты".
07.20 "Служу Отчизне!".
08.00 "Чудом спасенные".
09.05 "Здоровье" (16+).
10.00 "Всем миром". Канал помощи пострадавшим от наводнения.
18.00 "Ледниковый период".
21.00 "Воскресное "Время" с Ирадой Зейналовой.
22.00 "Клуб Веселых и Находчивых". Летний кубок в Сочи.
00.15 "12". Драма (16+).
03.20 "Замороженная планета" (12+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.40 "Облако-рай". Трагикомедия.
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20, 14.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.15 "Городок. Дайджест".
11.50 "Мой папа - мастер".
12.20 "Веселый юбилей Аркадия Инина". Капустник (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 Праздничный концерт.
16.20 "Смеяться разрешается".
18.20 "Наш выход!". Муз. шоу.
20.00 "Вести недели".
21.30 "Подари мне немного тепла". Мелодрама (12+).
23.30 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
01.20 "Девятки". Триллер (16+).
03.25 "Планета собак".
04.25 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Замандаштар". Урал Иҙелбаев (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.50 "Йырлап асыла күңел" (0+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.20 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Әлфиә Әхмәтйәнова йырлай (6+)
18.00 "Сүллектең аҡ ҡояшы". Фильм (+6)
22.00 "Наза". Концерт-дискотека (+6)

### БСТ

**07.00 Новости (на баш. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Йома".**
**09.00 "Еду я в деревню".**
**09.30 "Живое село" (12+).**
**10.00 "Бауырһаҡ".**
**10.15 "Городок АЮЯ".**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Шәп арба".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели.**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар".**
**14.00 "Дарю песню".**
**15.00 "Үткән ғүмер. 1970-е годы" (6+).**
**15.30 "Историческая среда".**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа".**
**16.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ.**
**19.30 "История признания" (12+).**
**19.45 "Любимое дело".**
**20.00 "Деловой Башкортостан".**
**20.30 "Итоги спорта".**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40" (16+).**
**21.15 "Бизнес-обзор".**
**21.30 Новости недели (на русск. яз.).**
**22.00 "Байыҡ-2013".**
**23.00 "Вечер.com" (12+).**
**23.45 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00, 06.30 "Единое время" (16+).**
**02.15 Художественный фильм (16+).**
**03.30 А.Чехов "Чайка" (12+).**
**05.45 "Мелодии души" (12+).**


*КОТЛАЙБЫҘ!*

Хәйбулла районының Йәнтеш ауылында йәшәүсе туғаныбыҙ, ҡайнағабыҙ һәм ҡоҙабыҙ, арҙаҡлы ир-уҙаманы, оло ғаилә башлығы

**ИСҠУЖИН Салауат Ғәлимйән улын**

50 йәшлек елле юбилейы менән ҡотлайбыҙ!

Беҙ һәр ваҡыт һинең шулай кешелекле, ярҙамсыл, ихлас, ябай һәм миһырбанлы булыуыңа һоҡланып йәшәйбеҙ, ныҡлы һаулыҡ, ҡоростай ихтыяр, артабан да Салауат батырыбыҙ исеменә тап төшөрмәй ғүмер итеүеңде теләйбеҙ!

**Өфөнән - Иштановтар, Исҡужиндар, Үтәбаевтар, Ғәйетбаевтар.**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# САЛАУАТ РАЙОНЫ



**Горизонталь буйынса:** 1. Түбә таҡтаһы аҫтынан өйҙө уратып элгән тар ғына шаршау. 3. Эстрада йырсылары араһындағы Фәриҙә. 6. Башҡортостандың халыҡ шағиры. 11. Ҡафиә нимә ул? 12. Мосолман байрамы. 13. Америка дөйәғошо. 14. Музыкаль драма әҫәре. 15. Күңелгә хәүеф һала торған нәмә. 18. Билдәле тележурналист. 21. Диңгеҙ музейын асҡан шәхес. 26. Ейәндең яратҡан әбейе. 28. Булдыҡһыҙ, йүнһеҙ бәндә. 29. Һауа тултырылған камералы резина тәгәрмәс. 34. Берәй хайуан таралып йәшәгән урын. 35. Мөгөҙлө кит. 36. Компас күрһәткән йүнәлеш. 37. "Бейәнән (...) ла тыуа, ҡола ла тыуа". 39. Боронғо Мысырҙа теге донъя аллаһы. 42. БДУ профессоры, философ. 45. Башҡорт эстрадаһының Рәдифе. 47. "Таштуғай" телефильмында төшкән йырсы. 50. Артистар араһындағы Хәбир. 55. Берәй нәмәнең бик бәләкәй генә өлөшө. 56. Оҙон итеп үрелгән сәс. 57. Ваҡ ҡыу ағас. 58. Ҡыҙҙың ире. 59. Эшлекһеҙ, булдыҡһыҙ кеше. 60. Ҡитға нимә ул?

**Вертикаль буйынса:** 2. Нәҙек йомшаҡ аҡ йөнлө һарыҡ тоҡомо. 4. Йыртҡыс балыҡ. 5. Мәскәү аэропорты. 7. Америка сүллеге. 8. Башҡортостан Юғары судын етәкләгән юрист. 9. Грецияның баш ҡалаһы. 10. Өҫтәлдә урынлашҡан ҡунаҡхана. 16. Ҡара ҡыҙыл емешле ағас-ҡыуаҡ. 17. Йәшник. 19. Ылыҫлы ҡыуаҡ. 20. Башҡорт теноръары араһындағы Мәжит. 22. Эре тарбаҡ мөгөҙлө ҡыр хайуаны. 23. "Тәкәнең тауға менмәһә (...)ы ҡысый, ти". 24. Ҡурай, думбыралар яһаптан алған Вәкил. 25. Журналист. 27. Аңға һеңерлек, күңелгә ятырлыҡ тәьҫир. 28. Француздарҙан "килгән" насар холоҡ. 30. Иң камил үрнәк. 32. Механизмдағы әйләнмәле күсәр. 33. "Ҡылыс тәнде яралай, (...) йәнде яралай". 37. Груша. 38. Кәзә ҡымыҙы. 40. Эттең бүренән булған көсөгө. 41. Ҡыҙ һәм егеттең йәрәшеүен беркеткән доға. 43. Яйыҡ. 44. Ат, ләкин йылҡы түгел. 45. Ислам диненсә, тамуҡ эргәһендәге һаҡсы. 46. Уңайһыҙлыҡ килтереп торған нәмә. 48. Ниагара ҡойған күл. 49. Римда урынлашҡан дәүләт. 51. Ҙур кәүҙәле, көслө, таҙа кеше. 52. Хәрефле дарыу. 53.Италияның данлыҡлы скрипкалар яһау оҫтаһы. 54. Королева күлдәгенең артынан һөйрәлгән оҙон осо.

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**37-се һандағы кроссворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** 1. Риүәйәт. 3. Ямалетдин. 6. Равиоли. 11. Елкән. 125. Шилма. 13. Маляр. 14. Канау. 15. Вотчина. 18. Аллаярова. 21. Насиров. 26. Ырыҡта. 28. Домино. 29. Туп. 31. Рәнйеш. 33. Һелтәм. 34. Алаша. 35. Балтыр. 36. Ҡыялҡы. 37. Һый. 39. Нәүбәт. 42. Атаман. 45. Ялтырма. 47. Солтанова. 50. Ғәлиева. 55. Ралли. 56. Вәкил. 57. Найҙа. 58. Лотос. 59. Награда. 60. Ситдиҡова. 61. Ондатра.

**Вертикаль буйынса:** 1. Рәсүлев. 2. Әүермән. 4. Минерал. 5. Иншаков. 7. Алабута. 8. Ильясов. 9. Акула. 10. Бланк. 16. Тары. 17. Игәт. 19. Армыт. 20. Рәжәп. 22. Сумо. 23. Ралли. 24. Йыһаншин. 25. Мортазин. 27. Акробат. 28. Думбыра. 30.Учалы. 32. Шар. 33. Һаҡ. 37. Һыҙат. 38. Йылан. 40. Үләт. 41. Әжер. 43. Трал. 44. Мәке. 45. Яруллин. 46. Маринад. 48. Оригами. 49. Вавилов. 51. Әфлисун. 52. Алабуға. 53. Шлейф. 54. Скотч.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1434 һижри йыл.*

| Сентябрь (Зөлҡағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (17) дүшәмбе | 6:35 | 8:05 | 14:30 | 18:40 | 20:10 | 21:40 |
| 24 (18) шишәмбе | 6:37 | 8:07 | 14:30 | 18:38 | 20:08 | 21:38 |
| 25 (19) шаршамбы | 6:39 | 8:09 | 14:30 | 18:35 | 20:05 | 21:35 |
| 26 (20) кесе йома | 6:40 | 8:10 | 14:30 | 18:33 | 20:03 | 21:33 |
| 27 (21) йома | 6:42 | 8:12 | 14:30 | 18:30 | 20:00 | 21:30 |
| 28 (22) шәмбе | 6:44 | 8:14 | 14:30 | 18:28 | 19:58 | 21:28 |
| 29 (23) йәкшәмбе | 6:46 | 8:16 | 14:30 | 18:25 | 19:55 | 21:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ХОККЕЙ*

# ЕҢЕЛӘ-ЕҢЕЛӘ...

## сынығырҙар әле

**Бер уңышлы кеше үҙ тормошо тураһында: "Маҡсатыма табан барған саҡта мин мең уңышһыҙлыҡҡа осраным, ләкин күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй, ауырлыҡтарға рәхмәт әйттем, сөнки уңышһыҙлыҡтар менән тулы мең төрлө юлдан һуң мең дә беренсеһенең уңышлы буласағына ышандым", - тигән. Яратҡан командабыҙ "Салауат Юлаев"тың быйылғы Континенталь хоккей лигаһының Гагарин кубогы чемпионатын бер-бер артлы еңелеү менән башлауына шаһит булғас, күп кенә көйәрмәндәр ирекһеҙҙән: "Төшөнкөлөккә бирелеп ҡуймаһалар ярар ине", - тип уйлап ҡуйғандыр. Әлеге аҡыллы кеше миҫалынан сығып фекер йөрөткәндә, әллә ни хәүефләнергә лә урын юҡ һымаҡ. Етмәһә, тәүге миҙгел башланып ҡына тора. Әлбиттә, беҙҙең теләктән генә торһа, батырыбыҙ исемен йөрөткән команданы донъя чемпионы уҡ итер инек тә бит.**

Иң тәүҙә команданың иңен-буйын күҙҙән үткәрәйек. Кемдәр бар һуң унда? Һуңғы йылдарҙа СКА-ның өлкән тренеры булған Владимир Юрзинов үҙ карьераһында тәүге тапҡыр юлаевсыларҙың баш тренеры вазифаһын үтәйәсәк. Элекке ҡапҡасы Вадим Тарасов хәҙер юлаевсыларҙың ҡапҡасыларын күнектерә. Ҡапҡасылар - фин Ииро Таркки (№35), Өфө хоккейы тәрбиәләнеүсеһе Андрей Василевский (№88) һәм "Атлант"тан күскән Алексей Волков (№37) та бар. Артабан киттек. Хоккей белгестәре һөжүмселәр Сергей Зиновьевҡа (№42), Антти Пильстремға (№41), Дмитрий Макаровҡа (№23), Денис Хлыстовҡа (№29), Штефан Ружичкаға (№14), Никита Филатовҡа (№28), һаҡсылар Виталий Прошкинға (№34), Кирилл Кольцовҡа (№4), яңы һаҡсы Иван Вишневскийға (№9), Канада легионеры Брент Сопелға (№32), шулай уҡ "Салауат Юлаев" клубының йәш тәрбиәләнеүселәре Илдар Иҫәнғолов (№26) менән Ефим Гуркинға (№79) ҙур өмөттәр бағлай. Әйткәндәй, Илдар Иҫәнғолов Өфөлә тыуған, 21 йәштә.

Ҡайһы бер көйәрмәндәр командан Мирослав Блатяктың, Иван Кутейкиндың, Александр Свитовтың, Олег Сапрыкиндың, ҡапҡасы Вадим Тарасовтың китеүен һәләкәт тип һанай. Оптимистик рухлы хоккей фанаттары иһә, киткән егеттәргә алмашҡа килгән уйынсыларҙың киләсәген дә яҡшыға юрарға тырыша. Яңы һепертке яңыса һеперә, тиҙәр. Баш тренер һүҙҙәре менән әйткәндә, "йәшәргән" һәм инде бер ни тиклем "уҫалыраҡ"ҡа әүерелгән "Салауат Юлаев" командаһы чемпионаттың аҙағына тиклем ниндәй халәткә керер, уныһы тураһында фаразларға ашыҡмайыҡ. Бәлки, иртәгәнән алып еңә лә башлар юлаевсылар?..

Еңеү тигәндән, тәүге уйынды уңышлы башлағайны бит юлаевсылар. Был миҙгелдә Көнсығыш конференцияға быйыл ғына күсерелгән Түбәнге Новгород ҡалаһының "Торпедо" уйынсыларын буллит һуғыу ярҙамында еңгәйнеләр. Ләкин икенсе уйында беҙҙең команда Ҡаҙандың "Аҡ Барс"ынан - буллиттар буйынса, өсөнсө осрашыуҙа Мәскәүҙең "Динамо"һынан 4:1 иҫәбенә отолдо. Өфөлә Хабаровскиҙың "Амур"ы менән көс һынашыуҙа ла өҫтәмә ваҡытта 3:4 иҫәбенә еңелделәр. Һуңғы осрашыуҙа Владивостоктың "Адмирал"ын 4:1 иҫәбе менән ҡыйратты беҙҙекеләр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сираттағы бер уйындан һуң матбуғат конференцияһында юлаевсыларҙың баш тренеры Владимир Юрзинов, үтә ныҡ кәйефһеҙләнеп: "Беҙ бындай хаталар эшләргә тейеш түгел инек. Минең һүҙем юҡ хатта", - тигәйне. Ысынлап та, бер-берендә арҡаң менән тоя, маңлай күҙе менән генә түгел, күңел күҙе менән күрә башлау өсөн йәш ғаиләләргә лә тиҫтәләгән йыл бергә йәшәргә кәрәк бит. Юлаевсылар ҙа оҙағыраҡ ваҡыт бергә уйнап, тағы ла оҫтарыр, тип өмөт итергә ҡала. Баштараҡ әйткәнебеҙсә, иң мөһиме, танауҙарын да, кәйефтәрен дә төшөрмәһендәр, тип теләйек.**

**Илгизәр БУЛАТОВ.**

*✓ Беҙҙең бәхетһеҙлектәрҙең сере шунда: бәхетлебеҙме, юҡмы, тип уйланырға ваҡытыбыҙ күп.*

*(Б. Шоу).*



АФАРИН!

# ШУНДАЙ ТЫРЫШ ИНДЕ УЛ...



**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында Рида Тимершәйехова иң маҡтаулы, иң танылған студенттар исемлегендә. Төрлө бәйгеләрҙә, конкурстарҙа яулаған маҡтау ҡағыҙҙары, миҙалдар, кубоктар, бүләктәр - былар барыһы ла быға дәлил булып тора. Бигерәк тә мине уның һуңғы кубогы ҡыҙыҡһындырҙы һәм уны нисек, ҡайҙа яулауы тураһында һөйләшеп киттек.**

- Был кубокка мин Төркиәнең Самсун ҡалаһында уҙғарылған 32-се Халыҡ-ара халыҡ бейеүҙәре фестивалендә лайыҡ булдым. Быйыл йәйҙең иң ҡыҙыу мәлендә "ТӨРКСОЙ" ойошмаһы һәм Самсун ҡалаһының урындағы үҙидараһынан саҡырыу алдым. Уға тиклем апрель айында Мәскәү ҡалаһында уҙған төрөк теле буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһында ҡатнашып, бронза миҙалға лайыҡ булғайным. Был еңеүем миңә ошо фестивалгә юл асты, быға беҙҙең башҡорт филологияһы факультетындағы "ТӨРКСОЙ" кафедраһы ла булышлыҡ итте.

Әлеге сарала Әзербайжан, Босния-Герцеговина, Болгария, Грузия, Балҡар, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Кипр, Төньяҡ Осетия, Македония, Украина, Греция, Төркиә һәм Рәсәйҙән Башҡортостан, Сыуашстан вәкилдәре ҡатнашты. Сәхнәлә барлығы 600-ҙән ашыу бейеүсе сығыш яһаны. Әйткәндәй, ун көн дауамында һәр кис иҫ киткес концерттар булды. Мин ул концерттарҙа башҡорт халыҡ йырҙарын, ҡобайырҙар, "Урал батыр", "Заятүләк менән Һыуһылыу" кеүек эпостарыбыҙҙан өҙөктәр башҡарҙым, ҡумыҙҙа уйнаным. Тамашасылар бик ҡыҙыҡһынып һәм яратып ҡабул иттеләр.

Әйткәндәй, Рида былтыр бер ай Төркиәнең баш ҡалаһы Анкарала уҡып ҡайтҡайны. Был уға төрөк телен, төрөк халҡы мәҙәниәтен тәрәнерәк өйрәнергә ярҙам итте. Ғөмүмән, Рида сит телдәрҙе мауығып өйрәнеүселәрҙән һанала. Ул ижад менән генә түгел, спорт менән дә шөғөлләнә, ғилми эшмәкәрлеккә лә тартыла. Юҡҡа ғына уны университет администрацияһы Рәсәй Президенты стипендиаты итеп тәҡдим итмәгәндер. Бына шундай тырыш ҡыҙ инде беҙҙең Ридабыҙ.

**Юлиә ҒӘЛИӘСКӘРОВА,**
**БДПУ студенты.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ҠОШСОҠ, ИСЕМЕҢ НИСЕК?



**Һуна өйрәк** - русса кряква. Ҡыр өйрәгенең бер төрө, ҡыр өйрәктәре тибындағы ҡоштарҙан иң ҙуры һанала. Төҫө миҙгелгә ҡарап үҙгәрә: яҙғыһын ата һуна өйрәктең башы муйынға тиклем йылҡылдап торған ҡуйы йәшел төҫтә була. Түше, арҡаһы - көрән, эсе аҡ төҫтә. Был ҡоштар әле республикала ярайһы уҡ киң таралған, ә бына ҡалған ҡыр өйрәктәре аҙайыуға табан бара. Әйҙәгеҙ, уларҙың башҡортса атамаларын һәм русса тәржемәләрен белеп, хәтерҙә ҡалдырайыҡ: ҡылғойроҡ - шилохвост; ҡашҡалаҡ, ҡашҡа өйрәк - свиязь; һоро өйрәк - серая утка; ҡашыҡморон - широконожка; һыҙғыраҡ сөрәгәй - чирок свистунок; керелдәк сөрәгәй - чирок трескунок; ерәнсә сумғыс - красноносый нырок; сумғалаҡ өйрәк - красноголовый нырок; ала сумғыс өйрәк - хохлатая чернеть; ҡарабаш өйрәк - морская чернеть; мәрйенгүҙ - белоглазый нырок; эяла - морянка; боған, буған - гоголь; ҡарасабан - обыкновенный турпан; аҡсабан, аҡ өйрәк - луток; ҡушы, беле - длинноносый крохаль; ҡушбаш өйрәк, балыҡсы өйрәк - большая крохаль; аҡбаш өйрәк, күк томшоҡ - савка.

**Сел, божор** - русса рябчик. Күгәрсендән күпкә ҙурыраҡ, ерән төҫтә, арҡаһынан сыбар тимгелдәр төшкән ҡош. Түшендә һәм эсендә ҡанаттары - ҡара, осо - аҡ төҫтә, ата селдәрҙең муйынында ҡара табы була. Ерҙән осоп киткән сағында бик ныҡ тауышланалар, унын ҡарауы, һауанан тауышһыҙ ғына осоп төшәләр. Парлы йәшәйҙәр, йәй аҙаҡтары - көҙ башында ҙурайған себештәре менән бергә булалар. Ҡыш етһә, сатлама һыуыҡтар ваҡытында ҡарҙы "өңөп" ултыралар. Тауыш биреүенә килгәндә, ата ҡоштоң тауышы нескә генә һыҙғырыуҙы хәтерләтә. Башҡортостандың бөтөн урманлы райондарында ла киң осрай.

**М.Г. Баяновтың һәм А.Ф. Маматовтың "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабын файҙаланып,**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләнe.**
**(Дауамы бар).**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ҠУРАЙСЫЛАР ИШӘЙӘ

**Ошо көндәрҙә Октябрьский ҡалаһында республика Ҡурай байрамы булып үтте. Башҡортостандан тыш унда Силәбе, Төмән, Свердловск өлкәләренән, Мордва, Удмурт, Мари Иле республикаларынан, Пермь крайынан ҡурайсылар ҡатнашты.**

Беренсе тапҡыр сара 2001 йылда үткәрелеп, унда республиканан 130 ҡурайсы ҡатнашҡайны. Былтыр конкурсанттар һаны 270-кә етһә, быйыл иһә улар тағы ла күберәк - барлығы 297 бәйгесе йыйылды. Был ҡурай бәйгеһенең популярлығы тураһында ғына түгел, республикала халҡыбыҙҙың был милли музыка ҡоралына һөйөү, ҡыҙыҡһыныу артыуы тураһында ла һөйләй.

Бәйге ике йәш төркөмөндә барҙы. 16 йәшкә тиклемге төркөмдә 30 ҡурайсы һәм 11 ансамбль ярышһа, өлкән төркөмдә 22 ҡурайсы һәм 7 ансамбль сығыш яһаны. Бәйге шарттарына ярашлы, һәр оҫта, ҡурайҙа уйнауҙан тыш, үҙе башҡарған көйҙөң тарихын да белергә тейеш ине. Һәр ҡатнашыусы был шартты еренә еткереп үтәне.

Көсөргәнешле бәйгенән һуң еңеүселәр билдәләнде. Дүрт кеше - беренсе урынға, ете ҡатнашыусы - икенсе, бишәүһе өсөнсө урынға лайыҡ булды. Призлы урындар алыусылар дипломдар, сертификаттар менән бүләкләнде. Фестивалдең иң оло һәм иң кесе ҡатнашыусылары - Бөрйән районынан 76 йәшлек Дәүләтбай Рәхмәтуллин менән Миәкә районынан туғыҙ йәшлек Айгиз Диниев махсус бүләккә лайыҡ булды. Ә Гран-при Благовещен ҡалаһынан Айнур Назаровҡа эләкте. Уға 100 мең һумлыҡ аҡсалата бүләк тапшырылды.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨНДӨҢ - КҮҘЕ,
## төндөң ҡолағы бар

Мең көн ҡолға булып йөрөгәнсе, бер көн кеше булып йөрөгәнең яҡшы.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Беҙҙең бәхетһеҙлектәрҙең сере шунда: бәхетлебеҙме, юҡмы, тип уйланырға ваҡытыбыҙ күп.

**(Б. Шоу).**

Бәхет - ул үҙ яҙмышыңа күнеү һәм тормоштағы хәлең менән ҡәнәғәт булыу.

**(Эразм Роттердамский).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Уҡытыусы дәресен башлап, бер ҡулына яртылаш һыу һалынған стакан тотҡан һәм уны уҡыусыларына күрһәтеп, шулай тип һораған: "Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, был стакандың ауырлығы күпме икән?" Уҡыусылар ауыҙынан төрлө яуап ишетелгән: "50 грамм", "125 грамм". "Ысынында, был стакандың күпме тартҡанын мин үҙем дә белмәйем, үлсәп ҡараманым... - тигән уҡытыусы.- Ә шулай ҙа әйтегеҙ әле: был стаканды бер нисә минут тотоп торһам, миңә нимә буласаҡ?" "Бер ни ҙә булмаясаҡ", - тип яуаплаған уҡыусылар. "Әгәр уны бер сәғәт буйы тотоп торһам, нимә буласаҡ?"- тип һораған уҡытыусы. Уҡыусыларҙың береһе:"Һеҙҙең ҡулығыҙ ауыртасаҡ", - тип яуап биргән. "Дөрөҫ, - тигән уҡытыусы, - әгәр ҙә ошо стаканды көнөҙөно тотоп торһам, миңә нимә буласаҡ?" "Ҡулдарығыҙ ойоясаҡ, мускулдар көсөргәнештән ауыртасаҡ, һеҙгә хатта врачҡа күренергә тура киләсәк", - тигән икенсе уҡыусы. Барыһы ла ҡысҡырып көлгән. "Улайһа, әйтегеҙ әле: көнөҙөнөнә был стакандағы ауырлыҡ үҙгәрәме ни?"- тип һораған тағы уҡытыусы. "Юҡ". "Шулай булғас, уны көнөҙөно күтәреп тороуҙың әҙемтәләре нилектән килеп сыға, тип уйлайһығыҙ?" Уҡыусылар уҡытыусының был һорауына яуап бирә алмай, тынып ҡалған. "Әле әйтеп үткән ауыр хәлдә ҡалмаҫ өсөн хәҙер миңә нимә эшләргә һуң?"- тип мөрәжәғәт иткән уҡытыусы. Бер нисә тауыш:"Стаканды өҫтәлгә ҡуйығыҙ", - тип яуаплаған. "Эйе, шулай, - тип һөйләп киткән уҡытыусы. - Тормош ауырлыҡтары менән дә шулай эшләргә кәрәк. Әгәр ҙә улар тураһында һеҙ ун минут ҡына уйлаһағыҙ, барыһы ла яҡшы. Әгәр ҙә уларҙы һеҙ башығыҙҙан сығармай, бер туҡтамай уйлаһағыҙ, һеҙ үҙегеҙҙе үҙегеҙ ауыр хәлгә ҡуйырһығыҙ. Килеп тыуған проблемалар тураһында көнөҙөно уйлау һеҙҙе һәләкәткә илтәсәк, һеҙ хәлдән таясаҡһығыҙ, ауырый башлаясаҡһығыҙ. Әлбиттә, тормошоғоҙҙоң ҡатмарлыҡтары һәм проблемалары тураһында уйлау мөһим. Ләкин уларҙы ваҡытында башығыҙҙан сығарып ташлау, уйҙарығыҙҙы яҡшыға көйләү ҙә мөһим. Шуға ла һәр көн кисен борсолоуҙарҙы еңеп, яҡшы уйҙар менән йоҡоға талығыҙ. Ул саҡта һәр иртәлә яҙмыш ҡуйған һынауҙарҙы еңерлек көс менән йоҡонан уянырһығыҙ...".**

1158221891006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 20 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5006
Заказ 3535